ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

28-3 октябрь - ноябрь (карасай - ҡырпағай) 2023

№42 (1084)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! "Киске Өфө" (индексы ПР905) гәзите менән бергә булыусы аңлы, зыялы уҡыусыларыбыҙҙы баҫмабыҙға 857 һум 04 тингә 2024 йылдың беренсе яртыһы өсөн дә яҙылып ҡуйырға саҡырабыҙ. Ә беҙ һеҙҙе рухиәт менән һуғарыуҙы, кәрәкле мәғлүмәттәр еткереүҙе дауам итербеҙ, тигән вәғәҙәбеҙҙе яңыртабыҙ. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер матур ғына китаптарға лайыҡ буласағын да онотмағыҙ. Бергә булайыҡ!***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***


БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Файҙаһыҙ ғилем хаҡында фәлсәфә,**
йәки Ни өсөн мин төймәле телефонға күстем?



6

**Депутат Байғускаровтың тормош сәхифәләре,**
йәки Ҡалмаҡтан - Өфөгә, Өфөнән Мәскәүгә илткән юл



8-10

**Сәхнәләге һәм тормоштағы Айгөл**



11

**Физаҡәрлек,**
йәки Йөрәгендәме Рәми рухы, милләттәш?



12


## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### ? Телефоныңа муттар шылтыратамы, уларҙан нисек һаҡланаһығыҙ?

***Йәҙгәр ИШМӨХӘМӘТОВ, эшҡыуар, Стәрлетамаҡ ҡалаһы:*** Ҡуйығыҙ инде был муттарҙы, тамам себен-серәкәй ише маҙаға ғына тейәләр. Кеше хәҙер быға буйтым өйрәнеп тә бөттө бит инде, күптәр уларҙың телефон һандарын да ятҡа белә һәм яуап бирмәйенсә, кеҫә аппаратын һүндереп кенә кенә ҡуя башланы. Тик шулай ҙа әрһеҙҙәрҙе был барыбер туҡтата алмай: яңынан-яңы номерҙарҙан яңынан-яңы "йомош " тапҡан булып, туҡтауһыҙ шылтыратыуҙы дауам итәләр. Ә бит уларҙың алдағынан төп башына ултырыусыларҙың һаман табылып тороуын әйт! Гәзиттәрҙә лә яҙалар был хаҡта, радио-телевизорҙан да һөйләп кенә торалар, социаль селтәрҙәр ана шундай ғибрәт хәлдәр менән тулған - юҡ, кешегә аҡыл инмәй икән инмәгәс! Әллә шул тиклем аңһыҙлыҡ, наҙанлыҡ көсләмө бәғзе берәүҙәрҙә? Уныһы ла барҙыр, тиһәң, заманса гаджеттар менән эш итә белә үҙҙәре, дуҫ-иш-туғандары менән аралашып, донъя хәлдәрен белеп-күреп торалар.

Шулайын-шулай ҙа, тик быңа күптән түгел вахтанан ялға ҡайтҡан бер дуҫымдың байтаҡ ҡына аҡсаһын һалдырып ала яҙҙы, суҡынмыштар! Һәр ваҡыттағыса, таныш түгел һандарҙан таныш булмаған әҙәмдең шылтыратыуынан башлана: Һаҡлыҡ банкының "хәүефһеҙлек хеҙмәтенән" тип таныштыра, үҙенең, шулай уҡ дуҫымдың исем-шәрифтәрен атай һәм уның картаһынан кемдеңдер аҡса алырға маташыуын, ләкин был "уяу" хеҙмәттең быға юл ҡуймайынса, ғәмәлгә бик һалыуҙары, хәҙер иҫәп хәүефһеҙлеген тикшереү өсөн карта номеры кәрәклеген хәбәр итәләр. Өйрәнелгән, күп ҡабатланған ябай ғына схема, уйлап ҡараһаң, тик тап быңа шул урында "яна" ла инде күптәр. Ялында иркенләп күңелләнеп алған был дуҫ та картаһы номерын әйтә лә... "телен тешләй": йәш кешенең фекер ебе йылғырыраҡ булып сыға, күрәһең - шунда уҡ ул параллель рәүештә "Сбербанк онлайн" ҡушымтаһын асып, аҡсаһын магазинға алып йөрөй торған көндәлек сығымдар картаһына күсерә һала. Шулай итеп, ул 10 йылдан ашыу Себер "һөргөнө"ндә бил бөгөп тапҡан хәләл монаятын һаҡлап алып ҡала. Дуҫты ныҡ ҡына шелтәләп, үҙе өсөн ҡыуанһам да, башҡаларҙы уйлап, йәлләп ҡуйҙым - алданыусылар ҙа байтаҡ бит һаман. Уларға үҙемдеке кеүек юлды ҡулланып, муттан һаҡланыуҙың ябай ғына юлын әйтәйем: таныш түгел номерға яуап бирмәү. Кәрәк кеше һине барыбер таба ул, ә быңа намыҫһыҙ муттар бер электерһә, тиҙ генә ысҡындырмаясаҡ! Шуны онотмағыҙ, йәмәғәт, һәм етер инде, алданыуҙан туҡтағыҙ!

## КӨН ТЕМАҺЫ

# БЫЛ МӘКТӘПТӘРҘӘ...

### милли һәм этномәҙәни үҙенсәлектәр үҙәк урында




**Был аҙнала Өфөлә Полилингваль белем биреү буйынса халыҡ-ара форум булып уҙҙы. Был сара юҡҡа ғына республикала үткәрелмәй - Башҡортостанда Өфөлә, Нефтекамала, Стәрлетамаҡта, Учалыла, Сибайҙа, Мишкә районы Мишкә ауылында һәм Хәйбулла районы Аҡъяр ауылында полилингваль мәктәптәр эшләй. Бынан тыш республика буйынса полилингваль кластар ҙа байтаҡ ҡына. Дөйөм алғанда, был белем усаҡтарында 7500 уҡыусы белем ала, уларҙың 1091-е - беренсе класта уҡый.**

(Дауамы 5-се биттә).

## БАШ ҠАЛАМ

# БАРЫБЫҘ ҘА ЯУАПЛЫ,

### район башлығы ғына түгел...

**Үҙәктән йырағыраҡ ятҡанғамы, Дим районы үҙе бер айырым ҡала һымаҡ ул. Башлыса баҡсалар, шәхси йорттарҙан торған район һуңғы йылдарҙа күренеп үҙгәрҙе, яңы йорттар ғына түгел, яңы микрорайондар ҡалҡып сыҡты. Бөгөн уның урамдарын тәртипкә килтереү йәһәтенән күп эш башҡарыла. Әле көҙ хөкөм итә, әммә урамдарҙа гортензиялар күҙҙең яуын ала.**



(Дауамы 2-се биттә).

12+

@KISKEUFA
Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!
смартфон камераһын төбә

✓ *Смартфонығыҙға антивирус ҡуйҙырығыҙ. Үҙегеҙгә кәрәге юҡ тип иҫәпләгән шылтыратыуҙарға бик һалығыҙ. Һәр хәлдә лә таныш түгел номерҙан шылтыратыусы таныш түгел кешеләр менән хәбәр сурытып тормағыҙ.*



БАШ ҠАЛАМ



# БАРЫБЫҘ ҘА ЯУАПЛЫ, район башлығы ғына түгел…

(Башы 1-се биттә).

Былар барыһы ла ошонда йәшәүсе халыҡ өсөн эшләнә. Тротуарҙар яңырҙы, юлдарға ла яйлап асфальт йәйелә. Әлбиттә, эҙләһәң, ек табырға була. Урамдарҙа ямғыр һыуҙарын ағыҙып ебәреүсе ҡоролмалар юҡ, шуға ла көҙөн-яҙын-йәйен һыу күл булып йыйылып ята, асфальты бөтөнләй ҡырылып бөткән юлдар бар. Былары беҙҙең ҡулдан килмәгән етешһеҙлектәр. Әммә үҙебеҙҙән торған нәмәләр ҙә бар, әйтәйек, таҙалыҡ һәм төҙөклөктө һаҡлау. 2013 йылда Мусоргский урамы эргәһендә велосипед юлы асылғайны. Унда велосипедсы скульптураһын да ҡуйғайнылар. Ул бахыр скульптураны емерә-төҙәтә торғас, хәҙер тыныслыҡта ҡалдырҙылар, ахыры. Ә бына велосипед юлы, ысынлап та, балалар һәм спорт менән шөғөлләнеүселәр өсөн бик уңайлы. Ҡышын унда яҡын тирәләге 2-3 мәктәптең физкультура дәрестәре үтә, уҡыусылар саңғыла йөрөй. Ҡышын - саңғыла, йәйен скандинавса йөрөш менән шөғөлләнеүсе ололарҙың иҫәбе юҡ.

Тик был юлды йорттарында эт аҫраусылар ҙа ярата. Иртә таңдан ҡараңғы төнгә тиклем эттәрен шунда йөрөргә алып сығалар. Ҡала шарттарында эт менән урамда йөрөүҙең үҙенең ҡағиҙәләре бар, эт мотлаҡ бәйҙә булырға тейеш һ.б. Шулай уҡ этегеҙ урамда хәжәтен үтәй ҡалһа, һеҙ уны һалып алырға тейешһегеҙ. Бына ошо пункт бөтөнләй үтәлмәй һәм һөҙөмтәлә велосипед юлының тирә-йүне эт тиҙәгенә бата. Ҡышын аҡ ҡар өҫтөндә был күренеш бигерәк йәмһеҙ. Әле ҡала хакимиәте яңы ғына эт менән йөрөү өсөн тәғәйенләнгән махсус майҙансыҡтар исемлеген раҫланы. Һәр районда бының өсөн урын бүленә, әммә унда ла кемдер һеҙҙең арттан йыйыштырып йөрөмәйәсәк бит. Был - һеҙҙең яуаплылыҡ. Әгәр ҙә мул ғына штраф һала башлаһалар, бәлки, һиҫкәнерҙәр ҙә ине. Әлегә беҙ генә берәй нәмәгә баҫып ҡуймайыҡ тип, тертләй-тертләй генә, балаларҙы йүгермә-һикермә тип тыя-тыя үтәбеҙ был юлдан.

Шулай уҡ күгәрсен ашатырға ятарыусылар ҙа коммуналь хужалыҡтарға күпме ҡатмарлыҡ тыуҙыра. Батҡаҡланып, ризығы-бысрағы бергә уҡмашып ята. Ҡала күгәрсендәре һеҙҙең өҫтәмә ашатыуығыҙға мохтаж түгел, улар үҙҙәренә ризыҡты үҙҙәре лә таба. Ергә ташланған икмәк киҫәктәре һеҙҙең киң күңелле булыуҙы түгел, бәлки, тәртипһеҙ булыуығыҙҙы күрһәтә. Шуға ла район өсөн уның башлығы ғына түгел, үҙебеҙ ҙә яуаплы икәнебеҙҙе иҫтә тотһаҡ ине.

**Нәфисә АХУНОВА.**

БЫЛ АЙҘА...

# ҺЫУЫҠ ТА ДОШМАНДЫ ҠЫУЫШҠАН

**Көҙ ахыры менән ҡыш башын бәйләп тороусы ҡырпағайға аяҡ баҫабыҙ. Климатологтар фекеренсә, ноябрь күберәк ҡышҡы айға тарта, сөнки улар фәнендә ҡыш, асылда, 7 ноябрҙә башлана. Һәр хәлдә, халыҡ тарафынан уға "ҡырпағай" тигән атама юҡҡа бирелмәгәндер бит.**

Үткән быуаттың 70-80-се йылдарында, беҙ студент саҡтарҙа ла әле, 7 ноябрь демонстрацияһына сыҡҡанда, көндәр һыуытып, ҡар ышаныслы ятҡан була ине инде. Дөрөҫ, заман үтә килә, климат та үҙгәрә, һауа торошо йылына бара. Тик шулай ҙа тәбиғәт йыш ҡына уҫал холҡон күрһәтеп алыусан. Мәҫәлән, 21-се быуатта Рәсәйҙә иң һалҡын ноябрь 2016 йылда теркәлә. Уралда һәм Көнбайыш Себерҙә ул осор һауа температураһы нормалағынан 4-8 градусҡа түбән төшә, йәғни 2016 йылдың ҡырпағайындағы һауа торошо архивынан күренеүенсә, Башҡортостанда ул осор ай башында минус 5-кә тиклем һыуытһа ( төндә -19-ға тиклем), ай уртаһында көндөҙ минус 10-16, ә төндә - 20 - 27 градусҡаса барып етә.

1941 йылда Гитлер илбаҫарҙарының илебеҙ йөрәге Мәскәүгә бәреп инеренә ни бары 25-30 км ҡалғас, совет һалдаттарына уларҙы ҡыйратырға тап ана шул ноябрь менән декабрь һыуығы ла ярҙам иткән, тип яҙа тарих. Ә унан алда, 1941 йылдың 7 ноябрендә Юғары Баш командующий Иосиф Сталиндың тәҡдиме менән ҡәтғи серлелек шарттарында Мәскәүҙең Ҡыҙыл майҙанында Октябрь революцияһының 24 йыллығы айҡанлы хәрби парад үткәрергә ҡарар ителә. Дөрөҫ, юғары партия етәкселеге ултырышында был тәҡдимен Сталинға бер нисә тапҡыр ҡабатлап, ныҡышлыҡ күрһәтергә тура килә, сөнки теләһә ҡайһы минутта дошман авиацияһы баш ҡаланы бомбаға тотоу ғына түгел, ә баш ҡалаға бәреп инеү хәүефе лә ҙур була һәм шуға күрә хөкүмәт ағзалары икеләнеү белдерә: бындай ваҡытта ниндәй парад хаҡында һүҙ булыуы мөмкин, былай ҙа Мәскәү көн дә бомбаға тотола. Ләкин тап бына ошо мәлдә совет һалдаттары һәм тыл хеҙмәтсәндәре рухын күтәрергә, дошманды ҡыйратыуға ышанысты нығытырға кәрәк була һәм революция йыллығы хөрмәтенә парадҡа тап шундай миссия йөкмәтелә лә. Был ваҡытта иһә Мәскәү янында ғына, уның көнбайыш тарафында ҡаты алыштар бара: совет һуғышсылары тиңһеҙ оборо-

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Телефоныңа муттар шылтыратамы, уларҙан нисек һаҡланаһығыҙ?

***Рөстәм ҒИЛЕМШИН, юрист:*** Телефондан файҙаланып, кеше аҡсаһын урлаусылар тамам оятын юғалтты. Уларҙың һөжүме кәмемәй, киреһенсә, намыҫһыҙ муттар торған һайын ҡомһоҙлаша, ысулдары төрлөләнә, яуызыраҡҡа әйләнә бара. Былтыр ғына әле, мәҫәлән, уҫал уйлы әҙәмдәр тарафынан кеше кеҫәһенән 2021 йылға ҡарағанда күпкә артығыраҡ аҡса урланған: 14,1 млрд һум! Был үҙенә күрә бер рекорд, тип әйтергә мөмкин. Ә бына кредит ойошмалары былтыр урланған аҡсаларҙың 4,4 процентын, йәғни 618,4 млн һумды ғына, ҡайтарышып бирә алған. Был да бик мөһим, әлбиттә, ләкин бына кешеләрҙең уйлап-нитеп тормаҫтан таныш түгел яуыз уйлы әҙәмдәргә үҙ теләктәре менән ҙур суммала аҡса күсереүҙәрен һис аңлап булмай.

Дөрөҫ, иң беренсе яуыз уйлыларҙың оҫта психолог булыуын танырға кәрәк. Улар тәүҙә ҡорбандары хаҡында ентекле мәғлүмәттәр туплай: исем-фамилия һәм телефон һандары ғына түгел, ә ҡайҙа эшләүе-йәшәүе, хатта һаҡлыҡта ятҡан иҫәбе хаҡында ла. Банк хеҙмәткәрҙәренә лә ышаныс юҡ, унда ла клиенттар мәғлүмәттәрен һатып ултырыусы "һуҡыр сысҡан"-дар эшләүе ихтимал бит. Мәғлүмәт сығанаҡтарында хәбәр итеүҙәренсә, 2022 йылда Рәсәй банкы элемтә операторҙарына 756 мең телефон номеры ебәргәнлеге асыҡланған һәм афериcтар тап ошо телефон эйәләренә шылтыратҡан.

Телефон аша бурлыҡтан һаҡланыуҙың юлдары күп, әлбиттә, бының өсөн муттарҙың "эшмәкәрлек" ысулдарын ентекләп өйрәнергә, ә уның өсөн IT технологияны улар кеүек үк яҡшы белергә кәрәк, ә был бөтә кешенең дә ҡулынан килмәй, шуға күрә иң ышаныслы юл - һеҙгә шылтыратҡан шикле кешегә ниндәйҙер мәғлүмәт биреү түгел, хатта һөйләшеп тә тормаҫҡа, бик булмаһа: "Ғәфү итегеҙ, һеҙҙең хеҙмәтегеҙгә мохтажлығым юҡ", - тип телефонығыҙҙы һүндереү кәрәк. Ҙур бәләгә тарымаҫ өсөн бары ошондай ҡыҫҡа ғына яуап. Улар менән әрләшеү, һүгенеү кеүек "алым"дар ҙа хупланмай, сөнки бөтөн мәғлүмәттәрҙе ҡулға төшөрөп, үс алыуҙары ла бар. Икенсенән, әгәр ҙур сумма аҡсағыҙ бар икән, уны дебет картағыҙҙа түгел, ә депозитта һаҡлау яҡшыраҡ, сөнки ул осраҡта, банк менән килешеү нигеҙендә, һәр тинегеҙгә тиклем сығымдарығыҙ хаҡында СМС-хәбәр алып торасаҡһығыҙ. Әгәр бурҙар хоҡуҡ һағы хеҙмәткәре булып ҡыланалар икән, унан ниндәй подразделениеға ҡарауын, адресын, начальнигын һорашып, үҙем киләм, тип өркөтөргә, һөйләшеүҙе яҙҙырып алыуығыҙ хаҡында әйтергә була. Һәм, ысынлап та, хоҡуҡ һаҡлау органдарына был хаҡта мотлаҡ хәбәр итеү кәрәк. Тағы бер-ике генә кәңәш: телефонығыҙҙы юғалтҡан хәлдә уның менән файҙалана алмаһындар өсөн SIM картағыҙға ПИН-код ҡуйығыҙ. Һеҙҙең исемдән ышаныс ҡағыҙы менән файҙаланмаһындар өсөн тыйыу һалығыҙ. Бының өсөн яҡындағы мобиль оператор офисына мөрәжәғәт итергә кәрәк. Смартфонығыҙға антивирус ҡуйҙырығыҙ. Үҙегеҙгә кәрәге юҡ тип иҫәпләгән шылтыратыуҙарға бик һалығыҙ. Һәр хәлдә лә таныш түгел номерҙан шылтыратыусы таныш түгел кешеләр менән хәбәр сурытып тормайынса, аппаратығыҙҙы һүндереп ҡуйығыҙ. Хәҙер бындай хәлде аңлап ҡабул итәләр, йомоштары булһа, кәрәкле кешеләр һеҙҙең менән бәйләнешкә барыбер таныштарығыҙ аша булһа ла үҙҙәре сығыр.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Уҙған тәүлектә Башҡортостанда коронавирус йоҡтороуҙың 91 яңы осрағы асыҡланған. Хәбәр ителеүенсә, бөгөнгө көндә республикала 103 пациент, шул иҫәптән 62 оло йәштәге кеше стационарҙа дауалана. Ә 1039 ауырыу өй шарттарында мәкерле сиргә ҡаршы көрәшә, шуларҙың 516-һы - 60 йәште үткән.

✓Республика етәксеһе үҙенең указы менән мәғариф һәм фән министры вазифаһына министрҙың беренсе урынбаҫары булып эшләгән Илдар Мәүлитбирҙинды, Башҡортостан Республикаһының Ведомство-ара йәмәғәт именлеге советы секретары итеп Валерий Олейникты, Шаран районы хакимиәте башлығы итеп Марат Әхмәҙуллинды, ә Өфөнөң Совет районы хакимиәте башлығы итеп Айҙар Баҙғетдиновты тәғәйенләне.

✓Рәсәй Президенты Владимир Путиндың указы менән Башҡортостан Хөкүмәте аппараты етәксеһе Азамат Абдрахманов "Хеҙмәттә өлгәшкән уңыштары һәм күп йыллыҡ намыҫлы хеҙмәте өсөн" Дуҫлыҡ ордены менән бүләкләнде. Рәсәй Хөкүмәте бойороғо менән Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министрының беренсе урынбаҫары - республиканың иҡтисади үҫеш һәм инвестиция сәйәсәте министры Рөстәм Моратов иҡтисад тармаҡтарын һанлы үҙгәртеп ҡороу проекттарын тормошҡа ашырыуға индергән өлөшө өсөн Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәтенең Рәхмәт хаты менән билдәләнде.

✓Хәбәр ителеүенсә, Владимир Путин күптән түгел чиновниктарҙың илебеҙ автомобилдәрендә йөрөргә тейешлеген әйткәйне. Сәнәғәт һәм сауҙа министрлығы муниципаль һәм дәүләт хеҙмәткәрҙәре өсөн автомобилдәрҙең маркалары исемлеген төҙөгән. Унда илебеҙҙә махсус контракттар сиктәрендә етештерелгән VIN номерлы автомобилдәр бар. Ведомство тәҡдиме буйынса, эш өсөн Lada (моделдәр: Granta, Vesta, Vesta SW Cross, Niva Legend һәм Niva Travel), Aurus (Komendant, Senat), УАЗ ("Патриот", "Профи", "Пикап", СГР, "Хантер"), Москвич (3, 3е, 6), Evolute (I-Sky, I-Joy, I-Pro)һәм Haval (Dargo, Jolion, H9, F7/F7x) еңел автомобилдәрен һатып алырға мөмкин.



на тота. Хәрби частар командирҙарына парад хаҡында Мәскәү ваҡыты менән 23 сәғәттә генә хәбәр ителә, парад башланыу ваҡыты иһә ике сәғәткә алға күсерелә. Бәхеткә күрә, иртәнге сәғәттәргә ҡарай, баш ҡалаға көтмәгәндә циклон ябырыла - көслө итеп ҡар яуа башлай, өстәүенә, шыҡырайтып һыуытып ебәрә. Беҙҙекеләргә был ҡыуаныска ғына була: тимәк, быңдай шарттарҙа немец авиацияһы һауаға күтәрелмәйәсәк! Парад башланыу ваҡытының үҙгәртелеүе хаҡында репортаж алып барырға тейешле операторҙар һәм режиссерҙарға хәбәр ителмәгәнлектән, улар һунлап килә һәм парадты ғына төшөрә ала, ә Сталиндың күренекле телмәрен парадтан һуң махсус павильон ҡороп, юлбашсынан ҡабат һөйләтеп төшөрөргә мәжбүр булалар. Парад хаҡында радионан трансляция алып барыла һәм тиҙҙән был хаҡта миллионлаған кешегә мәғлүм була һәм ул үҙ маҡсатына - иң тәүҙә рух күтәренкелеге йәһәтенән ҡуйылған маҡсатына өлгәшә. Совет ғәскәрҙәре Ҡыҙыл майҙандан тура фронтҡа йүнәлә. Бөтөн донъя халҡына шул билдәле була : Сталин - Мәскәүҙә! Юғиһә бит дошман агитацияһы, Сталин Мәскәүҙән ҡасҡан, имеш, тип ялған тарата. Тимәк, Мәскәү йәшәй һәм көрәшә; тимәк, дошман Мәскәүгә инә алмаясаҡ! Һәм шулай килеп сыға ла. Аҙаҡ парадты төшөргән хроника "Мәскәү янында немец-фашист ғәскәрҙәрен ҡыйратыу" тигән документаль фильм төшөрә; 1942 йылда ул АҠШ-та ла күрһәтелә һәм "Оскар" премияһына лайыҡ була.

Әйткәндәй, беҙ бит шул ваҡыттағы һауа торошо хаҡында һүҙ башлағайныҡ. Тарихта легендаға тиң мәғлүмәт йөрөй: гитлерсыларҙы Мәскәү янынан алып ташларға "генерал Мороз" , йәғни ноябрь һәм декабрҙәге сатлама һыуыҡ та ярҙам итә. Ә ул көндәрҙә ниндәй һыуыҡ булыуы хаҡында парад оркестры етәксеһе - легендар "Славянканың хушлашыуы" музыкаһының авторы Василий Агапкиндың ҡыҙы, ул саҡта 20 йәштә булған Аза Агапкина үҙенең иҫтәлектәрендә ошолай тип яҙа: "92 йыл йәшәп, ул саҡтағы ноябрь һыуығылай көн торошон күргәнем булманы. Оркестр менән дирижерлыҡ иткән атайым команда биреү өсөн ауыҙын да аса алмай: ирендәре бер-беренәнә ҡуша туңған. Аҙаҡ парад һуңынан оркестр сәхнәһенән төшә алмай: итектәре торған еренә ҡуша туңа, бер һалдат ярҙамында көскә айырып алалар...Музыканттар инструменттарын тындары менән, шулай уҡ шинелдәре эсенә тығып, тәндәре менән йылытып алалар..." Ошо парадтан һуң бер ай барған ҡаты һуғыштар һөҙөмтәһендә дошман сигенергә мәжбүр була һәм илһөйәрлек рухын байраҡ итеп алған Ҡыҙыл армия ғәскәрҙәре һөжүмгә күсеп, дошманды баш ҡала янынан 160-200 километрғаса алып ташлай. "Тарихты үҙгәртеүсе парад" тип атайҙар **1941 йылдың 7 ноябрендәге** Ҡыҙыл майҙан тантанаһын. Өстәүенә, Мәскәүҙе ҡышҡа тиклем алырға ниәтләгән Гитлерҙың ҡышҡы кейемһеҙ армияһы тап ошо осор башланған ҡаты һыуыҡҡа сыҙай алмай, күптәре туңып үлә, сөнки уларҙың татлы йоҡоһонда беҙҙең "Катюша"лар телгә килеп, дошман позицияһын "сәләмләй" башлай һәм ҡурҡыштарынан эске кейемдәрҙә йүгерешеп сыҡҡан гитлерсылар тереләй туңып үлә. Ғөмүмән, алғы һыҙыҡта итек һәм ботинкаларҙа һуғышҡан фашист һалдаттарының 40 проценты аяғын туңдыра, йәмғеһе 133 меңләп һалдат өшөп туңыу сәбәпле, госпиталдәргә оҙатыла, йөҙәрләгән техника берәмектәре лә туңып, сафтан сыға. Әгәр һуғыш кинофильмдарында шәл ябынып, шарф, одеял ише сепрәк-һәләмәгә төрөнгән фашистарҙы күрһәтәләр икән, был һис арттырыу түгел. Ә бына быңдай һыуыҡтарға тыумыштан өйрәнгән совет ғәскәрҙәре өстәүенә йылы кейем менән дә тәьмин ителгән була. "Тундар, быймалар, йылы көртөй һәм эске кейемдәр - былар бөтәһе лә шул уҡ ҡорал ул",- тип юҡҡа ғына әйтмәгән маршал Г. Жуков. "Рустарға Аллаһ үҙе ярҙам итә", тип иҫәплägән немецтар. Шуныһы ҡыҙыҡ, Рәсәйгә һөҗүм иткән дошмандарҙың юлын киҫкән ҡаты һыуыҡтар бынан алда ла бер нисә тапҡыр була һәм тарихта ҡала. Мәҫәлән, 18-се быуаттағы Төньяҡ һуғышында - шведтар, 1812 йылғы беренсе Ватан һуғышында Наполеон армияһы һалдаттары "рус һыуығы"нан күпләп зыян күрә. Бөтәһе лә шулай булған, әлбиттә, ләкин Мәскәү янында фашистарҙы ҡыйратыуҙа Ҡыҙыл армия ғәскәрҙәренә һәм улар менән бергә дошманға ҡаршы көрәшкән ополченецтар - баш ҡала граждандарына, шулай уҡ тыл эшсәндәренә иң ҡеүәтле ҡорал - Тыуған илде тыумыштан эскерһеҙ һөйөү тойғоһо, уның өсөн уйлап та тормай, йәндәрен аямауҙары хәл иткес әһәмиәткә эйә булған...

Ноябрҙә билдәләнеүсе күренекле даталар һәм һөнәри байрамдар: Менеджер, Суд приставы **(1)** көндәре, Рәсәйҙең хәрби дан көнө. Халыҡ берҙәмлеге көнө **(4)**, Хәрби разведка **(5)**, Рәсәйҙең хәрби дан көнө. Октябрь революцияһының 24 йыллығы хөрмәтенә Мәскәүҙең Ҡыҙыл майҙанында хәрби парад үткәрелгән көн **(7 ноябрь, 1941 йыл)**, Октябрь революцияһы, Килешеү һәм тәләктәшлек көндәре **(7)**, Халыҡ-ара КВН **(8)**, Бөтөн донъя сифат **(9)**, Рәсәй полицияһы, Бөтөн донъя йәштәр, Фән, Халыҡ-ара бухгалтерия **(10)** көндәре, Халыҡ-ара энергияны һаҡлау **(11)**, Бөтөн донъя пневмония менән көрәш **(12)**, РФ радиация, химик һәм биологик һаҡ ғәскәре, 112-се (16-сы гвардия) Башҡорт кавалерия дивизияһы, Бөтөн донъя мәрхәмәтлек **(13)** көндәре, Диабетҡа ҡаршы Бөтөн донъя көрәш **(14)**, Бөтөн Рәсәй хәрби хеҙмәткә саҡырылыусы (призывник) көндәре, Халыҡ-ара тәмәкенән баш тартыу **(16)**, Халыҡ-ара студенттар **(17)**, РФ Ракета һәм артиллерия ғәскәрҙәре, Бөтөн донъя юл һәләкәте ҡорбандары, Бөтөн донъя бала **(19)** көндәре, Бухгалтер, РФ Һалым ойошмаһы хеҙмәткәре, Бөтөн донъя сәләмләү, Бөтөн донъя телевидение **(21)** көндәре, Уландар көнө **(22)**, Бөтөн донъя мәғлүмәт, Рәсәйҙә әсә көндәре **(26)**, Диңгеҙ пехотаһы **(27)**, Мәғлүмәтте яҡлау көнө **(30)**.

**Ҡырпағайҙа тыуғандар:**

**9 -** балет артисы, педагог, РСФСР һәм БАССР-ҙың халыҡ артисы, Башҡортостан Республикаһының Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты **Леонора ҠЫУАТОВАға - 75 йәш** (1948).

**13 -** БАССР-ҙың атҡаҙанған ауыл хужалығы хеҙмәткәре, Кушнаренко районы "Большевик" колхозы тракторсыһы **Мөнирә ШӘЙБӘКОВАға - 75 йәш** (1948).

**14 -** яҙыусы, Башҡортостан һәм башҡорттар хаҡында әҫәрҙәр авторы **Николай КРАШЕНИННИКОВтың тыуыуына - 145 йыл** (1878-1941).

**19 -** Рәсәйҙең - атҡаҙанған, Башҡортостандың халыҡ артисы, М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры артисы, Ҡыйғы районының почетлы гражданы **Рәүис ЗАҺИТОВҡа - 75 йәш** (1948).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

## Телефоныңа муттар шылтыратамы, уларҙан нисек һаҡланаһығыҙ?

***Айгөл ХАРРАСОВА, Өфө радиоэлектроника, телекоммуникация һәм хәүефһеҙлек колледжы студенты:*** Һуңғы осор миңә һәм һабаҡташтарыма муттар шылтырата башланы. Уйлап ҡараһаң, фәҡир студенттың кеҫә яғы ла тап-таҡыр бит инде. Һәр хәлдә, беҙ аҡса бурҙары "клиенттары" түгел, уныһы раҫ. Шулай ҙа мин уларҙың осраҡлы килеп әләгеүҙәренән үҙемә һәм һабаҡташтарыма мәрәкә эшләп, күңел асып, уларҙың нервыларында уйнап алырға һәм үҙебеҙҙән биҙҙерергә булдым. Иң мөһиме, уларҙы көтөлмәгән реакция менән аптыраштa ҡалдырып, артабанғы "алгоритм"дарын өйрәнеү. Иң тәүҙә мин был йәһәттән ҡартатайым исулын ҡулланмаҡсы булдым, ул бер тапҡыр шул юл менән бимазалаусыларынан ҡотолоп торғайны. Шылтырау оҙаҡ көттөрмәне: йәш егет күп тапҡыр репетиция үткән яғымлы тауышы менән исемшәрифемде атап, минең картаға яңылыш ҡына күпмелер сумма аҡса күсереүҙәре хаҡында хәбәр итеп, миңә ул сумманы ниндәй иҫәпкә кире ҡайтарырға кәрәклекте аңлата башланы. "Аңланығыҙмы, мин һеҙҙе ишетмәйем",- ти был. Мин хас та ҡартатайым һүҙҙәре менән: "Ғәфү итегеҙ, мин урыҫса аңламайым бит әле, башҡортса һөйләгеҙсе, зинһар",- тигән булам. Шулай бер нисә тапҡыр ҡабатландың был диалог, ахырҙа, түҙемлеге бөткән "тәрбиәле" тауыш яман һүгенеү һүҙҙәре менән мине әрләй башламаһынмы! Ә мин шатланам ғына: тегенең түҙемлеге бөттө, ә мин һаман аңламағанға һалышып, тыныс, ғәйепһеҙ тауыш менән үҙ телемдә һөйләүҙе дауам итәм. Ахырҙа, енел аҡса кәҫәүсе иманһыҙҙың ниәте барып сыҡманы! Шулай итеп, был номер ҡабат мине борсоманы.

Башҡа муттарҙы ла мин ошо юл менән биҙҙереп бөттөм, ҡолағым тынсып ҡалды, хәҙер минең маҙаға теймәйҙәр. Һабаҡташтарым да хәҙер миңә айырым бер ихтирам менән ҡарай башланы кеүек, сөнки мин уларға әлләнән-әле, яйы сыҡҡан һайын: "Туған телеңде белеү фәҡәт файҙаға ғына, ул һәр ваҡыт кешегә ярҙамға килә", - тип ҡабатлайым.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓2023 йылдың октябренән махсус операцияла ҡатнашыусыларҙың эш хаҡы арта. 1 октябрҙән индексация булды, шуны иҫәпкә алып, хәҙер махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға кәмендә 210 мең һум түләнә, тип хәбәр итеlә Рәсәй оборона министры урынбаҫары Татьяна Шевцоваға һылтанма менән. Шулай уҡ хәрби пенсионерҙарҙы һәм уларҙың ғаилә ағзаларын пенсия менән тәьмин итеү кимәлен күтәреү өсөн 2023 йылда хәрби пенсиялар 10,5 процентҡа индексацияланды.

✓"Башҡортостан" мотоуҡсылар полкының Таһир Күсимов исемендәге батальон командиры "Сенсей" позывнойлы майорға подполковник дәрәжәһе бирелгән. Был хаҡта "Башҡорт батальоны" телеграм-каналы хәбәр итә. "Һеҙ был исемгә лайыҡ. Алда әле беҙҙе күп эштәр көтә. Һеҙ яҡшы офицерҙарҙың береһе. Киләсәктә лә шулай булһын, еңеүгә ынтылайыҡ, һалдаттарыбыҙ тураһында хәстәрлек күрәйек. Берҙәмлектә - көс", - тигән һүҙҙәр яңғырай видеояҙмала.

✓Миәкә районынан ауыл хужалығы предприятиеһы 42 тонна арпа ярмаһын Вьетнамға оҙатты. Быға тиклем ярма өлгөләре энтомологик, герболог һәм микологик экспертизалар үтте. Россельхознадзорҙың Башҡортостан буйынса идаралығынан хәбәр итеүҙәренсә, продукция өлгөләрендә карантин организмдары табылмаған һәм ул импортлаусы илдең фитосанитар талаптарына тап килә.

✓Башҡортостандың Транспорт һәм юл хужалығы министрлығы 8 ноябрҙәге аукционда бәләкәй ҡалалар һәм ауылдар өсөн урта класлы 159 автобус менән тәьмин итеүсене һайлап алырға йыйына. Һатып алыуҙы төбәк бюджеты финанслай. Автобустарҙы ике ай эсендә килтерергә кәрәк. Улар быйыл ғына сығарылған, 43 пассажирҙы һыйҙырырға тейеш. 6 октябрҙә "Башавтотранс"ҡа Өфөнең 226-сы маршрутын хеҙмәтләндереү өсөн 50 яңы автобус тапшырылды.

✓Мәскәүҙә "Йыл ғаиләһе" Бөтә Рәсәй конкурсы еңеүселәрен бүләкләү тантанаһы үтте. Илдең 85 еңеүсе ғаиләһе араһында Стәрлетамаҡ районының Рощинский ауылынан Әхмәровтар ҙа бар, тип хәбәр иттеләр Мәҙәниәт министрлығының матбуғат хеҙмәтенән. Ғаилә башлығы Рөстәм Рәсүл улы - Рощинский ауылының Мәҙәниәт һарайы мөдире, Анна Сергеевна - Балалар музыка мәктәбе уҡытыусыһы. Һөҡланғыс, уңған һәм ижади ғаилә "Ғаилә - традицияларҙы һаҡлаусы" номинацияһында еңеү яуланы.

*ҠЫҪҠАСА*

# ӨЛГӨ АЛЫРЛЫҠ

**Рәсәй Президенты Владимир Путин Президент ҡарамағындағы Физик культураны һәм спортты үҫтереү буйынса совет ултырышын үткәрҙе. Ултырыш спорт инфраструктураһын үҫтереү һәм йыһазландырыу мәсьәләләренә арналды.** Рәсәйҙең Спорт көрәше федерацияһы президенты Михаил Мамиашвили Башҡортостандың ауыл спортын үҫтереүҙәге уңыштарын, атап әйткәндә, "Ауыл тренеры" программаһын телгә алды. "Беҙ ауыл спорты мәсьәләләренә ҡағылдыҡ. Ыңғай миҫал итеп Башҡортостанда бойомға ашырылған "Ауыл тренеры" программаһын килтергем килә. Тренер баланы ҡыҙыҡһындыра, уға теге йәки был спорт төрө тарихында йөшәргә, балаға үҫешергә мөмкинлек бирә. Спортсылар өсөн был урын үҙенә йәлеп итеү үҙәгенә әүерелә", - тип билдәләне спикер. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, быйыл Башҡортостанда тағы 55 тренерҙың "Ауыл тренеры" программаһы буйынса 1 миллион һумлыҡ түләү аласағы хәбәр ителгәйне. Был проект иң яҡшы тәжрибәләрҙең береһенә әүерелде һәм 25-кә яҡын төбәктә индерелде.

✓ **2023-2025 йылдарҙа республикала 18,8 мең уҡыусы өсөн 17 яңы мәктәп төҙөләсәк. Был турала төҙөлөш һәм архитектура министры вазифаһын башҡарыусы Владислав Сидоркин белдерҙе.** Дәүләт-шәхси партнерлыҡ сиктәрендә киләһе йыл 6 мәктәп төҙөлә. Нефтекама, Стәрлетамаҡ, Шмидта 1-әр мәктәп төҙөлһә, 3-әүһе - Өфөлә. 2025 йылда Кузнецов затонында 2200 урынға иҫәпләнгән белем усағы ҡалҡып сығыр тип көтөлә, ул республиканың иң ҙур мәктәбе буласаҡ. Быйылғы йылдың аҙағына тиклем "Затон-Көнсығыш" микрорайонындағы мәктәп тапшырыласаҡ, әле унда электромонтаж, фасад, биҙәү эштәре бара, шулай уҡ тәҙрәләр ҡуйыла, территория тәртипкә килтерелә.

✓ **Башҡортостанда "Үлем менән ҡайҙа сауҙа итеүҙәре тураһында хәбәр ит" тигән иҫкәртеү акцияһының икенсе этабы башланды.** Ул 27 октябргә тиклем дауам итә. Республика халҡынан наркотиктар әҙерләү, ҡулланыу, һаҡлау һәм һатыу осраҡтары, притондарҙың урындары тураһында хәбәр итеүҙәрен һорайҙар. Мәғлүмәтте Башҡортостан буйынса Эске эштәр министрлығының ышаныс телефонына ҡалдырырға мөмкин: +7 (347) 279-32-92. Хоҡуҡ һаҡлау органдарына был хаҡта 02.мвд. рф сайты аша "Нет наркотикам" ҡушымтаһында, шулай уҡ +7 (347) 279-39-02 Башҡортостан буйынса Эске эштәр министрлығының дежур бүлегенә шылтыратып еткерергә була. Телефон: +7 (347) 279-39-02.

✓ **Башҡортостанда 2022 йылда һуңғы 20 йылда алкоголдән ағыуланып үлеүҙең минималь күрһәткесенә өлгәшелгән.** Республикала 12 айҙа 52 кешенең ғүмере өҙөлгән. Сағыштырыу өсөн: 2018 йылда - 211, 2019 йылда - 102, 2020 йылда - 73, 2021 йылда иһә 57 кеше яҡты донъя менән хушлашҡан. Шулай уҡ түңге ярты йыллыҡта республикала иҫерек килеш ҡылынған енәйәттәр һаны 11,6 процентҡа кәмегән. Күрһәткестәрҙең кәмеүе - хәмерҙе рөхсәт менән һатыу буйынса планлы эш һөҙөмтәһе, тип билдәләне сауҙа һәм хеҙмәттәр министры Алексей Гусев Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә. Ведомство мәғлүмәттәре буйынса, ағымдағы йылдың түңге ярты йыллығында республикала 2,5 миллион дал ҡаты алкоголь һатылған. Йән башына 6,2 литр спиртлы эсемлек тәшкил иткән. Хәмер һатып алыусыларҙың иң аҙы - Йәрмәкәйҙә, иң күбеһе - Өфө районында.

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

# ОЛО ФОРУМ КӨТӨЛӘ

**2024 йылда Өфөлә X "Рәсәй - спорт державаһы" халыҡ-ара форумы ойоштороласаҡ. Уҙған аҙнала бындай форум Пермдә үтте.**

Ил делегаттары алдында Рәсәй Президенты Владимир Путин сығыш яһаны. "Киләһе йылда "Рәсәй - спорт державаһы" форумы үткәрелә. Ул һәр ваҡыт ҙур илебеҙҙең төрлө ҡалаларында ойоштороласаҡ. Был юлы ул Башҡортостан Республикаһының баш ҡалаһы Өфөлә үтәсәк. 2024 йылда Өфө 450 йыллыҡ юбилейын билдәләй. Форум ҡунаҡтарының Рәсәйҙең тағы бер үҙенсәлекле, ҡыҙыҡлы төбәгенең мәҙәниәте, тарихы һәм мираҫы менән танышыу мөмкинлеге бар", - тине Владимир Путин.

"Баш ҡаланың 450 йыллығы билдәләнгән йылда абруйлы сараны ҡабул итеү - Өфө өсөн оло мәртәбә, - тине Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров. - Беренсенән, был - беҙҙең өсөн ҙур шатлыҡ, ҙур ҡаҙаныш. Күптәр "Рәсәй - спорт державаһы" форумын үҙҙәренең төбәктәрендә үткәреү өсөн көрәшә, сөнки ил етәкселеге һәм бөйөк спортсылар килә. Улар спортты һәм физик культураны үҫтереүҙәге мөһим йүнәлештәрҙе тикшерә, йомғаҡ яһала. Икенсенән, Президент әйткәнсә, форум Өфөнөң 450 йыллығына арналған тантаналы сараларҙың мөһим өлөштәренең береһе булмаҡсы. Өсөнсөнән, әлеге форумды үткәреү өсөн инфраструктура кәрәк. Бик күп объекттар төҙөлә, Өфө үҙенең 450 йыллығына етди әҙерләнә", - тине Радий Хәбиров.

# ЭТНОТУРИЗМ БУЙЫНСА...

**Өфөнөң "Торатау" Конгресс-холында этнотуризм буйынса өсөнсө халыҡ-ара форум үҙ эшен башланы. Унда Рәсәйҙең 50-нән ашыу төбәгенән, шулай уҡ Белоруссиянан һәм Абхазиянан туристик тармаҡ вәкилдәре ҡатнаша.**

Этнотуризм, мәҙәни-тарихи туризм йүнәлеше, билдәле бер халыҡтың йәшәгән урынына барып, уларҙың мәҙәниәте һәм көнкүреше, иҫтәлекле урындары, теле, фольклоры, традициялары, байрамдары, кейем-һалымы, ашһыуы менән танышыуҙы күҙ уңында тота. Башҡортостанда ошондай урындар: Мәләүез районында "Иная" этнопаркы, "Торатау" солоҡ умарталығы, Иглин районында "Терра Инкогнито" этнопаркы.

- Этнофорум башланыр алдынан ғына Ҡаҙағстан делегацияһы менән осраштым. Ҡаҙағстандағы коллегаларыбыҙҙы ла "Башҡортостан оҙон ғүмерлелеге" программаһына инергә саҡырабыҙ. Беҙгә белорустар, абхаздар һәм ҡаҙаҡтар килә башлар тип көтәбеҙ. Был форумды өсөнсө тапҡыр ойошторабыҙ. Ул беҙҙең Туризм үҙәге етәксеһе Артур Мираҫ улы Иҙелбаевтың тәҡдиме менән башланып китте. Ләкин хәҙер бик ҡыҙыҡлы урынға әүерелә бара, бында һеҙҙең менән осрашып, туризм мөмкинлектәре тураһында фекер алышырға мөмкин. Әлбиттә, этнотуризмға баҫым яһайбыҙ, сөнки Башҡортостанда был тема бик популяр. Башҡортостан - төрлө халыҡтар йәшәгән үҙенсәлекле биләмә. Иң мөһиме - ошо халыҡтар үҙҙәренең мәҙәниәтен һәм традицияларын һаҡлай. Шуға Башҡортостанда башҡорттарҙың ғына түгел, рустарҙың, татарҙарҙың, сыуаштарҙың, мариҙарҙың, удмурттарҙың, белорустарҙың һәм башҡа халыҡтарҙың мәҙәниәте, ғөрөф-ғәҙәттәре менән таныша алаһығыҙ, - тине Радий Хәбиров. Уның һүҙҙәренсә, республикала туристарҙы йәлеп итеү биләмәләре бар. Шүлгәнташ музейы, әле Турахан һәм Хөсәйенбәк кәшәнәләре янында Евразия күсмә цивилизациялар музейын булдырыу маҡсатында эш бара.

# ҠАҘАҠТАР КИЛДЕ...

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Ҡаҙағстандың Рәсәйҙәге Ғәҙәттән тыш һәм Тулы хоҡуҡлы илсеһе Даурен Абаев менән эш осрашыуы үткәрҙе. Яҡтар иҡтисади һәм гуманитар өлкәләрҙә хеҙмәттәшлектең көнүҙәк мәсьәләләрен тикшерҙе.**

"Ҡаҙағстан менән хеҙмәттәшлек беҙҙең өсөн оло әһәмиәткә эйә. Беҙҙе уртаҡ тарихи, мәҙәни, этник тамырҙар бәйләй. Һуңғы йылдарҙа үҙ-ара мөнәсәбәттәребеҙгә яңы һулыш бирҙек, сауҙа әйләнеше арта, йылды үҫеш менән тамамларбыҙ, артабан үҫешеү өсөн яҡшы мөмкинлектәр бар", - тип билдәләне Радий Хәбиров.

Билдәләнеүенсә, бөгөн Башҡортостандағы тауар әйләнешенең ундан бер өлөшө Ҡаҙағстанға тура килә. Дүртенсе йыл был күрһәткестең артыуы күҙәтелә. Мәҫәлән, былтыр тауар әйләнеше 10 процентҡа - 464 миллион долларға тиклем артҡан. "Башҡортостан менән Ҡаҙағстан үҙ-ара мөнәсәбәттәрҙе үҫтереү өсөн яҡшы инфраструктура булдырҙы", тип билдәләне Радий Хәбиров. Ҡаҙағстанда Рәсәйҙең сауҙа вәкиллеге составында Башҡортостан вәкиллеге эшләй. Башҡортостандың Ҡаҙағстан менән сәнәғәттә уртаҡ проекттары бар, ауыл хужалығы, фән, мәғариф, мәҙәниәт өлкәләрендә хеҙмәттәшлек үҫешә. Ҡаҙағстандан 800-ҙән ашыу студент Башҡортостандың юғары уҡыу йорттарында белем ала. Ноябрҙә Ҡаҙағстандың Костанай ҡалаһында Рәсәй менән Ҡаҙағстандың XIX төбәк-ара хеҙмәттәшлек форумы ойоштороласаҡ. Унда Радий Хәбиров та ҡатнашырға йыйына. Даурен Абаев Башҡортостанда үҙенә күрһәтелгән ҡунаҡсыллыҡты юғары баһаланы. Ҡаҙағстан етәкселеге Рәсәй төбәктәре менән хеҙмәттәшлеккә ҙур иғтибар бүлә, тине илсе.

# ҠЫЛАЛАР ҠЫЛЫҠТЫ

**БР буйынса Эске эштәр министрлығының матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, республика территорияһында миграция законын үтәү буйынса профилактик рейдтар үтте.**

Һуңғы арала мигранттар тарафынан РФ ҡанундарын боҙоу йыш күҙәтелә башлағайны. Тикшереү барышында полиция хеҙмәткәрҙәре 1300 закон боҙоуҙарҙы теркәгән. 230 сит ил гражданын илдән сығарыу буйынса ҡарар ҡабул ителгән. Күмертәләп сауҙа итеүсе эре сауҙа базаларының барыһында ла профилактик саралар үткән. Өфөнөң Аксаков урамындағы "Тиҙ ярҙам" станцияһындағы һуғыш шуларҙың береһе генә. Быға тиклем 28 һәм 30 йәшлек ике сит ил гражданы "Ирәмәл" сауҙа-күңел асыу комплексында урынлашҡан төнгө клубтың һаҡсыһы уларҙы индермәгән өсөн ишеккә бензин һибеп, уны яндырған өсөн ҡулға алынғайны. Травматик пистолет, балта ҡулланып, һуғыш ойоштороу ҙа ят күренеш түгел, үкенескә. Хатта күптән түгел бер мигрант БДМУ ятағына инеп, унда йәшәгән бәйләнә башлай. 37 йәшлек был ирҙең Рәсәйгә законһыҙ рәүештә үтеп инеүе асыҡлана. Был аҙна ла бындай яңылыҡтарһыҙ ҡалманы: Өфөлә бер мигрант үҙе инеп, йәшәп ятҡан ҡатын-ҡыҙға янай һәм ваҡиға урынына килгән полиция хеҙмәткәренә һуға. Әле ул сит ил граждандарын ваҡытлыса тотоу үҙәгендә, закон тарафынан яуапҡа тарттырғас, депортациялау мәсьәләһе хәл ителәсәк.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфөлә ҡала йәмәғәт транспорты водителдәренә ҡытлыҡты кәметеү буйынса комплекслы эш алып барыла. Мәҫәлән, дөйөм белем биреү учреждениелары һәм һөнәри уҡыу йорттары менән үҙ-ара эш итеүҙе иҫәпкә алып, баш ҡаланың автотранспорт предприятиелары тулыландырыу мәсьәләһе ҡарала. Әлеге ваҡытта муниципаль ташыусыларға 340-тан ашыу хеҙмәткәр талап ителә, шуларҙың 140-ы - автобус, 126-һы - троллейбус һәм 77-һе - трамвай водителе.

✓Башҡортостанда 30, 60 һәм 90 көнлөк, шулай уҡ файҙаланыу ваҡыты буйынса лимитһыҙ юл йөрөү билеттары индерелә. "Ъ-Өфө" ойошторған экспертлар фекер алышыуында "Башҡортостан социаль карталар регистры"ның генераль директоры урынбаҫары Олег Романов ошо турала белдерҙе. Билеттарҙы "Башавтотранс" һата. Пассажирҙар өсөн экономия тарифҡа ҡарап 100 һумдан 700 һумға тиклем тәшкил итергә мөмкин. Лимитһыҙ юл йөрөү хаҡы 1700 һумға төшә. Юл хаҡын банк картаһы менән дә түләргә мөмкин.

✓Башҡортостандан игеҙәктәр Михей һәм Виктор Сидоровтар Дурбанда (ЮАР) халыҡ-ара БРИКС уйындарында уңышлы сығыш яһаны. Спортсылар коляскала теннис буйынса команда ярыштарында алтын миҙал яуланы, тип хәбәр иттеләр республиканың Спорт министрлығынан. Ярышта рәсәйҙәр бөтәһе 59 миҙал алды, улар араһында 35 алтын, 12 көмөш һәм 12 бронза. Түбәнерәк баҫҡыстарҙа - Ҡытай (55 миҙал), ЮАР (51) һәм Һиндостан (27) йыйылма командалары, тип белдерҙеләр Башҡортостандың спорт министрлығында.

✓Башҡортостанға 2023 йылда балалар пособиеһын түләү өсөн федераль бюджеттан 5,40 миллиард һумдан ашыу аҡса бүленде. Был суммананан 2,13 миллиард һумға яҡыны өсөнсө йәки артабанғы бала тыуған осраҡта тәғәйенләнгән айлыҡ түләүҙәргә (3 йәшкәсә) йүнәлтелде, тиелә Рәсәй хөкүмәтенең рәсми хоҡуҡи мәғлүмәт сайтында баҫылған бойороғонда. Тағы ла 3,27 миллиард һумдан ашыуы 3-7 йәшлек балаларға пособие түләү өсөн тотонолорға тейеш. Быға тиклем Башҡортостанда 234 600-ҙән ашыу бала тәрбиәләгән 119 700 ғаиләнең балаларға берҙәм пособие алыуы хәбәр ителгәйне.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ӨФӨ - ТӘРТИПТӘ!



## ҮҘЕБЕҘҘЕҢ АВТОМОБИЛДӘ...

**Баш ҡала район хакимиәттәренең беренсе урынбаҫарҙарына ете Lada Niva Travel автомобиле асҡыстары тапшырылды.**

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Рәсәй Президенты Владимир Путин дәүләт хеҙмәткәрҙәренә һәм муниципаль хеҙмәткәрҙәргә эштә Рәсәй автомобилдәрендә йөрөргә ҡушҡайны. "Беҙ 2024 йылда Өфөнөң 450 йыллығын билдәләргә йыйынабыҙ. Алда беҙҙе етди, көсөргәнешле эш көтә. Өфө майҙаны 700 квадрат километр, мең ярым километр оҙонлоғондағы меңләгән урам, 5500 күп фатирлы йорт, парктар, скверҙар - ғөмүмән, төҙөкләндереү һәм йәшәү биләмәһе. Был автомобилдәр ҡала районлары хакимиәттәренең беренсе урынбаҫарҙары өсөн туған муниципалитет мәнфәғәтенә хеҙмәт итеү сараһы булыр тип ышанам. Кабинетта ғына ултырмағыҙ, территорияға йышыраҡ сығығыҙ", - тип яҙҙы Өфө хакимиәте башлығының беренсе урынбаҫары Сергей Кожевников социаль селтәрҙәге сәхифәһендә.

## ЯҢЫ МОТОРҘАР

**Өфө фән һәм технологиялар университетында яңы поршенлы авиация двигателдәрен конструкциялау буйынса әүҙем эш алып барыла.**

Поршенлы двигателдәрҙе ҡулланғанда әллә ни ҙур талаптар ҡуйылмай, уларҙың сағыштырмаса ҡеүәте юғары, яғыулыҡ та артыҡ күп китмәй, иң мөһиме - бындай двигателдәр бик ышанысլы. Был эш "Приоритет-2030" федераль программаһының "Аэрокосмик технологияларҙың юғары инженер мәктәбе" стратегик проекты сиктәрендә ғәмәлгә ашырыла. Өфө университеты инженерҙары яһаған поршенлы двигателдәр енел һәм үтә енел, шул иҫәптән пилотһыҙ авиацияла ҡулланыласаҡ.

Бында әҙерләнгән АПД-200 бер цилиндрлы двигатель ҡеүәте 180 ат көсөнә тиклемге ике тактлы поршенлы авиация двигателдәре линейкаһына ҡарай. Ул еңел самолеттарҙа, вертолеттарҙа һәм конвертопландарҙа ҡулланыласаҡ. Ошондай прогрессив ватан двигателдәрен булдырыуҙа Өфө университетының йәш ғалимдары һәм студенттары ла әүҙем ҡатнаша.

КӨН ТЕМАҺЫ

# БЫЛ МӘКТӘПТӘРҘӘ...

## милли һәм этномәҙәни үҙенсәлектәр үҙәк урында

**(Башы 1-се биттә).**

БР мәғариф һәм фән министры Илдар Мәүлитбирҙин билдәләүенсә, бындай уҡыу йорттарында белем алырға теләүселәр йылдан-йыл арта. Сөнки улар заманса ҡоролмалар менән йыһазландырылған, күп функциялы коворкинг киңлектәре бар, балаларға үҙҙәрен үстереү өсөн бөтөн мөмкинлектәр ҡаралған. Быларҙың барыһы ла белем биреү процесын камилыраҡ итә, уҡыусылар имтихандарҙа, олимпиадаларҙа, бәйгеләрҙә яҡшы һөҙөмтә күрһәтә. Үткән уҡыу йылында 1-се полилингваль гимназияның 4 уҡыусыһы химия, физика, рус теленән БДИ-ны 100 балға тапшырған. 70 уҡыусы башҡа фәндәр буйынса юғары балдар йыйған. Полилингваль күп профилле мәктәптәр республика вуздары менән дә әүҙем хеҙмәттәшлек итә, инновацион майҙансыҡтар эшләй.

БР Башлығы Радий Хәбиров та бындай уҡыу йорттарында белем биреү ҙә, педагогик состав та, өҫтәмә мөмкинлектәр сифаты ла юғары булырға тейеш, тип әйткәйне. Ошо йүнәлеште артабан да үҫтереү, камиллаштырыу маҡсатынан Республика полилингваль мәғариф үҙәге булдырылаcаҡ. Был үҙәктә йыл әйләнәһенә уҡыусылар өсөн дә, уҡытыусылар өсөн полилингваль сменалар, слеттар, семинарҙар уҙасаҡ, тип планлаштырыла. Әле лә уҡытыусыларға методик ярҙам күрһәтеү маҡсатынан "Уныш формулаһы" тигән проект эшләй. Башҡорт, рус, сит телдәрҙә күрһәтелгән оҫталыҡ дәрестәре, асыҡ дәрестәр уларға эшмәкәрлеген дөрөҫ ҡорорға булышлыҡ итә. Полилингваль мәктәп уҡытыусылары өсөн матди ярҙам да бар. Республика делегацияһы быйыл тәжрибә уртаҡлашыу өсөн Үзбәкстанға барып ҡайтты, ноябрь айында Ҡаҙағстанға ошондай уҡ сәфәр ҡаралған.

Бөгөн республикала ҡуйылған маҡсат шундай: белем биреү һәм тәрбиә өлкәһендә иң алдынғы ысулдарҙы ҡулланған полилингваль мәғариф төбәктең милли һәм этномәҙәни үҙенсәлектәрен дә күҙ уңында тотҡан инновацион уҡыу йорто булырға тейеш. Булып үткән форумда иһә ошо үҙенсәлекле тәжрибәне башҡаларға күрһәтеү төп урынға ҡуйылды ла инде. Рәсәй һәм Ҡаҙағстандың полилингваль һәм билингваль белем биреү усаҡтары педагогтары, етәкселәр, вуз уҡытыусылары, дәүләт власы органдары, закондар сығарыу һәм башҡарма власть вәкилдәре мәктәптәрҙе ҡараны, ҡатнашыусылар өсөн оҫталыҡ дәрестәре, проекттар яҡлау, түңәрәк өҫтәлдәр ойошторолдо.

БАШ ҠАЛАМ



# ҺӘР ЕРҘӘ ЛӘ УҢАЙЛЫМЫ?

**Һуңғы йылдарҙа баш ҡалабыҙ күҙгә күренеп үҙгәрә, матурлана. Өфө халҡының ял итеү урындары айырыуса зауыҡлы, заманса уңайлы итеп яңыртылыуы шатландыра.**

Ошо көндәрҙә Өфө ҡала Советы рәйесе, "Берҙәм Рәсәй" партияһының төбәк сәйәси советы Президиумы ағзаһы Марат Васимов рәйеслегендә "Халыҡтың мөмкинлектәре сикләнгән төркөмдәрен уңайлы ҡала мөхите менән тәьмин итеү тураһында" депутат тыңлауҙары уҙғарылды. Кәңәшмәлә Өфө ҡала Советы депутаттары, Контроль-иҫәп палатаһы, Йәштәр йәмәғәт палатаһы ағзалары, ҡала хакимиәтенең бүлек етәкселәре, ғәриптәрҙең йәмәғәт ойошмалары етәкселәре ҡатнашты. Мөмкинлектәре сикләнгәндәр ҡалала үҙҙәрен нисек тойоуын тулыраҡ аңлау өсөн ҡала Советы сайтында онлайн һорау алыу ойошторолған, ә Йәштәр йәмәғәт палатаһы ағзалары ҡала объекттары буйлап тикшереүҙәр уҙғарған. Фән, мәғариф, мәҙәниәт, социаль сәйәсәт, һаулыҡ һаҡлау буйынса даими комиссия рәйесе Ирина Сухарева белдереүенсә, өфөләрҙең күбеһе тротуарҙарҙа һәм автобус туҡталыштары тапҡырында бордюрҙарҙы һөҙәкләтеү кәрәклеге тураһында әйтә - был яуап биреүселәрҙең 80 проценты. Халыҡтың 60 процент тирәһе мөмкинлектәре сикләнгәндәр өсөн йәмәғәт транспорттары менән ҡулланыуҙы уңайлы итеү, йәмәғәт урындарында пандустар урынлаштырыуҙы һорай. Йәштәр йәмәғәт палатаһы рәйесе Әнүәр Рәхмәтуллин дә сығыш яһаны һәм мәҙәниәт, спорт, һатыу итеү үҙәктәрендәге хәлдәр менән таныштырып, талаптарға ярашлы бик күп яңылыҡтар индерелеүгә ҡарамаҫтан, һәр урында ла уңайлы шарттар булдырылып етмәүен әйтте. Шулай ҙа эш даими дауам итә һәм яңы төҙөлөш урындарында, яңыртып төҙөлгән объекттарҙа ғәриптәр өсөн тейешле уңайлыҡтар ҡарала. Кәңәшмәлә ҡатнашыусылар араһынан ҡала объекттарында уңайлы мөхит буйынса тикшереүҙәр үткәрергә хоҡуҡлы эш төркөмө булдырырға тәҡдим иттеләр, ә "МИР" ғәриптәрҙең Өфө ҡала ойошмаһы етәксеһе Владимир Горбунов баш ҡалала электр коляскаларын етештереү эшен яйға һалыу башланғысы менән сығыш яһаны. Уның әйтеүенсә, элек баш ҡалала бындай етештереү төрө эшләгән, әммә үҙгәртеп ҡороуҙар осорондағы һынауҙарға бирешкән.

Баш ҡалала мөмкин тиклем барлыҡ талаптарҙы күҙ уңында тоторға ынтылыуҙарына ҡарамаҫтан, ҡайһы бер торлаҡ йорттарҙың ишектәре алдында эшләп ҡуйылған текә-текә пандустарға күҙ төшһә, һау-сәләмәт кеше лә бында үтеп инә алырына шик тыуған осраҡтар юҡ түгел. Автомобиль юлдарын аша сығырға кәрәк булған ҡайһы бер урындарҙа ла күҙәтелә ундай хәлдәр: йә светофорҙың йәйәүлеләр өсөн янған ваҡыты уғата ҡыҫҡа, йә ул бөтөнләй юҡ, йәки һуҡырҙар өсөн тауыш сигналы эшләмәй, юлда махсус плитә түшәлмәгән. Оло йәштәгеләрҙең автомобиль тәгәрмәстәре аҫтында ҡалыу ҡурҡынысында юл аша йәлап сығырға мәжбүр саҡтары ла була, тимәк, ер аҫты үткәүеле эшләнергә тейеш, ә унда кискеһен яҡтылыҡ бармы? Бына ошондай тәү ҡарамаҡҡа ябай, әммә һәр ҡала кешеһе өсөн мөһим уңайлы шарттар булдырылырға һәм ҡәҙимгә күренешкә әүерелергә тейеш.

**Камила ҒӘЛИЕВА.**

## ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Тоҙ ултырһа

❖ Быуындарға ултырған тоҙҙан 1-әр кг ҡайын һәм уҫаҡ ҡайрыһына 100 грамм имән ҡайрыһын ҡушып, ҡаты итеп бешерергә. Көнөнә 3 тапҡыр ярты шар стакан эсергә. Тәүҙә дөйөм торош бер аҙ насарыйыуы бар, йәлап хәл яҡшыра.

❖ 100 грамм һеркә эссенцияһына 2 йомортҡа төшөрөргә, ҡабығы ирееп бөткәс, ярыһын алып ташларға һәм һуҙын стаканға һығып алырға. 2 ҡалаҡ глицерин ҡушып, яҡшылап болғатырға һәм стаканды тултырғансы бал өҫтәргә. Ҡаты һәм йыш йүтәлләгәндә сараны көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда һәм йоҡлар алдынан 2-шәр балғалаҡ ҡабул

### Йүтәл

❖ 1 лимонды талғын утта 10 минут ҡайнатып, һыуытырға, ҡабығын әрсергә һәм һутын стаканға һығып алырға. 2 ҡалаҡ глицерин ҡушып, яҡшылап болғатырға һәм стаканды тултырғансы бал өҫтәргә. Ҡаты һәм йыш йүтәлләгәндә сараны көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда һәм йоҡлар алдынан 2-шәр балғалаҡ ҡабул итергә. Әгәр ҙә һирәк, әммә көслө йүтәл йонсотһа, көнөнә 3 тапҡыр ашағандан һуң һәм 1-ҙе йоҡлар алдынан 1-әр балғалаҡ ашарға.

❖ 2-шәр ҡалаҡ андыҙ, ҡылыс үлән (аир) тамырҙарын, үгәй инә үләненең кипкән япрағын, 4 ҡалаҡ һаҙанаҡ (багульник), 6-шар ҡалаҡ ала миләүшә (трехцветная фиалка) һәм әремдән (цитварная полынь) торған йыйылманың 1 ҡалағын термосҡа һалып, 2 стакан ҡайнар һыу ҡойорға һәм төнгөлөккә ҡалдырырға. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда һәм 1 тапҡыр йоҡлар алдынан 2-шәр ҡалаҡ эсергә.

❖ 20 грамм әремгә 0,5 литр араҡы ҡойоп, ҡараңғы һыуыҡ урында тәүлектән ашыу төнәтергә. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда һәм 1 тапҡыр йоҡлар алдынан 2-шәр ҡалаҡ эсергә. Балаларға был төнәтмәне биреүҙән тыйылырға.

❖ Ҙур һуған башын әрсеп, ҡырғыстан үткәрергә, ҡаҙ майы ҡушырға. Шуны түшкә һәм муйынға ыуырға. Йылы итеп шәлгә төрөнөргә. Был сараны иртәнсәк ас ҡарынға 1 ҡалаҡ ашарға ла ярай.

❖ Яңы һығылған кишер һутына шундай уҡ миҡдарҙа һөт ҡушып, көнөнә 5-6 тапҡыр эсергә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✓ *Хәҙер фән Көньяҡ Уралдың б.э. II - IV быуаттарына ҡараған 50-нән артыҡ ҡурған төркөмдәре буйынса бай мәғлүмәткә эйә. Һәр төркөмдөң бер ни тиклем индивидуаль үҙенсәлектәре булһа ла, уларҙың уртаҡ сифаттары бар.*



ХӘҠИҠӘТИ ҺҮҘ

# БОРОНҒО БАШҠОРТОСТАН

## Икенсе киҫәк. Урта быуаттар.

### Бишенсе бүлек. Көньяҡ Урал IV - VIII быуаттарҙа



### Иртә бахмут (мазунин) мәҙәниәте ҡәбиләләре

Ағиҙел һәм Урта Кама төркөмдәре ҡәбиләләре тарихын өйрәнеүҙең барса этаптарында ла уларҙың, башлыса, беҙҙең эра сиктәрендә ҡараабыҙ һәм пьянобор мәҙәниәттәренә ҡараған, ултыраҡ тормошта йәшәгән урындағы халыҡтың иң яҡын варистары икәнлеге үҙенән-үҙе беленеп тора ине. Тимер быуаты башында уҡ (ананьин дәүере, б.э. тиклем VII - V бб.) барлыҡҡа килгән ҡаласыҡтарҙың б.э. III - VIII быуаттарына тиклем йәшәүе, шулай уҡ матди мәҙәниәт предметтарының типологик яҡынлығы ошоға дәлил. Шул уҡ ваҡытта тикшеренеүселәр III - IV быуаттарҙа бахмут мәҙәниәте формалашыуына, урындағы халыҡ менән бер рәттән, ситтән килгән ниндәйҙер ҡәбиләләрҙең ҙур йоғонто яһауы хаҡындағы мәсьәләне ҡуя, улар йөҙөндә В.Ф. Генинг Көньяҡ Себерҙән сығыусыларҙы, ә Н.А. Мәжитов гун мөхите вәкилдәрен күрә. Күптән түгел был фараздар Ағиҙел тамағы районындағы б.э. III - IV быуаттарына ҡараған иртә бахмут (мазунин) мәҙәниәтенең оригиналь Иҫке Мошто ер-ҡурған ҡәберлеген тикшергәндә раҫланды. Табылдыҡтар составы буйынса Иҫке Моштола ҡаҙып асылған 102 ҡәбер бер-береһенән бер ни менән дә айырылмай һәм бахмут мәҙәниәтенең иртә этабына ҡараған барса ҡәберлектәр өсөн типик булып тора, әммә бындағы ерләү йолаһы ошо ҡомартҡыға үҙенсәлек бирә: ҡурған аҫтына ерләү ҡәҙимге ергә (грунтҡа) күмеү менән ҡуша башҡарылған. Ҡурған аҫтындағы ҡәберҙәрҙең түбәндәге етди айырымлыҡтары күҙгә бәрелеп тора: улар грунттағыларынан тәрәнерәк, тар стеналарында ҡыуышлыҡтар яһалған, ҡәбер төбөнә аҡбур һибелгән, унда көл, ағас күмере ҡалдыҡтары, шулай уҡ ат һөйәктәрен ритуаль күмеү билдәләре бар. Ошо үҙенсәлектәрҙә иҫәпкә алып, тикшеренеүселәр Иҫке Мошто ҡәберлеген ҡалдырған халыҡ составында аныҡ беленеп торған ике төркөм булыуы хаҡында һығымтаға килә: ултыраҡ тормошта йәшәгән урындағылар һәм көньяҡтан килгән күскенселәр. Ҡурған аҫтындағы ҡәберҙәр көньяҡ төркөмөнә ҡарай. Ошо һығымтаға өҫтәмә раҫлау сифатында антропология материалын күрһәтеп була. Ҡурған аҫтындағы ҡәберҙәрҙең береһендә яһалма рәүештә деформация эшләнгән баш һөйәге табыла. Ағиҙел йылғаһы тамағы районындағы ошо типтағы тәүге табылдыҡ - беҙҙең эраның тәүге быуаттарында төбәк халҡы составына гун мөхитенен ҡусмә ҡәбиләләре ҡушылыуын ап-асыҡ раҫлаусы иҫбатлама. Дөйөм алғанда, публикация авторҙары археология һәм антропология материалдары нигеҙендә килгән төркөмдөң генетик яҡтан уҙған быуаттарҙа Көньяҡ Урал далаларында көн иткән дах-сак-массагет мөхите күскенселәре менән бәйле булыуын раҫлай.

Хәҙер фән Көньяҡ Уралдың (Башҡортостандың көньяғы, Силәбе һәм Ырымбур өлкәләре) б.э. II - IV быуаттарына ҡараған 50-нән артыҡ ҡурған төркөмдәре буйынса бай мәғлүмәткә эйә. Һәр төркөмдөң бер ни тиклем индивидуаль үҙенсәлектәре булһа ла, уларҙың уртаҡ сифаттары бар. Мәҫәлән, улар үлсәмдәре буйынса ҙур түгел, ер өйөмдәре тупраҡтан, ҡайһы бер осраҡта таш ҡалантылы; ағас табуттар киң ҡулланылған. Мәйет инвентары шул ваҡытҡа хас ҡайыш наборҙарынан, балсыҡ һауыт-һабанан, биҙәүестәрҙән тора, улар араһында көньяҡ үҙәктәрҙән килтерелгәндәре күп. Шундайҙар иҫәбенә иң элек ҡойоп яһалған Ҡытай көҙгөләрен индерергә кәрәк. Ҡыҙыҡһынған уҡыусыға ошондай ҡомартҡылар ентекләп тасуирланған махсус хеҙмәттәрҙә тәҡдим итеп, уларҙың гун-усунь-кангюй-юечжи сығышлы төрки телле ҡәбиләләр Көньяҡ Уралдың дала зонаһының һәм йәнәштәге төбәктәрҙең (Ҡаҙағстан, Себер, Волга буйы, Төньяҡ Кавказ) төп халҡын тәшкил иткән дәүерҙә хасил булыуын билдәләп үтеү фарыз, сөнки улар уҙған быуаттарҙа йәшәгән урындағы ҡәбиләләрҙең вариҫтарын үҙ власы аҫтында берләштерә алған. Ошо ҡәбиләләр йыйылмаһына б.э. V - VIII быуаттарында Көньяҡ Уралдың этносәйәси тарихында хәл иткес роль уйнарға тура киләсәк.

**Нияз МӘЖИТОВ.**
**Әлфиә СОЛТАНОВА.**
**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**

**(Дауамы. Башы 2022 йылдың 28-се һанында).**

ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ

# МӘХМҮТ ҠАШҒАРИҘАН



**XI быуатта Евразия киңлектәрендә боронғо төрки тел белгесе Мәхмүт ибн әл-Хөсәйен ибн Мөхәммәт әл-Ҡашғари тарафынан төҙөлгән төрки телдәренең энциклопедик белешмәһе киң танылыу таба.**

Ул "Диуану лөғәт әт-төрк" исеме аҫтында 1074 йылда нәшер ителә, шуға күрә төрки донъяһы 2024 йылда ошо боронғо китаптың 950 йыллығын байрам итәсәк. Урта быуаттар полиглоты Мәхмүт Ҡашғари хеҙмәте лингвистар өсөн генә түгел, этнологтар, тарихсылар, философтар, политологтар, этнопсихологтар һәм мәҙәниәт тарихын өйрәнеүселәр өсөн дә үтә ҡиммәтле сығанаҡ. Әйтергә кәрәк, башҡорт теле хаҡында тәүге тарихи мәғлүмәт тап ошо китапта сағылыш тапҡан. Ошо мәңгелек әҫәр инде 1 000 йыл самаһы ваҡыт үтеүгә туғандаш Татарстандың бөгөнгө ғалимдарының башҡорт халҡының боронғолоғон инҡар итергә тырышыуын, урта быуаттарҙа мадьярҙарҙың ғына "башҡорт" этнонимын йөрөтөүе хаҡындағы уйҙырмаларын объектив факт тип раҫларға маташыуын фаш итә лә инде. Мәхмүт Ҡашғари төп егерме төрки ҡәбиләләре исемлегендә бишенсе итеп башҡорттарҙы атай. "Диуану лөғәт әт-төрк" китабынан ҡайһы бер мәғлүмәттәрҙе һеҙҙең иғтибарығыҙға тәҡдим итәбеҙ.

**[11]. "Төркиҙәрҙең составы һәм ҡәбиләләре хаҡында аңлатма.**

Төркиҙәр тәүҙә егерме ҡәбиләнән торған. Улар Нух (унһың өҫтөндә Аллаһтың фатихаһы булһын әйҙә) бәйғәмбәрҙең улы Яфеттың улы Төрктән таралған... Һәр ҡәбиләнең ырыуҙары бар, уларҙың иҫәбен Аллаһ ҡына белә. Мин төп ҡәбиләләрҙә генә һанап китәм һәм, төркмән-уғыҙҙарҙың ырыуҙарынан башҡа, мөһим булмағандарын ҡалдырам. Мин уларҙың ырыуҙарын һәм хайуандарындағы тамғаларын килтерәм, сөнки улар хаҡында кешеләр белергә теләш. Унан башҡа мин көнсығыш еренең һәр ҡәбиләһенең, мәжүсиҙәренең дә, мосолман булғандарының да, Румға иң яҡын булғандарынан башлап, көнсығышҡа табан тәртип буйынса йәшәгән урындарын күрһәттем.

Беренсеһе [Румға яҡын ҡәбилә] - бәшәнәктәр (bacanak), унан һуң ҡыпсаҡтар (qifcaq) килә, унан һуң - уғыҙҙар (oguz), унан - емектәр (jamak), унан - **башҡорттар (basgirt)**, унан - басмылдар (basmil), унан - ҡайылылар (kaj), унан - ябаҡу (jabaqu), унан - татарҙар (tatar), унан - ҡырғыҙҙар (qirqiz), һәм былары [һунғылары] - Чин янында (Sin) - бөтөн был ҡәбиләләр Румдан көнсығышҡа табан һуҙылып йәшәй. Унаң һуң чигилдәр (cigil), унан - тухси (tuxsi), унан - яғма (jagma), унан - оғраҡтар (ograk), унан - чаруктар (caruq), унан - чомулдар (comul), унан - уйғырҙар (ujgur), унан - танғуттар (tagut), унан - ҡытайҙар (xitaj), улар Чин [була ла инде]; унан - тавғачтар (tavgac), улар Мачин (masin) [була ла инде] - был ҡәбиләләр көньяҡ һәм төньяҡ араһында урынлашҡан...

**Бәҙри ӘХМӘТОВ тәржемәһе.**
**(Дауамы бар).**

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 78



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

### Калинковичи-Мозырь һөжүм итеү операцияһы. Мозырь рейды

148-се гв. артминполкы командирының 1944 йылдың 17 ғинуарындағы бойороғо буйынса "Батырлыҡ өсөн" миҙалына лайыҡ булыусылар: гв. рядовойы, 5-се батарея яһаусыһы Ғәлимйәнов Фәйзрахман Ғәлимйән улы (Балтас районының Солтанғол ауылынан); гв. сержанты, 1-се батареяның өлкән телефонисы Ғилмуллин Фәхрулла Ғилмулла улы (Тәтешле районының Сорҡолдо ауылынан); 1-се батареяның тартыу отделениеһы командиры, гв. сержанты Фәхриев Биктимер Фәхри улы (Ҡыйғы районының Туғыҙлы ауылынан).

"Боевой хеҙмәттәре өсөн" миҙалдары менән бүләкләнеүселәр: гв. рядовойы, 1-се батарея орудиеһы яугиры Ардыуанов Тимерхан Зәки улы (Миәкә районының Өршәкбаш-Ҡарамалы ауылынан); гв. рядовойы, 1-се батарея ат йөрөтөүсеһе Ғарифуллин Сафиулла Сәғиҙулла улы (Бүздәк районының Арыҫлан ауылынан); гв. рядовойы, 3-сө батарея ат йөрөтөүсеһе Йәнбулатов Муллағәлләм Мырҙамөхәмәт улы (Ейәнсура районының Аҡдәүләт ауылынан).

148-се гв. артминполкы командирының 1944 йылдың 28 апрелендәге һәм 4 майындағы бойороҡтарына ярашлы, "Батырлыҡ өсөн" миҙалына лайыҡ булыусылар: гв. өлкән сержанты, 1-се батареяның 3-сө орудиеһы замковыйы Латипов Ғүмәр Садиҡ улы (Миәкә районының Сатый ауылынан); 1-се батарея наводчигы, гв. кесе сержанты Ғәфуров Ғилемхан Ғәфүр улы (Тәтешле районының Илмәт ауылынан). "Боевой хеҙмәттәре өсөн" миҙалы менән бүләкләнеүселәр: батарея ездовойҙары, гв. рядовойҙары Ванников Василий Петрович (Ҡалтасы районының Күтәрем ауылынан); 3-сө батареянан Антонов Кузьма Петрович (Миәкә районының Яңы Ҡарамалы ауылынан); Карпов Дмитрий Павлович (Бишбүләк районының Покровка ауылынан); 5-се батареянан Мөсәғитов Йәноҙаҡ (Учалы районының Сәфәр ауылынан), боепитание взводынан Садиҡов Нәзип Минһаж улы (Янауыл районының Янбарис ауылынан); кесе ветеринария фельдшеры, ветеринария хеҙмәте старшинаһы Хәлиуллин Ниғмәтулла Һиҙиәт улы (Әлшәй районының Әбдрәшит ауылынан). 16-сы Чернигов гвардия атлы дивизияһының үрҙә аталып киткән һәм башҡа бик күп яугирҙары 112-се Башҡорт атлы дивизияһы башлаған ҡаһарманлыҡ юлын бына шулай дауам итте.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

# ДЕПУТАТ БАЙҒУСҠАРОВТЫҢ

## йәки Ҡалмаҡтан - Өфөгә,

**Сираттағы әңгәмәбеҙ геройы - РФ Федераль Йыйылышы Дәүләт Думаһының VII һәм VIII саҡырылыш депутаты, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған юрисы Зариф Закир улы БАЙҒУСҠАРОВ.**

**Хөрмәтле Зариф Закир улы! Һеҙ ауыл мөхитендә тыуып үҫкәнһегеҙ, бала сағығыҙ, йәшлек йылдарығыҙ шунда үткән. Әңгәмәбеҙҙе һеҙҙең тыуған ауылығыҙҙан башлап ебәрһәк, урынлы булыр, тим.**

- Эйе, мин Күгәрсен районының Ҡалмаҡ (Ҡаҙир) исемле бәләкәс кенә бер ауылында тыуғанмын. Ауылыбыҙ Мәнеү буйында урынлашҡан. Йылға тип тә әйтеп булмай уны, бәләкәй генә бер шишмәнән хасил, ауылдан 3 саҡрымдар тирәһендәге бер урмандан баш ала. Ауылдан арыраҡ китер юл да юҡ, тирә-яҡ урман менән ҡапланған. 20-нән ашыу хужалыҡ бар әлеге көндә. Ауылыбыҙҙа мәктәп тә, фельдшер-акушер пункты ла, клуб та, хатта магазин да булманы. Мин армияла саҡта башланғыс мәктәп асып ҡарағандар ул, әммә ниндәйҙер сәбәп менән кире япҡандар. Ауылыбыҙҙан 2 саҡрым самаһы ерҙә урынлашҡан Түләбай ауылы мәктәбенә йәйәү йөрөп уҡырға тура килде. Ә ауылыбыҙҙа балалар ул тиклем аҙ ҙа булманы - 25-30 бала бар ине. 3-сө класты тамамлағас, 5 саҡрым тирәһе алыҫлыҡтағы Ҡалдар ауылы мәктәбенә йөрөп уҡыныҡ.

Атай-әсәйем ябай колхозсылар ине, ғаиләбеҙҙә 5 бала үҫтек. Әсәйем һауынсы ла, сөгөлдөрсө лә булып эшләне. Һәр сөгөлдөрсөгә 2-3 гектар участка бирелә, беҙ йәйҙәрен шул майҙанды уташып, сөгөлдөр үҫентеләрен һирәкләргә ярҙам итә инек. Ә атайыбыҙ колхозда мал ҡараусы булды, яҙҙан ҡара көҙгә тиклем ферма һыйырҙарын көттө. Мин 5-6 йәшемдән бирле атайым янында йөрөнөм, үҫә төшкәс, фермала уға ярҙам итештем: малдарға силос ташыйбыҙ, һалам килтерәбеҙ, аҫтарын таҙартабыҙ. Әлбиттә, 5 баланы ашатырға, кейендерергә кәрәк, ә колхозсыларҙың килеме бик аҙ. 5 метрға 5 метрлы бәләкәй генә өйөбөҙҙә 7 кеше йәшәнек. Атай-әсәйебеҙҙең хәллерәк йәшәп, ҙурыраҡ өй һалып сығырлыҡ мөмкинлектәре юҡ ине. Әҙме-күпме аҡсаларын беҙгә тотоноп йәшәне улар. Ул ваҡытта хәҙерге кеүек дәүләттән ишле ғаиләләргә иғтибар ҙа, ярҙам да булманы бит. Тамаҡ туйҙырырлыҡ ризығыбыҙ ҙа булмаған саҡтар иҫтә ҡалған. Икмәк өҫтөнә сәй йә һыу тамыҙаһың да, шәкәр ҡомо бар икән, шуны өҫтөнә һибәһең - шунан да тәмлерәк ризыҡ юҡтыр кеүек ине беҙгә. Шундай күңелһеҙ хәлдәр ҙә булғыланы: атайымдың көтөүенән берәй һыйыр юғалһа, йә ауырып ҡазалаһа, шул малдың хаҡын атайымдың өҫтөнә һалалар, йәнәһе, ул ғәйепле, ҡарамаған. Шунан уға ярты йыл буйына эш хаҡы түләнмәй. Шул саҡтарҙа әсәйемдең әрнеп илап ултырғандары әле лә күҙ алдында...

**Ул саҡтарҙа ауыл хеҙмәтсәндәре өсөн шәхси хужалыҡтарының төп йәшәү сығанағы булыуын да беләбеҙ...**

- Шәхси хужалыҡ тигәс, ғаиләбеҙ тормошонан тағы ла бер ваҡиға иҫкә төшә. Ул замандарҙа шәхси хужалыҡ алып барыу еңелдән булманы. Ни сәбәптәндер, ошондай хужалыҡтарҙы сикләү, төрлө тыйыуҙар күп булды. Башлыса, бер генә һыйыр тотоу рөхсәт ителә ине. Шулай, миңә 6-7 йәштәр тирәһе булғандыр, атай-әсәйем танабыҙҙы үҫтереп, быҙаулатты. Бер көндө беҙгә ауыл советы рәйесе Файзрахман бабай килеп инде. Уның талабы ҡаты ине - 5 көн эсендә танабыҙҙы һуйҙырырға! Юғиһә, беҙҙең ғаиләне кулак тип атаясаҡтар һәм һыйырҙы дәүләт үҙенә тартып аласаҡ. Ни эшләһендәр инде - тананы һуйҙылар. Бына бит нисек ул: хәҙер теләгәнгә, мөмкинлеге булғанға 100 һыйыр аҫраһа ла була, хуплайҙар, дәүләттән ярҙам алалар.

Ә ул саҡта халыҡҡа иркенерәк, мулыраҡ йәшәү өсөн тейешле шарттар булманы. Нисек инде ауыл кешеһе үҙ баҡсаһында үҙе теләгәнсә уңыш үҫтереп, уны файҙалана алмаҫҡа тейеш! Ни өсөн кеше көнө-төнө тырышып эшләп йөрөй, ә ниндәйҙер начальниктың бойороғо буйынса уға ярты йыл буйына эш хаҡы түләнмәй? Был законды боҙоу, кешеләргә ҡарата ғәҙелһеҙлек күрһәтеү! Әсәйемдең колхоз етәкселәренә инәлеп, "Закирға ярты эш хаҡы булһа ла түләгеҙ инде, балаларҙың өҫтәренә кейергә кейеме, уларҙы ашатырға аҙыҡ юҡ", тип үтенеп йөрөгәне хәтерҙә...

Шуға ла мин бик йәштән ябай ауыл кешеләренең хоҡуҡһыҙ булыуы тураһында уйлана башланым. Ни эшләп ниндәйҙер етәксе ябай кеше хаҡында, уның балалары хаҡында уйлап та бирмәй, ни теләй, шулай ҡылана? Бындай хәлдәр мине ныҡ аптырата ине. Шәхсән үҙемдең бер ниндәй хоҡуҡһыҙ көйө ниндәйҙер бер тупаҫ начальникҡа буйһоноп йәшәгем килмәне. Тап ошондай уйланыуҙарым һөҙөмтәһендә миндә юрист һөнәренә эйә булыу теләге уянды. Кешеләрҙең хоҡуғы һағында тороусылар, уларҙы йәберләүҙән йолоусылар итеп күрҙем юристарҙы.

**Бәлки, ошо сәбәптәр - ярлылыҡ, хоҡуҡһыҙлыҡ арҡаһында байтаҡ ҡына ғаиләләр беҙҙең ауылдарыбыҙҙан сит тарафтарға ҡасып тигәндәй китә башлағайны. Бына тыуған яғығыҙ - Күгәрсен районының демографик хәлен ҡарайыҡ. 1970 йылда районығыҙҙа 42,4 мең кеше йәшәһә, 2010 йылда был мөһим күрһәткес 32,3 мең кешегә тиклем кәмегән. Ҡалмаҡ ауылында 1900 йылда 180 кеше теркәлһә, 2010 йылда 127 генә. Шул һандарға иғтибарлабыраҡ күҙ һалһаң, халҡыбыҙҙың, бигерәк тә ауылдарыбыҙҙың киләсәге, демографик күҙлектән ҡарағанда, борсолоу уята. Ошо проблема хаҡында ни уйлайһығыҙ?**

- Күгәрсен районы менән сағыштырғанда, бәғзе бер төбәктәрҙә хәлдәр һеҙ әйткәндән дә ауырыраҡ - халҡы 2 тапҡырға тиклем кәмегән урындар бар. Райондар, ауылдар буйлап күп йөрөргә тура килә, проблеманы яҡшы беләм. Әлбиттә, кемдәрҙер ошо хәлдәрҙе иҫкә алып, ни өсөн шулай булған, бында кем ғәйепле икәнен асыҡларға теләйҙер. Демографик мәсьәләнең ҡырҡыулашының сәбәптәре хаҡында күп яҙылды, уны һүҙ һөйләп кенә яҡшыртып булмай. Дәүләт яғынан да күпме саралар ҡабул ителеүен беләбеҙ. Әммә ауылдарыбыҙ ҡоромаһын, бөтмәһен тиһәк, уларға һәр беребеҙҙең иғтибары һәм ярҙамы ҡиммәт.

Үҙемдең тыуған ауылыма йыш ҡайтып йөрөйөм, ҡулымдан килгәнсә ярҙам итергә тырышам. Яҡташтарыбыҙҙа яҡшыраҡ, йәмлерәк, матурыраҡ йәшәргә ынтылыу теләген уятырға кәрәк. Бына ауыл зыяраттарын ғына алып ҡарайыҡ. Халҡыбыҙ зыяраттарҙы кешеләрҙең мәңгелек йорто, ти бит. Әммә улар күп урындарҙа ташландыҡ хәлдә. Тыуған ауылымда ла шулай булды. Иң элгәре ауыл зыяратын кәртәләп алдыҡ. Бер мәл мин йәкшәмбе көн ҡайтам, әйҙәгеҙ, бергәләшеп зыяратыбыҙҙы ипкә килтерәйек, тип ауылға шылтыраттым. Ҡайттым, зыяратҡа ете кеше килде. Зыяраттың тышҡы яғын, ҡоймаһын ҡараштырып сыҡты өмәгә килеүселәр. "Ә зыярат эсен кем йыйыштыра һуң?" - тим. "Юҡ, муллабыҙ зыярат эсенә инеп, ундағы бер генә нәмәгә лә тейергә ҡушмай", - ти ауылдаштарым. "Ислам динендә, Ҡөрьән-Кәримдә бындай тыйыу юҡ. Бында ата-бабаларығыҙ ята, баҡыйлыҡҡа күскәс, һәр кемебеҙ шунда ятасаҡ, был урын таҙа, бөхтә булырға тейеш", - тимен. Шунан зыяратты таҙартырға риза булдылар. Ағастар ҙа ҡартайып, ҡәбер өҫтәренә ауа. Иҫке ҡәбер ҡоймалары емерелеп, сереп ята. Шуларҙы йыйып алып, тураҡлап, зыяраттан 4 трактор арбаһы менән сүп алып сыҡтыҡ. Көнө буйына эшләргә тура килде, зыярат эсе бермә-бер таҙарып, матурайып ҡалды.

**Һеҙ, Зариф Закир улы, ошондай эштәрҙе башҡа райондарҙа ла башлап ебәреп, үҙегеҙ шәхсән халыҡ менән бергә дәртләндереп-ойоштороп йөрөйһөгөҙ. Һеҙҙең башланғыс менән иң элек Бөйөк Ватан һуғышы яугирҙарының ҡәберҙәре төҙөкләндерелә. Тик шуныһы: ауылдарыбыҙҙа йәшәүсе милләттәштәребеҙгә әүҙемлек етешмәй кеүек түгелме?**

- Ҡай сағында үҙем дә аптырабыраҡ ҡалам был хәлгә, кемдер ситтән килеп, үҙебеҙ эшләй торғанды беҙҙең өсөн эшләмәҫе билдәле бит. Бына йәнәш йәшәгән рус халҡынан өлгө алырға кәрәк. Улар зыяраттарын бик ҡәҙерләп, һәйбәтләп тота, йыл һайын мәрхүмдәренең ҡәберҙәренә бара торған махсус көндәре бар. Хәтерләйем, мин бәләкәй саҡта ауылыбыҙҙан 5 саҡрымдар тирәһе арыраҡ Красногорск тигән рус ауылы бар ине, 60-сы йылдарҙа уның халҡы башҡа яҡтарға күсеп китте, ауыл бөттө. Әммә ошонда ерләнгән мәрхүмдәрҙең ейәндәре йыл һайын ҡайтып, ҡәберҙәрен таҙалап йөрөй. Был бик һәйбәт йола, беҙгә өлгө булырлыҡ. Халҡыбыҙҙың әйтеме лә бар бит: "Тереләрҙең ҡәҙерен бел, үлгәндәрҙең ҡәберен бел".

Мин Мәскәүҙә эшләп, ҡайтып-китеп йөрөйөм, ғаиләм Өфөлә йәшәй. Шулай ҙа ваҡыт табып, балалар менән зыяратҡа барып, яҡындарыбыҙҙың ҡәберҙәрен таҙалап ҡайтабыҙ. Әгәр ниндәй ҙә булһа матур йола юҡ икән, уны кемдер башлап ебәреп, өлгө күрһәтеү зарур. Кешеләр күрә һәм "Беҙ ҙә ошолай эшләй алабыҙ бит", тип һығымта яһай. Ауылдарыбыҙҙа кешеләрҙең йорт-ҡураһының, урамдарҙың, йәмәғәт йорттарының ыҡсым, төҙөк, матур булыуы мөһим, әлбиттә. Күп ауылдарҙа булғаным бар, зыяраттарының да торошона иғтибар итәм. Ул бит теге йәки был ауылдың мәҙәнилеген күрһәтә. Ауылдарҙа ла ойоштороусылар, лидерҙар күберәк булһын ине ул. Хәҙер ошо йәһәттән алға китеш күҙәтелә.

Бына, мәҫәлән, Еңеү көнөн байрам иткәндә ултырыштар, йыйылыштар уҙғарыла, һәр сығыш яһаусы Ватаныбыҙ азатлығы өсөн ҡан ҡойған яугирҙарға рәхмәт белдерә. Шул уҡ ваҡытта һуғыштан тере ҡайтҡандарҙың ҡайһыларының ҡәберҙәре ташландыҡ хәлдә. Уларҙы төҙөкләндереү, буятып, матурлап ҡуйыу үҙе үк тарихи хәтеребеҙҙе яңырта. Мин "Бер кем дә, бер нәмә лә онотолмаған" тип аталған проектты Башҡортостанда ғәмәлгә ашырыуҙа ҡатнашам. Беҙ республикабыҙҙың "Ир-егеттәр ҡоро" ойошмаһы ағзалары менән ошо йүнәлештә эш алып барабыҙ, үҙем дә улар менән бергә мәрхүм яугирҙарыбыҙҙың ҡәберҙәрен табып, төҙөкләндереүҙә ихлас ҡатнашам. Ҡыҙғаныс, күбеһенең ҡәберҙәрен ҡыуаҡ-ағас баҫып бөткән, ситтән күренмәй ҙә тиерлек. Шуларҙы киҫеп алып, таҙартып, исем-шәрифтәрен яңыртып, буятып, сәскәләр ултыртып ҡуябыҙ. Һуңғы йылдағын иҫәпкә алмағанда, әлеге көнгә 7 меңдән ашыу яугир ҡәберҙәре төҙөкләндерелде. Бындай ғәмәлдәр хәҙерге быуындың мөҡәддәс бурысы, һәм быны иң элек ир-аттарыбыҙ башҡарырға тейеш.

Ошо йәһәттән кире күренештәрҙе лә күҙәтергә тура килә. Бер саҡ үҙебеҙҙең Күгәрсен районына Мораҙым тарлауығында уҙғарылған сараға саҡырғайнылар. Сара тамамланғас, яҡындағы берәй ауыл зыяратына барып, яугирҙарҙың ҡәберен төҙөкләндереп ҡайтайыҡ, тип тәҡдим иттем. Барҙыҡ, 2 ҡәберҙе рәтләп, матурлап киттек. Бер аҙ ваҡыт үтеүгә район башлығы миңә: "Бер мәрхүмдең балалары аталарының ҡәберен төҙөкләндергән өсөн дәғүә белдерҙе", - ти. Йәнәһе, уларға атай кеше уны ерләгәндән һуң ҡәбергә килеп йөрөмәһендәр, тип әйтеп ҡалдырған. Был уларҙың аҡланырға тырышыуы ғына. Ислам дине ҡәберҙәрҙе ҡәҙерләүҙән тыймай - был барыһына ла билдәле.

Бөйөк Ватан һуғышы яугирҙары быуыны баҡыйлыҡҡа күсеп бөттө бөгөн. Башҡортостандан Ватан һуғышында 700 меңдән ашыу кеше ҡатнашҡан, уларҙың 400 меңдән ашыуы яуҙарҙан тыуған яҡтарына ҡайта алған. Һуғыштан иҫән ҡайтҡандарҙың республика кимәлендә айырым исемлеге бармы икән, тип белешә башланым бер ваҡыт. Тейешле ойошмаларҙың етәкселәре менән кәңәшмә йыйып, ошо хаҡта һөйләшеүҙәр уҙғарҙыҡ. Бындай исемлек юҡ, тиҙәр, хәрби комиссариатта ла һаҡланмаған. Әлбиттә, Бөйөк Ватан һуғышы яугирҙарының исемдәре индерелгән китаптар баҫылып сыҡты, әммә ул тулы түгел. Был эште мотлаҡ дауам итергә кәрәктер тип уйлайым.

**Халҡыбыҙҙың тарихи хәтере бар, батырҙар онотолмай. Шул уҡ ваҡытта һәр кемебеҙгә үҙ нәҫелен, үҙ шәжәрәһен белеү йә иһә тергеҙеү фарыз. Ата-бабаларығыҙ хаҡында ниҙәр беләһегеҙ?**

- Беҙҙең ырыуыбыҙ - ҡыпсаҡ, оранybыҙ "Туҡсаба", ҡошобоҙ - бөркөт. Нәҫелебеҙҙән 9 быуын ата-бабаларыбыҙҙың исемдәре билдәле. Уларҙың биләмәләре Күгәрсен районында ғына түгел, көньяҡтараҡ, хәҙерге Көйөргәҙе ерендә лә булған. Атайымдың ул яҡтағы Ҡаҙарма ауылының да бабаларыбыҙ биләмәһенә ҡарағаны хаҡында һөйләгәнен иҫләйем. 1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашҡан бер бабабыҙ хәрби хеҙмәтттә йөҙ башы (сотник) дәрәжәһенә эйә булған. Шуға күрәлерме, нәҫелебеҙҙә хәрбиҙәр күп була. Бөйөк Ватан

**✓ *Халҡыбыҙҙы эскелектән арындырыу - оҙайлы процесс, тик был юҫыҡта күп эшләргә кәрәк. Шул уҡ айыҡ туйҙар, айыҡ байрамдар, хәмерһеҙ йолалар тергеҙелеүе мотлаҡ. Иң элгәре хәмер һатыуҙы тыйыу, башҡа сара юҡ.***



һуғышында атайымдың өс ағаһы, олатайыбыҙ баштарын һалған. Бер туған ағайым кадровый офицер булды. Әлеге ваҡытта бер һәм ике туған ҡустыларымдың дүртеһе хәрби хеҙмәттәләр. Хатта бер һеңлебеҙ - Гөлназ - хәрби институт тамамлап, капитан званиеһында Рәсәй армияһында хеҙмәт итә.

**Күрәһең, нәҫел ебе буйынса кешегә тән үҙенсәлектәре генә түгел, ә, бәлки, билдәле бер психологик сифаттар ҙа биреләләр?**

- Тап шулай. Үҙемә лә Совет Армияһында хеҙмәт итергә тура килде, яугирлыҡҡа, һуғышсанлыҡҡа әүәҫ булғанғалыр инде, взвод командиры урынбаҫары вазифаһына тәғәйенләндем. Армия оҡшай ине, хатта сроктан тыш хәрби хеҙмәттә ҡалырға тигән ниәтем дә булды. Әммә атайым ауылға ҡайтыуымды хуп күргәс, ҡалманым. Бына минән ике йәшкә кесерәк бер туған ҡустым (уға 54 йәш) ауылда йәшәй, 5 балаһы бар, әммә ул үҙ теләге ошо исемде йөрөтә. Ә беҙҙә ысынында айыҡ булған ауылдар бармы һуң? Бар, тик бер генә ауылды - Көйөргәҙе районының Яҡут ауылын ысынлап та "айыҡ ауыл" тип атап була. Яҡутта спиртлы эсемлектәр менән һатыу итеү тулыһынса тыйылған, һәм ауыл сходының ҡарары буйынса республика парламенты махсус закон ҡабул иткән. А ҡалғандары? Магазиндарында хәмер иркен һатылған ауылды нисек итеп "айыҡ ауыл" тип атамаҡ кәрәк?

Шулай бер ваҡыт "айыҡ ауыл" исемен алған бер ауылға барғас, магазиндарына индем: кәштәләрҙә араҡының ниндәйе генә юҡ! Әгәр ауылда араҡы һатылмай икән, кеше ошоға өйрәнә, аҡрынлап эскелектән арына башлай. Бына бер көлкөлө хәл. Яҡуттан йыраҡ түгел Мораптал ауылы бар. Унда бер ир эсеп, иҫереп йөрөй икән. Уға әйтәләр: "Һин айыҡ ауыл кешеһе бит, ни эшләп эсеп йөрөйһөң?" Тегенеһе: "Эсһә ни, мин бит Яҡутта эсмәйем", - ти икән. Әлбиттә, халҡыбыҙҙы

**теләгән башҡа әйберҙәре лә етерлек. Әммә кире күренештәр ҙә аҙ түгел. Хәҙерге шарттарҙа уларға нисек ҡаршы торорға һуң?**

- Заманында бындай күренештәргә ҡаршы көрәштә муллаларҙың роле хаҡында алда әйтеп үттем инде. Хәҙер зарланырлыҡ бер ни ҙә юҡ һымаҡ - телевидение, радио, гәзит-журналдар, уҡымышлы муллалар, мәсеттәр, квалификациялы уҡытыусы-тәрбиәселәр, "Ағинәй", "Ир-егеттәр ҡоро" кеүек йәмәғәт ойошмалары бар. Әгәр берләшеп, бергәләшеп эшләнәк, әлеге проблемаларҙы хәл итеү юлдары, әлбиттә, табылыр. Ошо юҫыҡта әүҙем эш алып барылмаһа, етешһеҙлектәр нисек бар, шулай ҡала бирәсәк. Бына йәш ғаиләләр араһында айырылышыу осраҡтары күп хәҙер. Өйләнешкәндә уларға никах уҡый муллалар. Айырылышалар икән - мулланың бер ҡайғыһы ла юҡ. Никах уҡыны, аҡсаһын алды - эше бөттө, тигәнсә булмаһын

уҙа нөктәләрендә лә, интернет аша ла күпләп һатыла башланы. Иң яманы - уны үҫмерҙәргә лә һаталар. Ошо йылдың апрель айында Дәүләт Думаһында балалар, үҫмерҙәр организмына зыянлы булған вейптарҙы 18 йәштәре тулмағандарға һатыуҙы, иркен рекламалауҙы тыйыусы закон ҡабул иттек. Кәрәкле закон, ул мотлаҡ үтәлергә тейеш. Кемдәр ошо законды боҙа, уларға ҙур күләмдә штраф һалыу ҡараныҡ.

**Әлеге ваҡытта ғаиләләрҙә, уҡыу йорттарында балаларға, йәштәргә тәрбиә биреүгә иғтибар арта барыуы күҙәтелә күҙәтелеүгә.**

- Ғөмүмән, балалар, үҫмерҙәр араһында тәрбиә эштәрен алып барыу ныҡ аҡһаны беҙҙә, башлыса, уҡыу-уҡытыуға өҫтөнлөк бирелде. Мәктәптәрҙә, уҡыу йорттарында осрашыуҙарҙа булам. "Кемдәрҙең ата-әсәләренең олаталары һуғышта ҡатнашҡан, улар хаҡында нимә беләһегеҙ?" - тип һорау биргәнем бар. Башлыған?" Бер егет кенә дөрөҫ яуап бирә алды. Был патриотик тәрбиәнең түбән кимәлдә булыуының асыҡ миҫалы. Шуға күрә "Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында"ғы законға тәрбиә төшөнсәһе маҡсатлы рәүештә яңынан индерелеп, уҡыусыларҙы патриотик һәм граждандлыҡ рухында тәрбиәләү РФ мәғарифы системаһының тейелгеһеҙ принциптарының береһе итеп ҡабул ителде.

Әлбиттә, балаларҙа ватансылыҡ тәрбиәләүгә һәр кем шәхси әүҙемлек күрһәтергә тейеш. Иң элек уларҙа ошо темаға ҡыҙыҡһыныу уятырға кәрәк. Үҙемдең тәжрибәмдән бер миҫал килтерәйем. Уҡыусылар менән осрашыуҙың аҙағында уларға ошондай эш ҡушам: ата-бабаларығыҙҙан, туғандарығыҙҙан кемдәрҙең Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡанын, ниндәй батырлыҡтар күрһәткәнен, орден-миҙалдарын, ҡайҙа һәләк булғанын, иҫән ҡайтҡандарының ҡайҙа ерләнгәнен атай-әсәйҙәрегеҙҙән һорашып белешһегеҙ ҙә ошо мәғлүмәттәрҙе яҙып килтерәһегеҙ. Был эште үтәргә ваҡыт бирҙем. Барыһы ла риза булды һәм ошо өйгә бирелгән эште ваҡытында үтәне. Аҙаҡтан ауыл зыяратында ерләнгән яугир ҡәберҙәрен таҙалау эшендә лә әүҙем ҡатнашты улар.

# ТОРМОШ СӘХИФӘЛӘРЕ,

## Өфөнән Мәскәүгә илткән юл



менән Махсус хәрби операция зонаһына хеҙмәт итергә китте, званиеһы - сержант, уның элегерәк тә хәрби операцияларҙа ҡатнашҡаны бар ине.

**Республикабыҙҙа байтаҡ йылдар дауамында ауылдарыбыҙ киләсәге өсөн үтә мөһим булған айыҡ тормош рәүешенә күсеү буйынса саралар ойоштоintroла. Ошо хаҡта ла үҙегеҙҙең фекерҙәрегеҙ, тәҡдимдәрегеҙ менән бүлешһәгеҙ ине.**

- Халҡыбыҙға эскелек совет осоронда ныҡлап килеп инде. Был барыбыҙға ла мәғлүм. Әммә ул саҡта ла шул уҡ ауыл мөхитендә эскелеккә ҡаршы тороусылар була, шуларҙың береһе - ҡартатайым. Ул заманында яҡын тирәләге 5 ауыл халҡының муллаһы булған, уҡымышлы, Ырымбур өлкәһендәге Ҡарғалы мәҙрәсәһендә дини белем алып ҡайтҡан. Ул хәмер яратыусыларҙы ошолай киҫәткән: "Бына һин туҡтауһыҙ эсеп йөрөйһөң, бер ваҡыт хәмер һинең башыңа етер. Үлгәс, йыназа уҡырға мине саҡырасаҡтар, ә мин эскеселәргә һис ҡасан йыназа уҡымаясаҡмын". Ул ваҡытта кешеләрҙә дини тыйыуҙарҙы боҙоуҙан ҡурҡыу булған әле, йыназаһыҙ ерләнеүҙән дә ҡурҡҡандар. Ошо өгөт-нәсихәт һөҙөмтәһендә эскенән ваз кисеүселәр ҙә була. Шундай бер осраҡ хаҡында ишеткәнем булды. Эсеп йөрөгән бер ир мәрхүм була, ҡартатайымды йыназаға саҡырып, тегенең туғандары килә. Ҡартатайым әлеге кешенең үлеменә уны тура юлға баҫтыра алмағандары өсөн туғандарын да ғәйепләй, һәм ысынлап та йыназаға бармай. Быны заманына ҡарата ҡаты иҫкәртеү итеп ҡабул итә халыҡ.

Башҡортостанда байтаҡ йылдар дауамында "Айыҡ ауыл" конкурсы бара, әллә нисәмә ауыл эскелектән арындырыу - оҙайлы процесс, тик был юҫыҡта күп эшләргә кәрәк. Шул уҡ айыҡ туйҙар, айыҡ байрамдар, хәмерһеҙ йолалар тергеҙелеүе мотлаҡ. Шәхсән минең фекерем: иң элгәре хәмер һатыуҙы тыйыу, башҡа сара юҡ.

Тағы ла бер миҫал. Ауылыбыҙ зыяратынан ситтәрәк бер ҡәбер бар ине. Миңә 12 йәштәр тирәһе, үлем-тыуым хаҡында, ерләү йолаһы тураһында беләм. "Ни эшләп был ҡәбер зыярат тышында?"- тип атайымдан һораным. Атайым ошолай яуапланы: "Уны зыяратҡа ҡуйырға ҡартатайың рөхсәт итмәне, сөнки ул үҙ-үҙенә ҡул һалған. Был мосолмандар өсөн бик оло гонаһ, шуны белеп ҡуй, улым". Әле лә бар үҙ ғүмерҙәрен өҙөүселәр, әммә мин муллаларҙың ошондай тыйыуҙы ҡулланғаны хаҡында ишеткәнем юҡ.

***Ул саҡта ла шул уҡ ауыл мөхитендә эскелеккә ҡаршы тороусылар була, шуларҙың береһе - ҡартатайым. Ул заманында яҡын тирәләге 5 ауыл халҡының муллаһы булған, уҡымышлы, Ырымбур өлкәһендәге Ҡарғалы мәҙрәсәһендә дини белем алып ҡайтҡан. Ул хәмер яратыусыларҙы ошолай киҫәткән: "Бына һин туҡтауһыҙ эсеп йөрөйһөң, бер ваҡыт хәмер һинең башыңа етер. Үлгәс, йыназа уҡырға мине саҡырасаҡтар, ә мин эскеселәргә һис ҡасан йыназа уҡымаясаҡмын". Ул ваҡытта кешеләрҙә дини тыйыуҙарҙы боҙоуҙан ҡурҡыу булған әле, йыназаһыҙ ерләнеүҙән дә ҡурҡҡандар. Ошо өгөт-нәсихәт һөҙөмтәһендә эскенән ваз кисеүселәр ҙә була.***

**Айыҡ йәшәү рәүешен һайлау, наркоманияға, әхлаҡһыҙлыҡҡа, енәйәтселеккә ҡаршы тороу, шул уҡ суицид осраҡтарына юл ҡуймау кеүек киҫкен проблемалар республикабыҙ өсөн һаман актуаль булып ҡала. Хәҙер тормошобоҙ күпкә етешерәк, эшләгән кешенең кейеме һәм ризыҡғына түгел, төрлө техникаһы ла,**

ине ул. Йәштәрҙең айырылышыу сәбәптәре бер төрлө булмаһа ла, улар ошо ниәттәренән ваз кисә алһындар өсөн дә кәңәш кәрәк, психологик ярҙам кәрәк. 10 йәш ғаиләнең икеһенә килешеү юлдарын табырға ярҙам итә алған хәлдә лә файҙа булыр ине.

Тағы ла бер миҫал. Һуңғы йылдарҙа донъя йәштәре араһында бер яңы мода киң таралыу тапты: ул электрон сигареттар тартыу, вейп тип аталған шыйыҡсаның парҙарын "төтәтеү". Ул төрлө саса, бер ни ҙә белмәйҙәр, хатта ҡарт олаталарының исем-шәрифен дә. Тағы ла һорайым: "Ауылығыҙҙа, районығыҙҙа тыуып үҫкән ниндәй геройҙар хаҡында беләһегеҙ?" 30-40 үҫмерҙән 1-2 бала ғына ыңғай яуап бирә. Советтар Союзы Геройы исемен йөрөткән бер гимназияла булғанымда уҡыусыларға һорау бирҙем: "Районығыҙҙа кемдәр Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ булған?" Белмәйҙәр. Шунан һорайым: "Ә гимназиягыҙ кем исемен йөрөтә, ул кем бул-

**2025 йылда Бөйөк Еңеүҙең 80 йыллығын ололап байрам итәсәкбеҙ. Был оҙаҡ йәшәгән кеше ғүмеренә тиң. Һәр бер ауылда яуҙарҙа һәләк булғандарҙың һәм һуғыштан һуңғы йылдарҙа вафат булғандарҙың теүәл исемлектәре бар. Байрамға тиклем ошо мәғлүмәттәр нигеҙендә район, ҡала һәм бөтөн республика буйынса Бөйөк Ватан һуғышы яугирҙарының дөйөм исемлеген - реестрын төҙөү бик сауаплы эш булыр ине.**

- Беҙ был эште байтаҡтан башланыҡ. "Бер кем дә онотолмаған" Бөтөн Рәсәй проектын Башҡортостанда ғәмәлгә ашырыу буйынса әүҙем эш алып барыла, яуаплы кеше тәғәйенләнде. Район хакимиәте башлыҡтарына ошо турала хаттар ебәрҙек, һәр бер ауылдың һуғыш яугирҙары хаҡында мәғлүмәттәр туплайбыҙ: тыуған һәм үлгән йылдары, ҡайҙарҙа һуғышта булған, ниндәй наградалары бар, ҡайҙа ерләнгән, ҡәберҙәре ҡараулымы һ.б. Әлеге көндә 240 мең самаһы фронтовик исемлеккә индерелә, аҙаҡтан уны социаль селтәрҙәргә ҡуясаҡбыҙ, һәм был мәғлүмәттәр барыһына ла билдәле буласаҡ. Бер нәмәгә инанғанмын: ата-бабалар хәтерен яңы быуындар һаҡлай. Ҡәберҙәре ҡаралмаһа, улар үҙҙәре лә онотола. Яугир ҡәберҙәрен яңыртыу - хәтер яңыртыу ул. Ҡайһы саҡта аптырап та, әрнеп тә ҡуям. Бына бер кеше миңә, минең олатайҙың ҡәбер ташын яңыртығыҙ, тип яҙа. Ә был эш уның үҙенең мөҡәддәс бурысы түгелме ни, тип әсенеп ҡуйһын шул саҡта.

**(Дауамы 10-сы биттә).**

*✓ Уҡымышлы, тәрән белемле булыуҙы заман үҙе талап итә. Айыҡ тормош юлын һайлау мотлаҡ заман башҡортона. Халҡыбыҙҙың тарихын белеү фарыз. Туған телебеҙҙе белеү, аралаша, уҡый-яҙа һәм ошо телдә ижад итә алыу мөһим.*

# ДЕПУТАТ БАЙҒУСҠАРОВТЫҢ ТОРМОШ СӘХИФӘЛӘРЕ,

## йәки Ҡалмаҡтан - Өфөгә, Өфөнән Мәскәүгә илткән юл

(Башы 8-9-сы биттәрҙә).

**Һеҙ, Зариф Закир улы, депутат булараҡ, байтаҡ йылдар буйына Рәсәйҙең Дәүләт Думаһында халыҡ мәнфәғәттәрен ҡайғыртаһығыҙ, уның йәшәйешен яҡшыртыуға үҙ өлөшөгөҙҙө индерәһегеҙ. Кемдер, мәҫәлән, ауыл кешеһенә урманда ҡороһары йыйырға рөхсәт иткән закондан әллә ниндәй фәтеүә юҡтыр, тип тә әйтәләр...**

- Был мәсьәләгә нисек ҡарайһың бит әле. Урмандарыбыҙҙа ҡороп йығылған, бер файҙаһыҙға сереп ятҡан ағас күп, ул бер ҡасан да бөтмәйәсәк. Элек нисек ине: ошо һеҙ әйткән ҡоро-һарыны йыйып алып ҡайтҡан кешене лесник күреп ҡалһа, ҙур ғына штраф һала. Был ағастар барыбер сереп юҡҡа сыға, әммә уны түләп алырға ғына була ине. Ауылдарҙа күп йөрөйөм, халыҡ фекерен беләм, ошо законды ғәмәлгә индергән өсөн рәхмәтле улар.

Бына бер хәл иҫкә төштө. Бөрйән яғында бер йылды дауыл сығып, байтаҡ ҡына йәш ҡарағайҙар ауҙы. "Беҙ ошо һынып, ергә ҡаҙалып бөткән ағасты тураҡлап алып ҡайтып, йорт-ҡаралтыбыҙҙы ремонтлар инек, тик урындағы урман хужалығы идаралығы рөхсәт итмәй", - тигән хәбәр килде бер ауылдан. Шул ауылға барып, халыҡты сходҡа йыйҙыҡ. Мин ауыл халҡына, ауған ағастарҙы үҙегеҙгә алығыҙ, тинем һәм был мәсьәләне Дәүләт Думаһында күтәрәсәгемде әйттем. Ауыл халҡы ошо ағастарҙан ауылда клуб һалырға хәл итте. Бына тағы бер миҫал. Беҙҙә ҡортсолоҡ алға киткән, солоҡсолоҡ та һаҡланған. Хәҙер умартасылар солоҡто үҙҙәре эшләп ҡуя, ә уның өсөн ағас кәрәк. Бының өсөн ҡороған йыуанныраҡ ағастарҙы файҙаланып була. Шулай итеп, беҙҙең 2020 йылда ҡабул иткән закон буйынса һәр кеше бер ниндәй рөхсәтһеҙ һәм бушлай йығылған ағасты алып ҡайтырға һәм үҙенең ихтыяжына ҡулланырға хоҡуғы бар. Ул закон тураһында мин Бәйләнештәге үҙ сәхифәмдә ентекләп бер нисә тапҡыр яҙҙым. Ҡыҙыҡһыныусылар инеп уҡый ала.

**Йәнә бер проблема хаҡында һеҙҙең фекерегеҙҙе белге килә. Совет осоронда халыҡ контроле институты булды, ул һөҙөмтәле эшләне. Әлеге ваҡытта бөтөн өлкәләрҙә лә контролде көсәйтеү файҙалы булмаҫмы икән?**

- Контроль кәрәк, әлбиттә. Һәр бер ведомство үҙ ҡарамағындағы ойошмаларҙы, предприятиеларҙы контролдә тота. Совет осорон алһаҡ, контроль органдары булған хәлдә лә урлашыу киң таралғайны. Бының үҙ сәбәптәре бар ине. Мин мәктәпте тамамлағас, тракторсы, водитель, мал ҡараусы булып колхозда эшләнем. Шул уҡ мал ҡараусылар ферманан һалам-бесәнде, силосты йә иһә мал онон аҙлап булһа ла үҙ йорттарына алып ҡайта ине, сөнки уларға бик түбән эш хаҡы арҡаһында көн итеүе ауырға төштө. Быны барыһы ла белгән хәлдә лә күҙ йомоп ҡаранылар. Советтарҙың ауыл хужалығы системаһы күп йылдар буйына рентабелле эшләй алманы. Шул уҡ он тарттырырға яраҡлы ашлыҡ сит илдәрҙән күпләп һатып алынды. Әлеге ваҡытта беҙҙең ил игенде үҙе башҡа илдәргә һата. Ауыл хеҙмәтсәндәре, башлыса, үҙенә эшләй, урлашыу өсөн ерлек юҡҡа иҫәп. Ауылдарҙа кеше аҙ ҡалыуына ҡарамаҫтан, техника, агротехнологиялар ярҙамында ҙур уңыш алып була. Ауылда ҡалырға теләмәгәндәр ситкә китә, һәр кемдең үҙ ирке, бер кемде лә көсләп ҡалдырып булмай.

**Һеҙ үҙегеҙ ҙә ауылығыҙҙы ҡалдырып китергә баҙнат иткәнһегеҙ...**

- Улай булғас, үҙем хаҡында ла һөйләп китәйем. Армиянан ҡайтҡас, атайым урынына көтөү көттөм. Ул: "Әйҙә, ауылда ҡал, көтөүселәр кәрәк, бергә эшләрбеҙ", - ти. Атайымдың бына шулай, уҡы, тип өгөтләгәнен иҫләмәйем. Уҡырға үҙем ынтылдым. Шуға ҡарамаҫтан, бишебеҙ ҙә юғары белемгә эйә булдыҡ. Тәүҙә атайыма Өфөгә барып эшкә урынлашырға теләүем хаҡында ғына әйттем. Ул ҡаршы булманы. Бер урынға 14 кеше дәғүә итһә лә, Башҡорт дәүләт университетының юридик факультетына, киске бүлеккә уҡырға инергә булдым. Өфөлә бер кемебеҙ ҙә юҡ, вокзалда ҡунып йөрөйөм, вагон бушатып, аҡса эшләйем. Имтихандарға элекке Матросов баҡсаһында, йә Крупская китапханаһында әҙерләнәм. Шулай итеп, уҡырға инеп киттем.

Бер ауылдашым Ауыл хужалығы институтында уҡый ине, уларҙың ятағындағы бүлмәлә иҙәндә йоҡлап йөрөнөм. Кеҫәлә аҡса юҡ, эшкә урынлашырға кәрәк. Суд ҡарары башҡарыусыһы вазифаһына эшкә урынлашырға булдым, риза булманылар, сөнки прописка юҡ. Прописка мәсьәләһен хәл итеп, оҙаҡ ҡына ныҡыша торғас, теләгемә өлгәштем. Суд ҡарары башҡарыусыһы булараҡ карьерам шулай башланды. Эш хаҡы аҙ, урам һепереүсе лә булып эшләйем. Иртәнге 5-тән тораһың да, өс сәғәт эсендә эшеңде тамамлайһың. Ә ял көндәрен төрлө урындарға "шабашка"ға йөрөнөм. Отпускыға сыҡһам, ауылға утын-бесән әҙерләшергә ҡайтам. Ғөмүмән, ғүмерем буйына оҙайлы ялда булманым, әммә һис үкенмәйем.

**Бәлки, бәғзе яҡташтарыбыҙ, ауылдан сыҡҡан бер ир-уҙаман юриспруденция өлкәһендә нисек итеп ошондай ғәжәпләнерлек карьера эшләне икән, тип аптырайҙыр...**

- Тормошомда барыһына ла үҙ көсөм, үҙ тырышлығым менән өлгәштем. Эш хаҡы ул саҡтарҙа әллә ни күп булмаһа ла 8 йылдан ашыу ябай суд ҡарары башҡарыусыһы булып эшләнем. 1998 йылда Өфө ҡалаһының Калинин районы судына федераль судья вазифаһына тәҡдим иттеләр. Тәүҙә риза ла булмағайным - яңы вазифа, яуаплылыҡ та үтә көслө. Шулай ҙа 5 йылға яҡын ошо вазифаны башҡарҙым. Район енәйәтселек яғынан ҡатмарлы, сиғандар күп ине, башлыса судта миңә ауыр енәйәттәрҙе ҡарарға тура килде. Мин судья булараҡ сығарған бер генә ҡарар ҙа юғары суд инстанциялары тарафынан ғәмәлдән сығарылманы.

**Судьяға көн һайын енәйәттәрҙе тикшерергә тура килә, ауыр енәйәт ҡылыусыларҙан һорау алыу, суд яҙаһын сығарыу һ.б. Судья кешенең ошо сәбәпле күңеле ҡатып, уға үҙ-үҙенә бикләнеү хәүефе янамаймы?**

- Кемгә нисектер, минең өсөн енәйәтселәрҙең закон боҙоу ғәмәлдәрен закон нормалары талап иткәнсә асыҡлап, баһалап, ғәҙел яза биреү беренсе планда булды. Енәйәт ҡылғанһың, кешене имгәткәнһең, үлтергәнһең икән - тейешле яҙаһын алаһың. Ғәҙеллек тантана итергә тейеш. Бына сиғандарҙы ғына алайыҡ - улар наркотик матдәләр менән һатыу итеүҙән һис ваз кисмәне. Суд рәйесе уларҙың енәйәт эштәрен миңә тапшыра, ғәҙел хөкөм итә алыуыма ышана ине. Тегеләр ниндәйҙер сихыр менән судьяға тәьҫир итә икән, тигән хәбәрҙәр ҙә булды. Бәғзе бер нәмәләрен минең кабинет ишегенә ҡыҫтырып киткәндәре лә булды, әммә мин быға иғтибар итмәнем, ҡурҡманым да. 2001 йылда, судья вазифаһынан китеп, Башҡортостан Республикаһының баш суд приставы итеп тәғәйенләнгәс, Өфө сиғандары бик ныҡ байрам иткән икән, тип ишеттем.

**Һеҙ, Зариф Закир улы, 2001 йылдан 2016 йылға тиклем республикабыҙҙың баш суд приставы вазифаһында эшләп, Башҡортостан судтары сығарған ҡарарҙарҙың теүәл үтәлеүен тәьмин иткәнһегеҙ. Унан һуң Рәсәй Дәүләт Думаһында 7 йыл дауамында закондар сығарыу эшмәкәрлеге менән мәшғүлһегеҙ. Юриспруденция өлкәһендәге бай тәжрибәгеҙ депутаттың төп бурыстарын бойомға ашырыуға ярҙам итәме?**

- Һис шикһеҙ, юридик практика халыҡ мәнфәғәттәренә тап килгән закон проекттарын тәҡдим итеү, уларҙы депутаттар ҡарамағына сығарыу һәм ҡабул итеү өсөн ныҡлы нигеҙ булып тора. Ҡоро һүҙ булмаһын тиһәк, миҫалдар килтерәйек. Законһыҙ рәүештә спиртлы эсемлектәр, суррогат хәмер һатыусылар арҡаһында Рәсәйҙә бик күп кеше ағыулана, хатта үлеп ҡала ине. Штраф - ни барыһы 2,5 мең һум. Закон боҙоусы был штрафты бар тип тә белмәй, яман эшен дауам итә. Ошондай законһыҙ эшмәкәрлекте физик һәм юридик шәхестәрҙе ҡаты яуаплылыҡҡа тарттырып ҡына туҡтатып була. Беҙ физик шәхестәргә штраф санкцияларын 30 мең һумдан 50 меңгә тиклем арттырҙыҡ, ә законды ҡабаттан боҙғандарға енәйәт эше асыу нормаһын индерҙек. РФ-ның Хоҡуҡ боҙоуҙар буйынса административ кодексына (КоАП) ошо нормативтарҙы индереүсе законды ҡарау һәм ҡабул итеү миңә йөкмәтелгәйне.

Бына тағы ла бер миҫал. Башҡортостандан бер һайлаусым армияла хеҙмәт иткән йылдарының страховой стажға индерелмәүе арҡаһында ваҡытынан алда пенсияға сыға алмауы хаҡында хәбәр иткәйне. Сроклы хеҙмәттә һалдатҡа эш хаҡы түләнмәгәс, страховой түләүе лә, стажы ла булмай. Ә ул иленә хеҙмәт итә, хәрби бурысын үтәй. Ысынлап та, быны ғәҙелһеҙлек тип аңларға кәрәк. Шуға күрә ошо мәсьәләне хәл итерлек закон нормаһын ҡабул итеү зарурлығы тыуҙы. Тейешле закон проекты яҙылды һәм ҡабул ителде, быйыл ул үҙ көсөнә инде. Армияла 2 йә иһә 1 йыл хеҙмәт иткән граждандар Пенсия фондына мөрәжәғәт итә ала, уларҙың страховой стаждары артасаҡ һәм пенсияларына өҫтәмә түләнәсәк.

Дәүләт Думаһының етенсе саҡырылышында мин Дәүләт төҙөлөшө һәм ҡануниәт комитетында эшләнем. Комитет рәйесе теге йәки был федераль закон проектын тәүге уҡыуға сығарыу бурысын миңә йөкмәтә башланы. Русса акцент менән һөйләйем бит, тип, мин тәүҙә баш тартҡайным. Рәйес: "Уныһы мөһим түгел, Зариф Закирович, юридик практикаң ҙур, депутаттарҙың һорауҙарына төплө яуап бирә алаһың", - тип ризалаштырҙы.

Әлеге саҡырылышта мин БР Башлығы Р.Ф. Хәбировтың тәҡдиме менән Экология, тәбиғи ресурстар һәм тирә-яҡ мөхитте һаҡлау буйынса комитетҡа күстем. Тәүҙә элекке комитеттан ебәрергә теләмәнеләр, республикабыҙҙа ла экологик проблемаларҙың киҫкен булыуын аңлатҡас, риза булдылар. Иң мөһиме - республикабыҙҙың экологик проблемаларын хәл итеү маҡсатында федераль ведомстволарҙан аҡса ҡайтартыу мәсьәләһенә булышлыҡ итеү мөмкинлеге бар. Бына Баймаҡ ҡалаһына яҡын ғына ҙур сүплек бар, халыҡ ныҡ зарлана, ул насар еҫ сығара, йыш ҡына ут тоҡанып, бөтә ҡалаға төтөн тарала. Әле шул эштәр өсөн федераль ҡаҙнанан 200 млн һум тирәһе аҡса ала алдыҡ, рекультивация эштәре тамамланып килә. Ҡалаларҙың ҙур сүплектәрен рекультивациялау өсөн Сибайға 300 млн, Стәрлетамаҡҡа 500 млн һум аҡса ебәрелде.

**Әңгәмәбеҙҙе йомғаҡлап, тағы ла бер һорауға яуап бирһәгеҙ, урынлы булыр, тим. Халҡыбыҙ үтә боронғо, меңәр йыллыҡтарҙы үтеп, үҙен-үҙе һаҡлап ҡала алған. Хәҙер беҙ яңы заманда, XXI быуатта йәшәйбеҙ. Халҡыбыҙҙың яҙмышы, киләсәге уның шәхестәре менән бермә-бер бәйле. Ниндәй булырға тейеш хәҙерге заман башҡорто?**

- Башҡорттоң күренекле мәғрифәтсе-шағиры Аҡмулланың һүҙҙәренән башлайыҡ: "Башҡорттарым, уҡыу кәрәк, уҡыу кәрәк!" Уҡымышлы, юғары һәм тәрән белемле булыуҙы заман үҙе талап итә. Икенсенән, айыҡ тормош юлын һайлау мотлаҡ заман башҡортона. Халҡыбыҙҙың тарихын төплө, тәрәндән белеү фарыз. Унан һуң туған телебеҙҙе белеү, аралаша, уҡый-яҙа һәм ошо телдә ижад итә алыу мөһим. Әлбиттә, тыуған иленә, еренә, ата-бабаларына, халҡына ҡарата булған һөйөү тойғоһон балаларында, ейәндәрендә тәрбиәләй алыу. Үҙ ғаиләндә тыуған ил, туған тел культын булдыра алыу. Ғаиләң - ҡәлғәң, балалар, ейәндәр - һинең киләсәгең ул. Бөтәһе лә ғаиләнән башлана.

**Әйткәндәй, үҙегеҙҙең ғаиләгеҙ хаҡында бер кәлимә һүҙ әйтһәгеҙ ине.**

- Ғаиләмдән ундым. Минең кәләшем Ҡолһарина Гөлназ Фәрит ҡыҙы иң шәп ҡатын. Уны Башҡортостанда белмәгән кеше һирәктер, Башҡортостан телевидениеһының "Тамыр" балалар телеканалында иҫ киткес күп эштәре, башланғыстары менән киләсәк быуындарҙы тәрбиәләүгә ҙур өлөш индерә. Халҡыбыҙға тоғро хеҙмәт итә ул. Минең тынғыһыҙ эшмәкәрлегемде гел хуплап тора, ныҡлы таянысым ул Гөлназ. Төнгө икеләме, дүрттәме ҡайтып керәм командировкаларҙан, ул һәр саҡ уяу ҡаршы ала, шунан икәүләп ултырып сәй эсәбеҙ. Ҡыҙым Гәлсәр, улым Урал - тәүфиҡлы балалар, ғаиләбеҙҙе биҙәп, беҙҙең йәшәйешкә мәғәнә, йәм биреп тора улар.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Башҡортостандың бер төпкөл ауылында тыуып үҫкән, үҙенең тырышлығы, тынғыһыҙ хеҙмәте менән халҡыбыҙға, республикабыҙға, ҙур Рәсәй иленә тоғро хеҙмәт иткән билдәле дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре Зариф Закир улы Байғусҡаров уҡыусыларыбыҙға, барса яҡташтарыбыҙға иҫәнлек-һаулыҡ, именлек теләп, халҡыбыҙҙың, республикабыҙҙың киләсәгенә яҡты өмөттәр бағлап хушлашты.**

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ әңгәмә ҡорҙо.**

✓ *Мин, мәҫәлән, сәхнәлә уйнайбыҙ, тигән һүҙ менән һис тә килешә алмайым, беҙ унда йәшәйбеҙ. Ундағы тормош бөтөнләй икенсе, тәҡдим ителгән ваҡиғалар солғанышында бирелгән образ менән бергә йәшәйһең.*



*ИЖАДХАНА*

**Кеше менән күҙгә-күҙ тероп һөйләшмәйенсә, уның эске донъяһын, күңел торошон белеп булмай. Бигерәк тә сәнғәт кешеләре, сәхнә оҫталары - актерҙар менән һөйләшкәндә ысын тормош менән сәхнә тормошон бутарға ярамай. Беренсенән, тышҡы ҡиәфәт алдаҡ, икенсенән, һүҙгә маһир кешеләр ҡолағыңа әллә күпме "һалма элеүе" ихтимал. Ә бит сәнғәт менән көндәлек тормош айырым йәшәй алмай, береһе икенсеһен туйындыра. Башҡортстандың атҡаҙанған артисы, Арыҫлан Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры артисы Айгөл Мираҫ ҡыҙы ХӘКИМОВА менән һөйләшкәндә, тормошоноң ике яғына ла иғтибарлы булырға тырыштым.**

# СӘХНӘЛӘГЕ ҺӘМ ТОРМОШТАҒЫ АЙГӨЛ

## Бейеүсе Айгөл

Актриса булһам да, ауылдаштарым мине бейеүсе тип ҡабул итә, сөнки ике йәшемдән бейей башланым һәм улар алдында бейеүсе булараҡ үҫтем. Бейергә бер туған Рәмилә апайым өйрәтте, берәй хәрәкәтте дөрөҫ эшләмәһәм, әрләп, мейешкә баҫтырып ҡуя торғайны. Шулай бейеп үҫтем, мәктәп йылдарында һәр саҡ сәхнәлә булдым, район кимәлендә үткән конкурстарҙа, смотрҙарҙа һәр ваҡыт беренсе урындарҙы ала торғайным. Аҙаҡ район мәҙәниәт йорто эргәһендәге "Йәшлек" ансамблендә бейенем. 10-сы класты тамамлағас, документтарымды БДУ-ға тапшырҙым, ләкин конкурстан үтә алмағас, район мәҙәниәт йортона эшкә урынлашып, балалар бейеү түңәрәге етәксеһе булып хеҙмәт юлымды башланым. Бер йыл эшләгәс, Өфөләге сәнғәт институтының театр факультетына уҡырға индем.

## Бейеү һәр саҡ эргәмдә булды

Элек бит тормош хәүефһеҙ ине, документтарымды туплап, Өфөгә яңғыҙым сығып киттем. Имтихандар ваҡытында төрлө этюдтар уйнап күрһәткәнебеҙҙе иҫләйем, башҡорт теленән имтихан бирҙек, шиғырҙар ятланыҡ, проза әҫәрҙәренән өҙөктәр уҡып ишеттерҙек. Ул осорҙа конкурс ҙур булды, нисектер, ыңғай тура килде, бер ҡыйынлыҡһыҙ, ауырлыҡһыҙ ғына институтҡа уҡырға инеп киттем. Уҡырға ингәндә ун ике кеше инек, туғыҙыбыҙ уҡып бөттө. Курс етәксебеҙ Рифҡәт Вәкил улы Исрафилов булды. Уҡытыусыларымдан ундым - Таңсулпан Бабичева, Эльвира Юнысовалар уҡытты, Гөлли Мөбәрәкова сәхнә теле серҙәрен өйрәтте. Шулай тулыһынса театр донъяһына инеп киттем, уҡып та йөрөнөм, етәксебеҙ, билдәле композитор, Айрат Ғайсин ойоштороған "Бәркәт" фольклор ансамблендә бейеүемде лә дауам иттем - бейеү һәр саҡтағылай эргәмдә булды. Башҡортостан райондары буйлап гастролдәргә йөрөнөк. Курсташтарым, Башҡортостанға ғына түгел, сит өлкәләрҙә лә билдәле артистар Айрат Абушахманов, Айсыуаҡ Йомағолов, Рушана Бабич, Светлана Шәрипова, Илсур Байымовтар менән дүрт йыл бергә уҡыныҡ. Минең дә Өфөлә ҡалырға мөмкинлек булды, Сибайға килеүемдең төп сәбәбе: әсәйемә, тыуған ауылыма яҡын булайым, тип уйланым. Бер-ике йыл эшләрмен дә, кире Өфөгә барырмын, тигән уй ҙа бар ине. Сибай театрындағы артистарҙың йылы мөнәсәбәте, килгәс тә төп ролдәрҙе биреүҙәре - бөтәһе лә үҙенә йәлеп итте, яңы коллективта йомолғанымды һиҙмәй ҙә ҡалдым.

## Атай йорто

Сығышым менән мин Әбйәлил районы Ҡырҙас ауылы ҡыҙымын. Ғаиләбеҙҙә ете бала (дүрт апайым, ике ағайым) үҫтек, атай-әсәйебеҙ беҙҙе бик тәртипле, итәғәтле итеп тәрбиәләне. Хәҙер улар был донъяла күптән юҡтар инде. Әсәйем бик матур йырлай торғайны, икеһе лә һомғол буйлы, шул тиклем матур, сибәр булдылар. Элеге ваҡытта апайымдар кейәүгә сығып, матур итеп Әбйәлилдең төрлә ауылдарында йәшәйҙәр. Бөтәһенең дә донъялары шундай матур, балалары юғары белем алып, төрлө урындарҙа эшләйҙәр, шуға туғандарым менән ғорурлана алам. Ауылдағы атай йорто нигеҙен һыуытмайбыҙ, отпуск, ял ваҡыттарында ҡайтып йөрөйбөҙ.

## Режиссерҙарға рәхмәт

Холҡом буйынса мин бик тырыш кеше. Роль алғас, ул ҡапыл ғына үҙенән-үҙе килеп сыҡмай, образдың өҫтөндә тырышып эшләргә, образдың характерын табырға, уға хас сифаттарҙы ситтән эҙләп таба белергә лә кәрәк. Спектаклдең уңышлы сығыуы күпселек режиссерҙарҙан тора, әлбиттә. Минә Олег Ханов, Вәкил Йосопов, Сәлихйән Әфләтүнов, Азат Йыһаншин, Азат Нәҙерғолов, Илнур Муллабаев, Вадим Ғилмановтар менән эшләргә тура килде. Һәр режиссерҙың эшләү алымы төрлөсә: Олег Закир улы, мәҫәлән, ныҡ талапсан, ул ҡуйғанда эшкә ваҡытында йөрөргә, тексты яҡшы белергә кәрәк, ул репетицияларға бөтөн яктан әҙер килеүҙе талап итә. Азат Йыһаншинда ла бар ундай сифаттар. Минә иң оҡшағаны Азат Нәҙерғолов менән эшләү булды. Ул артистар менән эшләгәндә ролгә, образға үҙенәнүҙе индереп ебәрә торғайны. Талапсан да булды, әммә уның менән эшләүе күңелгә яҡын була торғайны. Әлбиттә, режиссерҙарҙың береһен дә айырып ҡарамайым, барыһына ла рәхмәтлемен, бөтәһе лә ижад юлымда һөнәри оҫталыҡ йәһәтенән үҫеүҙә әйтеп бөткөһөҙ ҙур өлөш индерҙеләр.

## Ғаилә

Ике йылдан китәм тиһәм дә, Сибайҙы, театрҙы, коллегаларымды яратып өлгөрҙөм, Өфө тураһындағы уй бөтөнләй юҡҡа сыҡты. Уйлағанса, Ҡырҙасҡа ла йыш ҡайтып булманы, сөнки ул ваҡытта гастролдәр күп булды. Ваҡыт табып, Сибайға әсәйем үҙе килә торғайны. Шулай йәшәй, ижад итә торғас, тормош иптәшем Фәнзилде осраттым. Мин эшкә килгәндә ул, театрҙа эшләп, армияға алынғайны. Шундай аҡыллы, кешелекле, тип, коллегаларым алдан уҡ димләп ҡуйҙылар. Ул Баймаҡ районы Мерәҫ ауылы егете, әле Сибай концерт-театр берекмәһендә эшләй. Юғары техник белемле, Магнитогорскиҙа юғары уҡыу йортон бөткән. Ҡыҙыбыҙ Ләйсән тыуғас, беренсе класҡа тиклем гастролдәрҙә беҙҙең менән бергә йөрөнө, ҙурая килә спектаклдәрҙә лә уйнаны, ике өләсәһе алмашлап ҡаранылар. Ҡыҙыбыҙ бик һәләтле, сәнғәт мәктәбендә бейеү, вокал буйынса уҡыны. Ул да бейергә ярата, "Осҡон" бейеү ансамбле менән Төркиәгә барҙылар, Санкт-Петербургтағы бәйгелә Гран-при алған саҡтары ла булды. Шуға ҡыҙыбыҙ бейеүсе булыр, сәнғәт юлын һайлар, тип уйлағайным, әммә ул быйыл Өфө фән һәм технологиялар университетын тамамлап, "Өфө моторҙар эшләү производство берекмәһе"ндә инженер-конструктор булып эшләй.

Балаға үҙ фекеренде көсләп тағып булмай, ул бит донъяны үҙенсә күҙаллай, үҙе теләмәгән һөнәрҙе һайлаһа, уҡыған ваҡытта ла, аҙаҡ та үҙ юлын табыу ҡыйын була. Шулай ҙа ҡыҙымдың һайлауы көтөлмәгән яңылыҡ булды. Нинә ул юлды һайлағанын әле лә аңламайым, был бик



сетерекле мәсьәлә: әлеге ваҡытта сәнғәт икенсе планға күсеп бара, элек артистарға, сәнғәт кешеләренә ҡараш бөтөнләй икенсе төрлө ине. Йәштәрҙең сәнғәткә килмәүенән институтта конкурстар кәмей, әммә уларҙы һәләтһеҙ тип әйтеп булмай, Сибайҙа ғына төрлө йүнәлештәге әллә күпме ансамблдәр бар, бушҡамы ни уны бейеүселәр ҡалаһы, тип атайҙар. Миненсә, хәҙерге йәштәр аҡсалы урынды эҙләй.

## Сәхнә арты тормошо

Театрға 1995 йылда эшкә килдем, тиҙҙән утыҙ йыл була бында эшләгәнемә. Әҙ ваҡыт түгел, гел генә барыһы ла ал да гөл булды, тип әйтә алмайым. Йәшермәйем, ҡолаған мәлдәрем дә, шул ауырлыҡтарҙа бирешмәйенсә күтәрелгән ваҡыттарым да булды. Кешене бит күпме ҡолағанына түгел, күпме күтәрелгән иҫәбенә ҡарап билдәләйҙәр. Башҡа һөнәр кешеләрендә лә булалыр, әммә сәнғәт өлкәһендә көнсөллөк, аяҡ салыуҙар йышыраҡ һымаҡ, актриса булараҡ, үҙебеҙҙең мөхитте яҡшыраҡ беләм. Төрлө яла ягыуҙар, һин әйтмәгәнде һинең исемдән һөйләүҙәр аптырата, иҫем китә хатта. Ни өсөн күрә алмаусанлыҡ бар икән был донъяла, тип нык борсолам. Шулай, кешенең яҙмышында бөтәһе лә ал да гөл булмай шул, ҡыҙғанысҡа күрә. "Һеҙ, артистарҙы, ситтән генә ҡарап йөрөргә кәрәк икән, һеҙҙең кухняғыҙға инергә ярамай", тип әйтеп ҡуйҙы бер мәл беҙҙә эшләгән бер ҡатын. Сәхнә арты тормошо тураһында яҙа һалып бармайҙар, унда бит шатлығы ла, ҡайғыһы ла бар.

## Бала күңеле далала

Хәҙер үҙәккә ынтылыу тенденцияһы бара, был бәлә бәләкәй ҡалаларға янай. Белмәйем, бәлки, эш мәсьәләһе, күберәк аҡса ҡыҙыҡһындыралыр. Сибайҙа ла бит хәҙер пенсионерҙар һәм студенттар ҡалаһы тип йөрөтәләр. Ҡыҙыбыҙ Өфөгә уҡырға ингәс, бер бөртөк ҡыҙыбыҙҙы уйлап, иптәшем менән баш ҡалаға күсергә тигән теләк беҙҙә лә булды, хатта әҙерләнеп тә бөткәйнек. Беҙҙең күсенергә тигән теләкте ишеткәс, атай-әсәй, артымдан йөрөмәгеҙ, мин үҙем уҡыясаҡмын, тип ҡырт киҫте ҡыҙыбыҙ. Уны ситкә сығарып ебәреүе күңелгә шул тиклем ауыр булды, ләкин үҙебеҙҙе көскә тыйып, Сибайҙа ҡалдыҡ. Хәҙер ата-әсәләр балалары артынан үҙҙәре йөрөй бит, сөнки тормош бөтөнләй икенсе, беҙҙең осор менән сағыштырғыһыҙ. Ярай, хәҙер элекке кеүек барып, имтихан биреп йөрөү кәрәкмәй, документтарын ебәреү етә. Тик ниңәләр бөгөнгө балаларға төрлө яҡлап ҡурҡыныс янаған һымаҡ ҡабул итәм.

## Ике Айгөл

Сәнғәт кешеләре хислерәк була, сөнки беҙ күберәк йөрәк менән эш итәбеҙ, ә был күп энергия талап итә. Эмоциялар ташып торғас, шартлап та, йомолоп та китәбеҙ. Мин, мәҫәлән, сәхнәлә уйнайбыҙ, тигән һүҙ менән һис тә килешә алмайым, беҙ унда йәшәйбеҙ. Ундағы тормош бөтөнләй икенсе, тәҡдим ителгән ваҡиғалар солғанышында бирелгән образ менән бергә йәшәйһең, уйланаһың, ҡыуанаһың, ҡайғыраһың һәм башҡаһы. Сәхнәләге Айгөл менән тормоштағы Айгөл нык айырыла. Сәхнәне тормош менән бутарға ярамай. Күңелгә үтә яҡын булған образдарҙан ҡай ваҡыт ошо тормошҡа ҡайтҡы килмәй, шул образда, шул ваҡытта, шул хәл-ваҡиғалар эсендә йәшәгә килә. Сәхнәнең үҙ ҡануны бар: тормоштағын сәхнәгә индерергә ярамай, бөтә проблемаларҙы театр ишеге алдында ҡалдырырға кәрәк, уларҙы сәхнәгә һөйрәп мендерһәң, уйнаған ролдәр килеп сыҡмаясаҡ, сөнки сәхнәлә тик образ менән йәшәргә кәрәк. Театр бит ул эш урыны ғына түгел, сәнғәт кешеһе өсөн ул бөтөн фигеле, булмышы, ул үҙе айырым тормош. Беҙҙән алдағы һәм беҙҙең быуын сәнғәткә тулыһынса бирелгәнбеҙ. Бөгөнгө йәштәрҙә был күренеш һирәгерәк күренә, хәҙер күптәр театрҙы эш урыны тип ҡабул итә - килдең, ролеңде уйнаның, сәғәтеңде тултырҙың, ҡайтып киттең, эш хаҡы түләнәсәк - донъяның матди яғына өҫтөнлөк бирә. Күктә осоп йөрөп, ергә төшөүе ҡыйын бөгөнгө көндә.

## Тормош дауам итә

Быйыл 50 йәшлек юбилейымды үткәрәм. Тау артында һымаҡ ине, килеп еткәнен һиҙмәй ҙә ҡалғанмын. Яратҡан коллективым, партнерҙарым менән ҙур концерт программаһы менән билдәләп үтергә, тигән уйым бар. Тамашасыларға рәхмәт әйткем килә, улар театрҙы ташламаһындар, үҙҙәрен борсоған һорауҙарға яуап тапһындар. Хоҙай Тәғәлә хәүефтәрҙән араланһын, һуғыштар бөтһөн, донъябыҙ яҡшырһын, тигән өмөт менән йәшәйек. Маңлайға яҙылғанды күреп йәшәйбеҙме, әллә тормошобоҙҙо үҙебеҙ булдырабыҙмы, тигән һорауға гел яуап эҙләйем, был турала йыш уйланам, тулыһынса һаман да яуап бирә алмайым. Тормошта осраҡлы кешеләр юҡ, тип әйтәләр, уларҙың һәр береһе беҙгә нимә өсөндөр килә. Кеше һәр саҡ һайлау алдында баҫып тора. Был яҡтан интуициям бик көслө, буласаҡ хәлдәрҙе алдан һиҙәм. Бәлки, был актер һөнәренә бәйле һиҙемләүҙер, белмәйем, әммә эргәмдәге кешенең нимә уйлағанын күҙҙәренә ҡарап һиҙә алам. Үҙемде тырыш, тип һанайым, эшкә һуңламайым, һуңлағандарҙы яратмайым. Минең өсөн беренсе урында ҡаты тәртип булырға тейеш. Эшкә һуңлау партнерҙарыңды, коллегаларыңды хөрмәт итмәү була, минеңсә. Театр бит ул тере бер организм, беребеҙ булмаһа ла, спектаклдең, репетицияның бәсе китә. Беҙ бит шуға бер ғаилә һымаҡ йәшәйбеҙ, ижад итәбеҙ: әсәй ҙә, ҡатын да, коллега ла, бейеүсе лә, йырсы ла һәм башҡаһы...Ҡыҫҡаһы, күп ҡырлы.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Эйе, сәхнәлә образдар тыуҙырыусы сәхнә оҫтаһының тормошта үҙ образы ла бар. Ул - әсәй ҙә, ҡатын да, коллега ла, бейеүсе лә, йырсы ла һәм башҡаһы...Ҡыҫҡаһы, күп ҡырлы.**

**Радик ӨМӨТҠУЖИН**

✓ *Яңғыҙы тиерлек тотош системаға ҡаршы даулы яуға ярҙай күтәрелгән шәхес. Ялҡынлы публицистиканы художестволы кимәлгә күтәргән, шиғриәтте кәрәк мәлендә өтөп алырҙай образлы публицистикаға еткергән шағир.*



ИНТЕРНЕТТАН



# КӨҘҘӨ "ЯРАТЫУСЫ" СИРҘӘР

■ Тирелә яңы барлыҡҡа килгән ҡайһы бер үҙгәрештәргә күҙ йоморға ярамай, бындай саҡта табипҡа мөрәжәғәт итеү хәйерле. Бигерәк тә миң йәки тирелә́гә яра төҫөн, тығыҙлығын үҙгәртеүе мотлаҡ табипҡа барыу өсөн сәбәп булып тора, ти колопроктолог-онколог, медицина фәндәре кандидаты Инна Тулина. Уларҙың яман шешкә әүерелеп китеү мөмкинлеге бар һәм онкологияның бындай төрө башҡаларына ҡарағанда йәшерен түгел, ә үҙегеҙҙең күҙ алдында үҫешә. Шуға ла миң үҙгәрһә, ҙурайһа, шулай уҡ ниндәйҙер сабыртыу сығып, йүнәлмәһә, ваҡытты бушҡа уҙғармағыҙ, был һеҙҙең сәләмәтлегегеҙҙе һәм ғүмерегеҙҙе һаҡлап ҡаласаҡ.

■ Көнө буйы көс-ҡеүәтегеҙ ташып торһон тиһәгеҙ, иртән дөрөҫ туҡланығыҙ, тип кәңәш итә эндокринолог, профессор Зөһрә Павлова үҙенең телеграм-каналында. Иртәнге аш аҡһымға, оҙаҡ эшкәртелгән углеводҡа бай булырға тейеш тигәнде ишеткәнебеҙ бар. Шулай уҡ уяныу өсөн ҡәһүә эсергә кәрәк, тигәнгә лә ышанып бөткәнбеҙ. Әммә табип белдереүенсә, ҡәһүә 4 сәғәткә етерлек кенә көс бирә, ошо арауыҡтан һуң организм йә яңынан кофеинға мохтаж, йә йәйәү саф һауала йөрөп алырға кәрәк. Углеводтарҙың тәьҫире 1 сәғәткә генә етә. Ә бына аҡһым тотош көнгә етерлек ҡеүәт өҫтәй. Аҡһым баш мейеһе эшмәкәрлеген әүҙемләштерә, ҡандағы шәкәр кимәлен нормала тоторға ярҙам итә. Шуға ла иң дөрөҫ иртәнге аш аҡһымдан торорға тейеш, ә бына ҡәһүәне ас ҡарынға түгел, ә ашағандан һуң эсеү хәйерле.

■ Һыуыҡ миҙгелдә күптәр үҙен насар тоя. Баш ауыртыуы ла йышая. Шулай уҡ йөрәк өйәнәге лә был ваҡытта йышыраҡ күҙәтелә икән. "Быуындары һыҙлаған ун кешенең, мәҫәлән, бер әүһендә генә ауыртыуҙың көсәйеүе көндәрҙең һалҡынайтыуы менән бәйле. Шуға ла һыуыҡтар быуындар сирен көсәйтеп ебәрә тейеүҙең дөрөҫлөккә тап килмәүе лә бар. Бәлки, кеше үҙен насар тойоуы арҡаһында быуыны ауыртыуына ла иғтибар итә башлай һәм табипҡа мөрәжәғәт итә. Бының кешенең физик әүҙемлеген кәметеүе, йәйәү әҙерәк йөрөүе менән дә бәйле булыуы ихтимал. Ә бына һыуыҡтар менән баш ауыртыуының бәйләнеше иҫбатланған. Түбән температурала баш өлкәһендә булған рецепторҙар йышыраҡ ҡуҙғый һәм баш ауырта башлай. Шулай уҡ көҙөн тын юлдары сирҙәре лә үҙен һиҙҙерә башлай. "Һыуыҡ һауа ҡороҡаҡ, ул тын юлдарына тәьҫир итеп, уны шештерә, астма, ҡурылдай, үпкәләрҙең хроник ауырыуҙарын көсәйтә. Бында икенсе сәбәп тә бар: ҡурылдай быумаһын булдырыусылар һыуыҡ һәм дымлы шарттарҙа үҙен яҡшы тоя", ти белгестәр.

■ Ябығырға тырышыусылар банан ашамай, сөнки ул юғары калориялы иҫәпләнә. Әммә банан ашап та ябығып була, тип белдерә хирург Каран Радж. Бының өсөн сей банан ашарға кәрәк икән. Йәшел банандағы крахмал организмға май булып ултырмай, киреһенсә, ул файҙалы пребиотик. Ул шулай уҡ ҡандағы глюкоза кимәлен күтәрмәй, түбән калориялы. Өлгөрә килгән һайын банандағы крахмал ябай углеводҡа әүерелә. Тик был банан файҙаһыҙға әүерелә тигән һүҙ түгел. Банан ныҡыраҡ бешһә, хатта көрәнәйеп китһә, унда антиоксиданттар кимәле лә юғарыраҡ. Ул һис шикһеҙ, яҡшы кәйеф сығанағы ла.

ХӘТЕРКИТАП

**Күңел түремдә күптәндән йөрөткән хыялымды тормошҡа ашырҙым: Рәми Ғариповтың ижады - яҙмышы (биографияһы) менән тығыҙ үрелештә булыуын, бәхәскә нигеҙ ҡалдырмаҫтай сығанаҡтарға таянып, халыҡ шағирының барса яҙмаларын (шиғыр-поэмаларын, көндәлек-хаттарын һ.б) берәмтекләп өйрәнеп, ентекле анализлап, уларҙы дөйөмләштереп, тейешле һығымталар сығарып, монографик һыҙатлы фәнни-популяр хеҙмәт тамамланым. Ул "Ағиҙел" журналының быйылғы август һанында донъя күрҙе. Редакция хеҙмәткәрҙәренә, тәү сиратта баҫманың баш мөхәррире Мөнир Ҡунафинға ихлас рәхмәттәрем яуһын: улар бер һанды тотошлай тиерлек был материалға биреп ҡуйыуҙан да ҡыйыңһынманылар. Ысынында ла бындай иғтибарға лайыҡлыларҙың да лайыҡлыһы бит ул Рәми Ғарипов!**

# ФИҘАҠӘРЛЕК,

## йәки Йөрәгеңдәме Рәми рухы, милләттәш?



Рәми Ғариповтың тормошо - ижадынан айырылғыһыҙ! Был - һирәк осрай торған күренеш шәхестең бөтөнлөгө менән бәйле, йәғни шағир кешелек намыҫына, үҙ инаныстарына хыянат итмәйенсә йәшәгән һәм ижад иткән. Кешемен тигән Кеше өсөн тәбиғи булырға тейешле бындай бейеклеккә күтәрелә алыу өсөн ҡоростай рух ныҡлығы, милләтенә, туған халҡына бар булмышын менән бирелгәнлек, үҙ өҫтөндә (белемеңде арттырыу, аңыңды үҫтереү, тән сәләмәтлегеңде нығытыу) даими эшләү мотлаҡ. Минең, автор булараҡ, төп маҡсатым да ысын мәғәнәһендәге халыҡ шағирының, иҫ киткес ҡыйынлыҡтарға дусар ителеүенә ҡарамаҫтан, үҙ-үҙенә, халҡына хыянат итмәйенсә йәшәй һәм ижад итә алыуы - фиҙаҡәрлек өлгөһө булыуын асып һалыуҙа ине.

Башҡорттоң һис ҡасан юйылмаҫ хәтер көмбәҙенә алтын хәрефтәр менән уйылған данлыҡлы ул-ҡыҙҙары тураһында уйланғанда үҙемә-үҙем һорау ҡуям: "Нисек итеп, күптәр фекеренсә, кешелек мәҙәниәте усаҡтарынан алыҫтараҡ, сит-ҡырыйҙараҡ йәшәгән минең ата-бабалар шул уҡ усаҡтарҙы ҡыҙыулатырҙай яғыулыҡ өҫтәй алдылар икән?.." Һәм уға шундай яуап табам: "Улар - үҙҙәре булып ҡала алғанға, тыуған ергә йәне-тәне менән ереккәнгә, кешелек бәҫен юғары тотҡанға, шәжәрәләрен, тарихи ваҡиғаларҙы, рухи байлығын түҙәгә, аҡ ҡағыҙға, ташҡа соҡоп яҙыуҙан да бигерәк йөрәктәренә яҙғанға, ҡанына һеңдергәнгә, тыуып үҫкән, шәхес, милләт, халыҡ булып етешкән тәбиғәт ҡосағын Ер-Әсә тип изгеләштереп, уның яҙмышын үҙенекенә ҡуша үргәнгә меңдәрсә йыллыҡтар аша үтә алған!.." Тап шулай булғанға Бошман бей ғәскәре илйортҡа ҡара яу булып ябырылған татар-монгол юлына тере ташҡын булып күтәрелә; яҙмышына яҙғаны батырҙы ҡоралһыҙ көйөнсә дошманы алдына күҙмә-күҙ килтереп баҫтырһа ла, Бошман теҙ сүкмәй... Ялыҡ бей ҙә балаларын, яҡындарын, тотош ырыуын юғалтһа-юғалта, әммә илбаҫарҙарға сая ҡаршылыҡ күрһәтә.

Эйе, тарихтың иң хәл иткес боролошло мәлдәрендә ил яҙмышы өсөн яуаплылыҡты үҙ иңдәренә аласаҡ шәхестәрҙе халыҡ үҙе тыуҙыра. Шағәли Шаҡман, Тәтегәс, Алдар, Кинйә (Бошман бейҙән унынсы быуын нәҫеле), Салауат, Ҡаһым түрә, Зәки Вәлиди, Шәһит Хоҙайбирҙин, Муса Мортазин, Миңлеғәли Шайморатов, Ғәфиәт Арыҫланов (башҡорттарҙан тәүге Советтар Союзы Геройы, Кинйә нәҫеле), Шәйехзада, Рәми ... Бына был диңгеҙҙән бер тамсылай ғына аталған арҙаҡлыларҙы юғары үкыу йорттары, матди байлыҡҡа табыныу түгел, ә йөрәккә яҙылған, ҡанға һеңешкән изгеләрҙән-изге рух тәрбиәләгән!

Халҡының йөрәк түрендә урын алған легендар батыр образын тереләрҙән дә терерәк итеп ҡуҙаллап үҫә Рәми. Аҙағыраҡ уның бер туған ҡустыһы былай тиәсәк: "Инәйҙән (әсәйҙән. **Ф.К.**) беҙ беренсе тапҡыр Салауат тураһында йырҙар ишеттек. Халҡыбыҙҙың башҡа йырҙарын да ул еткерҙе беҙгә... Балалыҡ йылдарыбыҙ матур Йүрүҙән буйында үтте. Рәми Йүрүҙәнде бөтә күңеле менән ярата..."

Тыуған еренә, халҡына, иленә ҡарата булған һөйөү уты ана нисек ярала! Бындай хикмәтле ут һүнеү өсөн тоҡанмай, сөнки осҡондары башҡаларға ла ҡағыла. Ул - кешелек өсөн тоҡанған Данко йөрәгендәге ут һымаҡ уҡ, милләттең аңын яҡтыртыуҙа мәңге яныр символға әүерелә... Эйе, халҡына йәнең-тәнең, барса булмышың менән бирелгәнлек өлгөһөнә әйләнде Рәми Йәғәфәр улы Ғарипов!..

Замандаштары, башлыса, йә ихластан, йә ағымға һуҡырҙарса ҡушылып, идеологияға хеҙмәт иткәндә, ул халҡының данлы үткәне, яҡты киләсәге хаҡына, намыҫлы йәшәүҙе гражданлыҡ бурысы һанап, туған халҡының милли булмышын яҡлап, яңғыҙы тиерлек тотош системаға ҡаршы даулы яуға ярҙай күтәрелгән шәхес. Ялҡынлы публицистиканы художестволы кимәлгә күтәргән, шиғриәтте кәрәк мәлендә өтөп алырҙай образлы публицистикаға еткергән шағир.

Рәми үҙен, үҙ кисерештәрен, халҡының улы булараҡ, уның күҙлегенән үҙ заманының ысынбарлығын асып һалды. "Халҡым!" тип йәшәгәндәр өсөн ғүмерҙәренең ауыр саҡтарында Рәмиҙең яҙмышы ла, ижады ла алыштырғыһыҙ рухи таяныс ул!..

"Халҡым!" тип типкән йөрәктең үҙҙәрен шул халыҡтың "юлбашсылары" итеп иҫәпләгәндәр тарафынан үгәйһетелеүе - бер килеп шартларға тейешлегә тәбиғи ине. Уның 45-кә етә алыуын физик яҡтан да, рухи йәһәттән дә үҙен һәр даим нығытырға ынтылыуы менән генә аңлатырға мөмкин. Рәми тиклем Рәмиҙең йөрәге шартлауы - уның ни тиклем ауыр йөк йөрөтөүе тураһында һөйләй, минеңсә.

Мостай Кәрим үҙенең һоҡланғыс ижад емештәрен уҡыусыһына еткерә алыу өсөн әҙәм күңелен арбар ихлас йылмайыун һәм бөтә аҡыл көсөн егеп, алышынып тороусы етәкселәрҙең һәммәһе менән дә уртаҡ тел таба. Уның яраҡлаша алыуы - ижади потенциалын тулыһынса тормошҡа ашырырға, аҙаҡ Рәсәй кимәлендә танылыу яулаған, был абруйын халыҡ мәнфәғәтен (билдәле дәрәжәлә, үҙен дә онотмайынса!) яҡлау өсөн ҡулланыуы - бөтә донъяға билдәле ғалим Галилео Галилей (1564-1642) яҙмышын хәтерләтә. Был астроном ғилми тикшеренеүҙәрен аҙағынаса алып барып еткереү өсөн инквизиторҙар ҡаршыһында исем өсөн генә Коперник идеяларынан (Ер Ҡояш тирәләй әйләнә, ә Ҡояш һымаҡ йондоҙҙар йыһанда бихисап!) баш тарта. Галилей, ошо аҙымына бәйле, фән донъяһында үҙ исеменә тап төшөрөп булһа ла, башҡөллө фәнгә бирелгәнлеккә өлгө итеп ҡабул ителгән. Джордано Бруно (1548-1600) иһә, астрономик асыштарынан баш тартмай һәм терелэй усаҡта яндырыла. Үлемгә барһа бара, әммә кешелек намыҫына тап төшөрмәй. Бруно - фәнгә намыҫлы хеҙмәт итеү өлгөһө булараҡ билдәле. Рәми - Брунонын рухи игеҙәге ул: яҙмышына яҙған бар ауырлыҡтарҙы ирҙәрсә, Салауатыбыҙ һымаҡ (!) күтәрә алған ҡаһарман!

**Әйткәндәй, күптән түгел ошо хеҙмәтем үҙнәшер ысулы менән айырым китап булып донъя күрҙе. Уны "Китап" нәшриәте магазинында (Өфө, Октябрь проспекты, 2 ) алырға мөмкин.**

Фәнил КҮЗБӘКОВ,
филология фәндәре докторы,
профессор.

✓ ***Табип билдәләүенсә, COVID-19 сире лә хәҙер ғәҙәти респиратор инфекцияһына оҡшаған, ул ҡатмарлыҡтар тыуҙырып бармай. Шуға ла клиник йәһәттән уларҙы айырып ҡарау ҙа кәрәк түгел.***



ҺАБАҠТАР

# ҺАРАНЛЫҠТАН ҺАҠЛА!



**Ҡояшлы көҙгө иртә. Ҡала уртаһы булһа ла, һауа саф, таҙа тойола. Тын алыуы иркен, рәхәт. Төпһөҙ зәңгәр күккә һоҡланып килә торғас, аҡ яулығын килешле генә ябынған, балитәкле күлдәк кейгән инәй пәйҙә булды. Оло йәштәге был ҡатын элек тә урамда осрай торғайны. Иҫәнлек-һаулыҡ һорашҡас, унан йома хәйерен бирергә рөхсәт һораным.**

- Аллаһу Тәғәләнән яман күҙҙән, яман һүҙҙән, тар күңеллелектән, һаранлыҡтан һаҡла, тип һорап йөрөгөҙ, балам. Тап шулар кешене бөтөрә, бәхетһеҙ итә. Яман күҙ кешене ауырыуға һабыштыра, яман һүҙ төшөнкөлөккә бирелдерә. Ә һаранлыҡ кешенең күңел тынысылығын ала, тормошҡа, эргә-тирәһендәгеләргә булған мөхәббәтен үлтерә, - тине ул.

Ысынлап та, иртә һайын һәр кем үҙенә хәйерле ғүмер, һаулыҡ, байлыҡ һорап, Хаҡ Тәғәләгә ялбаралыр. Ә бына нәфсенән, ҡомһоҙлоҡтан арала, тигәнде бөтәбеҙ ҙә әйтәме икән?

Кешегә әйберен бирергә ҡыҙғанған, ҡулына эләккәнде ысҡындырмаҫҡа тырышҡан, үҙендә булһа ла, башҡаларҙыҡына иҫәп тотҡан кеше үҙенән-үҙе биҙҙерә. Бәләкәй саҡта тыңлап, уҡып үҫкән әкиәттәрҙән, бөгөн ҡараған киноларҙан күренеүенсә, аҡсаға-байлыҡҡа ҡыҙыҡҡандарҙың тормошо бер ҙә көнләшерлек түгел.

Инглиз ғалимдары шундай тикшеренеү үткәргән. Оҙайлы йылдар улар ике төркөм кешеләрҙе күҙәткән. Уларҙың береһендә бүләк бирергә, икенсеһендә, киреһенсә, күберәк алырға ятраҡандар булған. Был ҡыҙыҡлы тикшереү шуны асыҡлаған: тәүге төркөмдәгеләр үҙен бәхетлерәк, уңышлыраҡ тойған. Һаулығына һирәгерәк зарланған, оҙағыраҡ йәшәгән. Икенсеһендәгеләр эшенән, тормошонан, эргә-тирәһендәгеләрҙән бик һирәк ҡәнәғәтлек кисергән, сәләмәтлеккә лә туймаған.

Баҡтиһәң, яҡындарының күңелен күтәрергә, бүләк итергә, кәрәк икән, йәнен фиҙа ҡылырға әҙер кешеләрҙә, ғашиҡ булған, ятраҡан ваҡыттағы кеүек, ҡеүәтле көс барлыҡҡа килә икән. Тап ошо энергия ауырыуҙан һауығырға, үҙенде бәхетле тойорға, уңышҡа өлгәшергә, ғүмерҙе оҙайтырға ярҙам итә. Уның нәҡ шулай икәнлеген элекке бер хеҙмәттәшемдең һөйләгәне лә иҫбатлай.

- Мин йыш ғашиҡ булам. Тик был тойғо минең ғаиләм тормошона бер ҙә ҡамасауламай. Киреһенсә, минә тәрлө проблемаларҙы еңел хәл итергә булышлыҡ итә. Ятраҡаным ысын кеше булғаны ла бар. Билдәле инде, был хаҡта үҙемдән башҡа бер кем дә, бер нәмә лә белмәй. Ғашиҡ булғаным уйлап сығарған образ булыуы ла мөмкин. Хыялымдағы шул кешегә оҡшар өсөн кейенәм, биҙәнәм, тырышып эшләйем. Ни өсөн шулай эшләйемме? Был тойғо мине үҙемде тонуста торорға ярҙам итә...- тигәйне ул.

Ысынлап та, ул башҡаларҙан көр күңеллелеге, ваҡ-төйәктән өҫтөн булыуы, бер нәмәгә лә зарланмауы, киреһенсә, яуаплыраҡ, тырышыраҡ булыуы менән айырыла ине. Хәҙер ул ҡатын күптән хаҡлы ялда инде. Әммә бөгөн дә йәштәрсә дәрт менән донъя көтә. Яңыраҡ хәләл ефете менән ҡултыҡлашып китеп барғанында тап иттем уны.

- Һаман да ғашиҡ булаһыңмы? - тип һорамай булдыра алманым.

- Һис шикһеҙ! - тип яуапланы ул.

...Ҡаршыма осраған яҡты йөҙлө инәйгә рәхмәт әйттем дә ары атланым. Үҙем эстән генә ул әйткән фәһемле һүҙҙәрҙе ҡабатланым:

- Эй, Хоҙайым, беҙҙең барыбыҙҙы ла яман һүҙҙән, яман күҙҙән, һаранлыҡтан, ҡомағайлыҡтан һаҡла! Был тормошто һөйөү менән үтергә ярҙам ит!

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

КӘҢӘШ-ТӨҢӘШ

# ҺАҠЛАН: КИҘЕҮҘӘР МӘЛЕ



**Һуңғы осорҙа электрон баҫмаларҙың барыһы ла тиерлек "Быйыл көҙ Рәсәйҙә тридемия башланыуы ихтимал" тигән хәбәр тарата. Һуңғы йылдарҙа былай ҙа көҙҙә, ҡышты хәүеф менән ҡаршы алырға күнеккән халыҡ, һис шикһеҙ, тағы ла ҡурҡыу тойғолары кисерергә мәжбүр. Нимә һуң ул тридемия? Табип-инфекционист, медицина фәндәре кандидаты Андрей Поздняков ошоға аныҡлыҡ индерҙе.**

Был яңылыҡты Санкт-Петербург дәүләт педиатрия медицина университетының өлкәндәр араһындағы инфекция сирҙәре һәм эпидемиология кафедраһы етәксеһе Елена Эсауленко башлап әйткәйне. Һалҡын миҙгелдәрҙә киҙеү, COVID-19, уларҙың бер туҡтауһыҙ үҙгәреп һәм яңырып торған штамдары, шулай уҡ ғәҙәти респиратор инфекциялар йоҡтороу еңелерәк - быны һеҙ былай ҙа беләһегеҙ. Ғәҙәти инфекциялар тигәндә, башлыса, респиратор сирҙәр тыуҙырыусы аденовирустар, риновирустар күҙ уңында тотола. Ошо вируслы сирҙәр, киҙеү һәм COVID-19 өсөһө бер үк ваҡытта әүҙем таралып, эпидемияның көсөн өсләтә арттыра булып сыға. Шуға ла уны өс эпидемия - "тридемия" тип атағандар. Әммә инфекционист Андрей Поздняков әйтеүенсә, был кеше ошо сирҙәр менән бер юлы ауырый тигән һүҙ түгел. "Бер юлы өс сир менән ауырыу осраҡтары бик һирәк, сөнки вирустар ҙа кеше популяцияһында булыу һәм үрсеү мөмкинлеге өсөн бер-береһенә конкурент. Тимәк, быйылғы миҙгелдә лә кешенең киҙеү, коронавирус һәм ғәҙәти вирустар йоҡтороуы бар".

Табип билдәләүенсә, COVID-19 сире лә хәҙер ғәҙәти респиратор инфекцияһына оҡшаған, ул ҡатмарлыҡтар тыуҙырып бармай. Шуға ла клиник йәһәттән уларҙы айырып ҡарау ҙа кәрәк түгел, сөнки ике сирҙең дә симптомдарын дауаларға кәрәк - күберәк һыу эсергә, бүлмәне елләтергә, фатирҙағы һауаның артыҡ ҡоро булыуынан һаҡланырға. Ә бына киҙеү миҙгеле башланыуын барыһы ла тояса҄к. "Киҙеү - респиратор инфекция булһа ла, ул башҡасараҡ үтә. Кеше ҡапыл ауырый, хатта ниндәй билдәләр ҡасан башланыуын да әйтеп бирә аласа҄ҡһығыҙ. Температура 37-38-гә тиклем күтәрелә, баш, быуындар, мускулдар һыҙлай. Респиратор билдәләр һуңыраҡ башлана, йүткереү, ҡайһы саҡта танауҙан һыу ағыуы ауырығандан һуң 2-3-сө тәүлектәрҙә генә барлыҡҡа килә. Йүткереү ҡоро була", - ти Поздняков.

РФ Һаулыҡ һаҡлау министрлығының А. Смородинцев исемендәге Киҙеү фәнни-тикшеренеү институты директоры урынбаҫары Дарья Даниленко белдереүенсә, киҙеү быйыл да көҙ аҙағы - ҡыш башында тараласа҄ҡ. Коронавирус ныҡ таралған йылдарҙа киҙеүҙең әүҙем мәле башҡа ваҡытҡа шылып торһа, хәҙер ул үҙенең элекке мәленә кире ҡайта. Киҙеү циркуляцияһы март-апрелдә тамамланасаҡ.

# ҺЫУ ДАУАҺЫ



**Төнөн йоҡлар алдынан һыу эсмәйем, уяныу тура килә, тигәндәрен йыш ишетергә тура килә.**

Был йәһәттән кардиолог бына нимә ти: "Баҫып торғанда һыу аҫҡа төшә, шуға күрә аяҡ шешә. Ятҡас, тәндең аҫҡы өлөшө бөйәр кимәлендә була, шуға шыйыҡсалар китә, сөнки организмға быны горизонталь торошта эшләүе еңелерәк.Токсиндарҙы сығарыу өсөн организмға билдәле бер минимум һыу кәрәк. Эсеү ваҡыты ла бик мөһим, һыу билдәле бер мәлдә генә организм эшмәкәрлегенә йоғонто яһай:

- уянғас та 2 стакан һыу эсеү эске ағзаларҙы әүҙемләштерергә булышлыҡ итә;

- ашар алдынан 1 стакан һыу аҙыҡ эшкәртеү өсөн яҡшы;

- һыу, мунса инер алдынан 1 стакан һыу эсеү ҡан баҫымын түбәнәйтә;

- йоҡлар алдынан 1 стакан һыу инсульт һәм инфарктты иҫкәртә.

Бынан тыш, йоҡлар алдынан һыу эсеү ҡорошҡаҡ тотоуын иҫкәртә, сөнки аяҡ мускулына һыу етмәһә, ул төндә тартыша.

УҢЫШ ҠАҘАН



# ҺОРАҒЫҘ - АЛЫРҺЫҒЫҘ

## Сираттағы ресторан

Минең киләсәккә бәйле проблемаларым бар: кешеләрҙең киләсәк тураһында һөйләгәнен тыңларға яратмайым. Әлбиттә, минә яңы идеялар, яңы проекттар өҫтөндә эшләү оҡшай, әммә план һәм расписаниеларҙы яратмайым.

Кемгәлер ниндәйҙер проект тураһында һөйләйем икән, хәҙерге ваҡытта һөйләйем, сөнки ул минең башымда бар инде. Шуны ла яҡшы беләм: уйымда ғына был проектты тормошҡа ашырыуым менән Йыһандың универсаль ҡануны уны үҙе тормошҡа ашырып та ҡуяса҄ҡ. Һәр саҡ шулай.

Ни өсөн? Сөнки ҡанун шундай. Уны анализларға, һорашырға, ваҡ кисәктәргә тураҡларға һәм тәмләп ҡарап аңларға кәрәкмәй. Ул - Йыһан ҡануны. Шуға күрә уны файҙаланығыҙ!

Аңлы энергия тулҡыны булған фекер менән есем араһында бер ниндәй айырма юҡ. "Улайһа, ни өсөн беҙ уйлаған ваҡытта уҡ уй-фекерҙәребеҙ матдиләшмәй?" - тиерһегеҙ. Сөнки энергия бик әҙ. Төп сәбәп шунда ғына. Ә һеҙ класс таҡтаһы эргәһендә ятҡан аҡбурҙың энергияһы йыл буйына Нью-Йорк кеүек ҙур ҡаланы электр менән тәьмин итеүгә еткәнен беләһегеҙме? Фекер тиҙ арала матдиләшһен өсөн ул һәр саҡ һеҙҙең уйыҡыҙҙа йәшәргә һәм һеҙ энергия менән тулы булырға тейешһегеҙ. Шикләнеү, борсолоу, хәүеф һеҙҙе ижади энергиянан мәхрүм итә.

Мин күптән түгел дуҫым менән ресторанда булдым. Ул ризыҡтарға, сервировкаға, тәмле еҫтәргә иғтибар итмәйенсә, уға ни өсөн күп аҡса кәрәклеге тураһында һөйләнә. "Ул аҡса нимәгә кәрәк?" - тип һорағас, "Әгәр аҡсам күп булһа, теләгән нәмә менән шөғөлләнер, ысынлап йәшәр, дуҫтарым менән сәйәхәттәргә йөрөр, тормоштан ҡыуаныс табыр, иң яҡшы рестарандарҙа тукланыр инем..." - тине. Эйе, бәлки, ниһайәт, алдында ултырған ризыҡты ашап ҡарар ине... Тел төбөн аңлағанһығыҙҙыр: киләсәгегеҙҙе планлаштырыуҙан туҡтағыҙ һәм бөгөн эшләй алған мөмкинлекте аҙаҡҡа ҡалдырмағыҙ, мәләндә ғүмерҙең ҡәҙерен белеп ҡалығыҙ.

## Аҡса, аҡса, аҡса

Кемдәр аҡса тураһында күберәк уйлай? Кемгә аҡса етмәй, шулар. Байҙар аҡса тип үлеп бармай. Ярлылар тик аҡса тураһында ғына уйлай. Аҡса - барлыҡ яуызлыҡтың тамыры, тиеүселәр бигерәк тә. Мине былай ҡараш бөтөнләй ҡыҙыҡһындырмай. Аҡса - ағышы тормош тәжрибәгеҙҙе мөмкин тиклем төрләндереү һәм яңы мажаралар өҫтәргә мөмкинлек биреү сараһы ғына.

Тормошоғоҙҙо ысынлап та ғәҙәти булмағанса үткәрергә теләһәгеҙ, аҡсаны яратырға өйрәнергә кәрәк. Һуңынан уны үҙеңдең партнерың итергә, аҙаҡтан инде иң яҡшы союздашҡа әйләндерергә, кәрәкле сумма һәр саҡ эргәлә, яҡын ғына, аҡса туп-тулы һәм теләгән ваҡытта һеҙҙең ҡулда булыуына ышанырға, үҙегеҙҙе аҡса алыуы еңел, бик еңел, ысынлап та еңел икәнлегенә ышандырырға кәрәк. Аҡсаны эшләмәйҙәр һәм уға лайыҡ булмайҙар. Уны бары тик алалар. Шуға күрә, ваҡытты бушҡа уҙҙырмағыҙ, алығыҙ. Улар Ер тип аталған Ожмахта булған осороғоҙҙа һеҙгә ҙурҙәре аға. Был - Ергә сәйәхәткә лайыҡ булған һәр кем өсөн "барыһы ла индерелгән" тигән шарт.

**Пьер МОРАНСИ.**



### 30 ОКТЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.45 "Жить здорово!" [16+]
10.35, 11.20, 0.15, 1.00, 1.45, 2.30, 3.05, 3.20, 4.10 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
12.50, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
17.15 Премьера. "Давай поженимся!". [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.55 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Бизон: дело манекенщицы". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Наши. [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Зеркало лжи". [16+]
23.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05 Т/с "Тайны следствия-7". [12+]
3.45 Т/с "Морозова". [16+]
4.38 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 23.30 Автограф. [12+]**
**10.30 "Ҡурай даны". [12+]**
**10.45 Д/ф "Центр ментального здоровья". [12+]**
**11.00 Новости недели (на рус.яз).**
**11.45, 13.45, 17.45, 4.00 Интервью. [12+]**
**12.00 Преображение. [12+]**
**12.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00 Бәхетнамә.**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 "Этно-краса". [12+]**
**15.30 Преград. Net. [6+]**
**15.45 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**16.00 Башкорттар. [6+]**
**16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**16.45, 20.15, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**18.00 Специальный репортаж. [12+]**
**18.15, 3.45 Остаз. [12+]**
**19.00, 4.15, 5.15 Телецентр. [12+]**
**20.00 Сәнгелдәк. [6+]**
**20.30 Телецентр.**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Атлас Баженова: Башкортостан. [12+]**
**0.00 Бәхетнамә. [12+]**
**1.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**1.30 Спектакль "Кьоджинские перепалки". [12+]**

### 31 ОКТЯБРЯ ВТОРНИК ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.45 "Жить здорово!" [16+]
10.35, 11.20, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 Премьера. "Давай поженимся!". [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.55 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Бизон: дело манекенщицы". [16+]
0.15, 1.00, 1.45, 2.30, 3.05, 3.20, 4.10 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Наши. [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Зеркало лжи". [16+]
23.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05 Т/с "Тайны следствия-7". [12+]
3.45 Т/с "Морозова". [16+]
4.38 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 "Ете егет". [12+]**
**10.45 Д/ф "Аграрный университет". [12+]**
**11.00, 16.00 Автограф. [12+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 13.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Тайм-аут. [12+]**
**12.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00 Бәхетнамә.**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Детей много не бывает. [6+]**
**15.45 "Кош юлы. Балалар". [6+]**
**16.45, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**17.00, 22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00, 3.45 Тормош. [12+]**
**18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Амур" (Хабаровск). КХЛ.**
**23.00 Башкирские каникулы. [12+]**
**23.45 "Ҡурай даны". [12+]**
**0.00 Бәхетнамә. [12+]**
**1.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**1.30 Спектакль "Оль-ля-ля". [12+]**
**4.15, 5.15 Телецентр. [12+]**

### 1 НОЯБРЯ СРЕДА ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.45 "Жить здорово!" [16+]
10.35, 11.20, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 Премьера. "Давай поженимся!". [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.55 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Троцкий". [16+]
0.15, 1.00, 1.45, 2.30, 3.05, 3.20, 4.10 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Наши. [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Зеркало лжи". [16+]
23.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05 Т/с "Тайны следствия-8". [16+]
3.45 Т/с "Морозова". [16+]
4.38 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Алтын тирмә. [12+]**
**10.45 История одного села. [12+]**
**11.00 "Дорога к храму". [6+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00 Дознание. [16+]**
**12.15 Патриот РФ. [12+]**
**12.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**14.00 Бәхетнамә.**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 "КультУра". [6+]**
**15.30 МузКәрәҙ. [6+]**
**16.00 "Бай". [12+]**
**16.45, 20.15, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**18.00, 3.15 Автограф. [12+]**
**19.00, 4.15, 5.15 Телецентр. [12+]**
**20.00 Сәнгелдәк. [6+]**
**20.30 Телецентр.**
**22.00, 3.45 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байык-2023". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**0.00 Бәхетнамә. [12+]**
**1.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**1.30 Спектакль "Тамарис". [12+]**

### 2 НОЯБРЯ ЧЕТВЕРГ ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.45 "Жить здорово!" [16+]
10.35, 11.20, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 Премьера. "Давай поженимся!". [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.55 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Троцкий". [16+]
0.15 Д/ф "Диагноз - Бандера". [16+]
1.15, 2.00, 2.45, 3.05, 3.30 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Наши. [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Зеркало лжи". [16+]
23.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05 Т/с "Тайны следствия-8". [16+]
3.45 Т/с "Морозова". [16+]
4.38 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Башкирские каникулы. [12+]**
**10.45 Остаз. [12+]**
**11.00, 3.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 13.45, 16.15, 3.30, 4.00 Интервью. [12+]**
**12.00 Историческая среда. [12+]**
**12.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00 Бәхетнамә.**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 "Сулпылар". [6+]**
**15.45 "Городок АЮЯ". [6+]**
**16.00, 3.45 История одного села. [12+]**
**16.45, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**17.00 Своих не бросаем. [12+]**
**17.15 История признания. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 Башкорттар. [6+]**
**18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Ак барс" (Казань). КХЛ.**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Бәхетнамә. [12+]**
**1.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**1.30 Спектакль "Судьба выбранная мной". [12+]**
**4.15, 5.15 Телецентр. [12+]**

### 3 НОЯБРЯ ПЯТНИЦА ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 16.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.45 "Жить здорово!" [16+]
10.35, 11.20, 14.15, 17.10 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
15.10 Премьера. "Давай поженимся!". [16+]
16.15 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости.
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 "Фантастика". Следующий уровень. [12+]
23.40 Матадор. [18+]
0.40, 1.25, 2.10, 2.55, 3.40, 4.30, 5.15 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
5.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.15 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
16.30 Прямой эфир. [16+]
21.30 Ну-ка, все вместе! [12+]
23.55 Истории Большой Страны. [12+]
0.55 Х/ф "Поздние цветы". [12+]
4.35 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 18.00 "Йома". [6+]**
**10.30 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**11.00 Атлас Баженова: Башкортостан. [12+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00, 19.45 История одного села. [12+]**
**12.15, 13.45, 17.45, 21.15 Интервью. [12+]**
**12.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 2.40 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 0.00 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 "Гора новостей". [6+]**
**15.15 Лит-ра. [6+]**
**15.45 "Этно-краса". [12+]**
**16.00 "Аль-Фатиха". [6+]**
**16.45, 20.15, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**19.00 Честно говоря. [12+]**
**20.00 Сәнгелдәк. [6+]**
**20.30 Ете егет. [12+]**
**22.00 "Своих не бросаем". [12+]**
**22.15 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00 "Башкорт йыры-2023". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**23.45 Остаз. [12+]**
**1.00 Концерт Рушана Биктимирова. [12+]**
**3.10 "Гайфи агай, женись давай!" [12+]**
**5.00 "Млечный путь". [12+]**

### 4 НОЯБРЯ СУББОТА ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Х/ф "Офицеры". Легендарное кино в цвете. [0+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Д/ф "Империя: Петр I". [12+]
14.55 Т/с "Начальник разведки". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 Премьера. "Я люблю мою страну". [0+]
19.20 Премьера. "Я РУССКИЙ". SHAMAN. Большой сольный концерт. [0+]
21.00 "Время".
21.35 Т/с "Троцкий". [16+]
23.35, 0.20, 1.05, 1.50, 2.35, 3.25, 4.10, 4.50, 5.25 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

4.40 Х/ф "Злоумышленница". [12+]
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан. День народного единства.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00 Вести. День народного единства.
11.30 Большой праздничный концерт "Песни русского мира".
13.00 Д/ф "Русская смута. История болезни". [12+]
14.50 "Измайловский парк". Большой юмористический концерт. [16+]
17.00, 20.00 Вести.
17.50 Привет, Андрей! [12+]
21.00 Х/ф "Рецепт на любовь". [16+]
0.30 Х/ф "Нет жизни без тебя". [12+]
3.55 Х/ф "Олюшка". [12+]
5.33 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30, 18.45 Новости (на баш. яз).**
**7.45, 16.00 Орнамент. [12+]**
**8.00, 2.00 Тәмле. Мы вместе! [12+]**
**8.30, 2.30 "Ете егет". [12+]**
**9.15 Остаз. [12+]**
**9.30 Новости СВО (на рус. яз).**
**9.45 "Своих не бросаем". [12+]**
**10.00 Это мы! [6+]**
**10.30 Елкән. [6+]**
**11.00 Финал Первого международного конкурса мастеров детского национального костюма "Такыя". [6+]**
**13.00 Автограф. [12+]**
**13.30 Башкорттар. [6+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**16.15 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Сибирь" (Новосибирск). КХЛ.**
**19.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**20.00 Сәнгелдәк. [6+]**
**20.15, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**20.30 Д/ф "Герои СВО. Святое братство". [16+]**
**21.15 Интервью. [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00, 3.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.30 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 Караоке по-башкирски. [12+]**
**23.45 "Добровидение-2021". [12+]**
**1.05 Новости недели (на баш. яз). [12+]**
**3.45 "Млечный путь". [12+]**
**4.45 Колесо времени. [12+]**
**5.45 Аль-Фатиха. [6+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

### 5 НОЯБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10, 0.35, 1.20, 2.05, 2.50, 3.35, 4.25, 5.10 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
6.55 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.40 "Часовой". [12+]
8.10 "Здоровье". [16+]
9.20 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
9.40 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.10 Премьера. "Наше всё". [12+]
11.05 Премьера. "ПроУют". [0+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Д/ф "Империя: Петр I". [12+]
13.50 Д/ф "Империя: Анна Иоанновна". [12+]
14.55 Т/с "Начальник разведки". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 Премьера. "Михаил Задорнов: вся жизнь". [16+]
19.15 Премьера. "Эксклюзив" с Дмитрием Борисовым. [16+]
20.05 Премьера. "Кто хочет стать миллионером?". [12+]
21.00 "Время".
21.35 Т/с "Троцкий". [16+]
22.30 Х/ф Премьера. "Далекие близкие". [12+]

### РОССИЯ 1

5.50 Х/ф "Вратарь Галактики". [6+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00 Вести.
11.40 Большие перемены. [6+]
12.40 Т/с "Всем по 50". [12+]
17.50 Песни от всей души. [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.30 Т/с "Демон революции". [16+]
3.18 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз).**
**7.45 "Йома". [6+]**
**8.15 Тормош. [12+]**
**8.45 Тәмле. Мы вместе! [12+]**
**9.15, 17.45, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**9.30 Новости СВО (на баш. яз).**
**9.45 Орнамент. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Книга сказок. [6+]**
**10.45 Городок АЮЯ. [6+]**
**11.00 Гора новостей. [6+]**
**11.15 Сулпылар. [6+]**
**11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз). [12+]**
**13.15, 3.00 Башкирские каникулы. [12+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**15.00 Историческая среда. [12+]**
**15.30 Дорога к храму. [6+]**
**16.00 Честно говоря. [12+]**
**16.45 Патриот РФ. [12+]**
**17.00 "Елкән". [6+]**
**17.30 Интервью. [12+]**
**18.00 Дознание. [16+]**
**18.15 Преображение. [12+]**
**18.45 Әлләсе... [6+]**
**19.30 Концерт "Патриотическая песня". [12+]**
**21.30, 3.45 Новости недели (на рус.яз.).**
**22.15, 2.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.45 Д/ф "Доброволец". [16+]**
**23.15 Концерт Гальсар Байгускаровой. [12+]**
**0.35 Спектакль "Очень простая история". [12+]**
**4.30 История одного села. [12+]**
**4.45 "Млечный путь". [12+]**
**5.45 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**6.00 Новости недели (на рус.яз.). [12+]**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1445 һижри йыл.*

| Октябрь - Ноябрь (Рабигел ахыр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 30 (15) дүшәмбе | 6:45 | 8:15 | 13:30 | 15:31 | 17:42 | 19:12 |
| 31 (16) шишәмбе | 6:47 | 8:17 | 13:30 | 15:30 | 17:40 | 19:10 |
| 1 (17) шаршамбы | 6:50 | 8:20 | 13:30 | 15:28 | 17:38 | 19:08 |
| 2 (18) кесе йома | 6:52 | 8:22 | 13:30 | 15:26 | 17:36 | 19:06 |
| 3 (19) йома | 6:54 | 8:24 | 13:30 | 15:25 | 17:34 | 19:04 |
| 4 (20) шәмбе | 6:56 | 8:26 | 13:30 | 15:23 | 17:32 | 19:02 |
| 5 (21) йәкшәмбе | 6:58 | 8:28 | 13:30 | 15:22 | 17:30 | 19:00 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# 4 НОЯБРЬ - ХАЛЫҠТАР БЕРҘӘМЛЕГЕ КӨНӨ

**Был байрам 2005 йылдан алып билдәләнә. Ул Рәсәй тарихында бик мөһим ваҡиғаларҙың береһенә арнап булдырылған - 1612 йылда Мәскәүҙе поляк интервенттарынан азат итеүгә, шулай уҡ Ҡаҙан Изге Инә иконаһы көнөнә.**



Был көндә халыҡ ополчениеһы Ҡытай-ҡаланы штурм менән яулаған. Кешеләр сығышына, ниндәй дин тотоуына, йәмғиәттәге урынына ҡарамаҫтан, берҙәмлек һәм батырлыҡ өлгөһө күрһәтә. Тарихи йәһәттән был иҫтәлекле көн Руста Фетнәле ваҡыт тамамланыуға бәйле: Иван Грозный батша үлгәндән һуң 1613 йылға, Романовтар династияһы тәхеткә ултырғанға тиклем. Фетнәле ваҡыт - Мәскәү дәүләтселегенең көрсөккә терәлгән осоро, ялған батшалар күбәйә, власть ете бояр хөкүмәте ҡулына ҡала, улар рус тәхетенә католиктар короленең улы Владиславты ултыртырға ниәтләп, Кремлгә поляк ғәскәрҙәрен үткәрә. Ошондай мәлдә патриарх халыҡты Ватанын һәм инанысын яҡлап, баҫҡынсыларға ҡаршы сығырға саҡыра. Быны барыһы ла күтәреп ала һәм баш ҡаланы азат итә.

1649 йылда уҡ Алексей Михайлович батша указы менән Ҡаҙан Изге Инә иконаһы көнө дәүләт байрамы тип иғлан ителә, ә 20 быуатта Кузьма Мининды хәтергә алыу көнө була. Әммә 1917 йылғы революциянан һуң был ғәҙәт онотолоп тора. Шуға Халыҡтар берҙәмлеге көнө яңы уйлап табылған байрам түгел, ә кире тергеҙелгән, тиергә кәрәк.




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**41-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Тантана. Поход. Ҡолғона. Ата. Зәмзәм. Әләм. Ҡуян. НЛО. Вагнер. Исхан. Ғәбит. Ғәскәр. Ғүмәрова. Ҡылысбай. Ваза. Ра. Ал. СССР. Ыҙма. Ми. Ылҡа. Йола.

**Вертикаль буйынса:** Шафиҡова. Шәмәхә. Уҡа. Ноғала. Ҡармаҡ. Ылымыҡ. Ғәм. Наполеон. Һә. Асамай. Оҫҡон. Абдразаҡов. Ғафаров. Густав. Зенон. Майор. Роза.

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**31 октябрь "Ҡара йөҙҙәр"** (М. Ғафури), драма. 16+

**2 ноябрь "Әсмә"** (Р. Фәхретдинов, Ш. Шәкүрова инсц.), драма. 12+

**3 ноябрь Премьера! "Килен"** (З. Мусина), драма. 16+

**4 ноябрь Премьера! "Еҙнәкәй"** (Х. Ибраһимов), музыкаль комедия. 18.00 12+

**5 ноябрь "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама. 18.00 16+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**3 ноябрь Премьера! "Сказание о семи батырах"** (Д. Йосопов), фэнтези. 11.00, 13.00 0+

**4 ноябрь "Ханума"** (А. Цагарели), музыкаль комедия. 18.00 12+

**5 ноябрь "Айболит и Бармалей"** (К. Чуковский), мюзикл. 12.00 0+

**"Диләфрүзгә дүрт кейәү"** (Т. Миңнуллин), тамаша. 18.00 12+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

*Башҡорт опера һәм балет театрының Бәләкәй сәхнәһендә:*

**4 ноябрь "Терем-теремок"** (Д. Гараева, В. Щербакова). 12.00, 14.00 0+

**5 ноябрь "Буратино"** (А. Толстой). 12.00, 14.00 0+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**31 октябрь "Миҙгелдәр"** камера оркестры концерты. 6+

**4 ноябрь "Музыку слушаем вместе".** 11.00 0+

**"Музыкальный интерактив"**. 13.00 0+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**31 октябрь Премьера! "Ҡыҙҙар килде ауылға"** (Н. Ғәйетбаев), музыкаль комедия. 12+

**1 ноябрь "Правда за нами..."** әҙәби-музыкаль лекторий. 14.00 6+

**2 ноябрь "Хазина"** (С. Әбүзәр), комедия. 12+

### А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**3 ноябрь Айгөл Хәкимованың** ижад кисәһе. 18.00 12+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**1 ноябрь Премьера! "Пусть звучит курай Батыра!"** музыкаль-әҙәби лекторий. 12.00 0+

**2 ноябрь "Аҡ ҡалфаҡ"** (М. Фәйзи), драма. 12+

**4 ноябрь "Тормош - ҡуласа"** (Т. Миңнуллин), драма. 18.00 12+

**5 ноябрь "Три богатыря и Соловей-разбойник"**, әкиәт. 12.00 0+

**"Мир ОТКРЫТиЯ"** музыкаль-әҙәби лекторий. 17.00 12+

**"Нисек кейәүгә сығырға?"** (Н. Ғәйетбаев), комедия. 18.00 12+

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Октябрь айында тыуған көндәрен билдәләүсе - **Миәкә районы** Туҡһанбай ауылынан Лира Бәҙретдинова, **Шишмә районы** Ҡара Яҡуп ауылынан Ф. Иманғолов, **Әбйәлил районы** Байым ауылынан Рәмил Ғәскәров, **Өфө районы** Шамонино ауылынан Фәриҙә Ҡаҙаҡбаева, Рәйфә Вәлиева, Гөлгөнә Фәйзуллина, **Белорет районы** Сосновка ауылынан Нәфисә Заһретдинова һәм башҡа уҡыусыларыбыҙҙы ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ! Күркәм ғүмер байрамығыҙ менән барығыҙҙы тәбрик итәбеҙ һәм ҡоростай ныҡлы һаулыҡ, бәхетле ғүмер, барлыҡ эштәрегеҙҙә уңыштар юлдаш булыуын, яҡындарығыҙ менән күңел йылығыҙҙы бүлешеп, изгелектәр күреп йәшәүегеҙҙе теләйбеҙ.

**Әйткәндәй, ғүмер байрамығыҙ менән ҡотланырға теләйһегеҙме - гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларығыҙҙы редакцияға ебәргәндә тыуған көн датаһы тураһында хәбәр итергә онотмағыҙ.**

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

✔ *Юрға менгән юлдашынан айырылыр, күп йәшәгән ҡорҙашынан айырылыр, күп һөйләгән дуҫынан айырылыр.*

*(Башҡорт халыҡ мәҡәле).*



АФАРИН!

# ИСЕМЕНӘ КҮРӘ ЕСЕМЕ,

## йәки Зөбәржәттең аҫылташтай балҡығаны

**Береһенән-береһе егәрле, уңған һәм талантлы халыҡ йәшәй Ишембай районы Кинйәбулат ауылында. Ишембайҙар үҙҙәре был ауылды "Шаһиевтарҙың ауылы" ти ҙә ҡуялар. Хәйер, Шаһиевтарҙы районда ғына түгел, республикала белмәгән кеше юҡтыр. Ауылдың Мәҙәниәт һарайында эшләп килгән "Зөбәржәт" башҡорт халыҡ театрына нигеҙ һалыныуға 20 йыл тулыу айҡанлы унын етәксеһе, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Шаһиева Зөбәржәт Фәррәх ҡыҙының бенефисында ла бер-бер артлы сәхнәгә күтәрелеп йыр һуҙған Шаһиевтарға һоҡланмау мөмкин түгел ине! Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған ауыл хужалығы хеҙмәткәре, Ишембай ҡалаһының почетлы гражданы Шаһиев Марс Хызыр улының, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған һәм халыҡ артисы Альберт Шаһиевтың сәхнәгә сығыуы ғына ла сараға мәртәбә өҫтәне. Эйе, һоҡландырҙы Шаһиевтар! Килендәрен ана нисек күтәрмәләп ебәрҙеләр!**



Республикабыҙҙа киң билдәле Шаһиевтар нәҫеленә килен булып төшөү - ҙур мәртәбә лә, оло яуаплылыҡ та. Төшкән нигеҙенә таш булып һеңеү генә аҙ бында, дәрәжәгә тин фамилияна торошло булмышын, булмышың менән бергә халҡың мәнфәғәтләренә, ниәт-маҡсаттарына тоғролоғоң да кәрәк. Зөбәржәт Фәррәх ҡыҙы холоҡ-фиғеле менән дә, фиҙаҡәр хеҙмәте менән дә Шаһиевтар ышанысын тулыһынса аҡлаған, улай ғына ла түгел, үҙе килен булып төшкән Кинйәбулат ауылының зөбәржәтенә - аҫыл ташына әүерелгән шәхес.

1981 йылда килеп төпләнә ул Кинйәбулатҡа. Дөрөҫөрәге, Кинйәбулат ауылы уҙамандарының берәүһе - Шаһиев Рәжәп Сынтимер улы, танышыуҙарына бер ай тигәндә, Ишембай трикотаж фабрикаһында эшләп йөрөгән Зөбәржәтте, ай-вайына ҡуймай, алып ҡайта. Шунан бирле береккән нигеҙенә тоғро Зөбәржәт Фәррәх ҡыҙы. Тоғро һәм рәхмәтле. Бында ул үҙен тапҡан, асылына ҡайтҡан. Ә асылы - сәхнә. Ошо асылына бер нисә тапҡыр хыянат итә ул. Урта мәктәпте тамамлау менән, күңеле сәнғәткә бик нығ тартылһа ла, ябай колхозсы ғаиләһенә бер юлы ике студенты (ағаһы физкультура техникумында уҡып йөрөгән була) уҡытыуы ауырға тура килер тип, Стәрлетамаҡ аяҡ кейемдәре фабрикаһына эшкә урынлаша. Беренсе класта уҡығанда уҡ шәл бәйләү өмәләренә йөрөп, ата-әсәһенә аҡсалата ҙур ярҙам итеп өйрәнгән сәмсел ҡыҙ, бер аҙ аҡса туплау менән, бухгалтерҙар курсын тамамлай ҙа, Төҙөүселәр мәҙәниәт һарайына бухгалтер ярҙамсыһы булып эшкә урынлаша.

Хыялына табан тәүге аҙымы була был: Мәҙәниәт һарайында ойошторолған үҙешмәкәр түңәрәккә йөрөй башлай, ситтән тороп сәнғәт училищеһена уҡырға инә. Унда бер йыл уҡығас, Өфө сәнғәт институтына юллана. Ике йылдан бәләкәйҙән туғандары өсөн хәстәрлекте үҙ иңдәренә алып өйрәнеү йәнә лә үҙенекен итә: үҙенән һуң өс ҡустыһын уҡытырға, үҙе нисек тә юғалып ҡалмаҫ, малайҙарҙы кеше итергә кәрәк бит, тигән ниәт менән, институтты ташлап, Ишембай ҡалаһына эшкә юллана. Ошонда тап итә ул үҙенең ғүмерлек юлдашын. Ғүмерлек юлдашын да, тоғро тамашасыһын да, терәк-таянысын да.

Бер-бер артлы донъяға килгән ике ул, бер ҡыҙ үҫтергән арала ситтән тороп Стәрлетамаҡ ҡалаһында сәнғәт техникумының театр бүлеген тамамлай. Тәүҙә Мәҙәниәт йортонда художество етәксеһе булып эшләй, эш барышында мәҙәниәт усағына һүҙ сәнғәтен һөйөүселәрҙе йәлеп итеп, театр коллективы ойоштороп ебәрә. Башлыса 35-60 йәштәге һәүәҫкәр артистарҙан бына тигән коллектив туплана. Үҙ театры булған ауыл халҡы байрам һайын спектакль ҡарап рәхәтләнә, район буйлап гастролдәргә лә сыға зөбәржәттәр. Уларҙы республикала ла таныйҙар, ижади эшмәкәрлектәрен юғары баһалайҙар: 2003 йылда "Зөбәржәт" драма коллективына "Халыҡ театры" исеме бирелә. Театрҙың репертуарында Мостай Кәримдең "Ай тотолған төндә", "Айгөл иле", "Ҡыҙ урлау", Әнғәм Атнабаевтың "Шоңҡар", "Законлы никах менән", Әминә Яхинаның "Ҡайрылмаһын ҡанаттар", Сафуан Әлибаевтың "Салауат саҡырыуы", Хәкимйән Зариповтың "Их, кәләше лә кәләше", Әсғәт Мирзаһитовтың "Әсәләр көтәләр улдарын" спектаклдәре бар. Республика Халыҡ театрҙары фестивалдәрендә яуланған уңыштары ла байтаҡ. М.Кәримдең "Ай тотолған төндә" трагедияһындағы Таңкабикә роле өсөн Зөбәржәт Фәррәх ҡыҙы үҙе, "Ҡыҙ урлау" комедияһындағы Дәүләтбай роле өсөн Фәнил Кәлимуллин, өс әбей ролендәге Гөлсирә Дәүләтова, Венера Мирасова, Виктория Ғәлимовалар - мәртәбәле номинацияларға, коллектив Әсғәт Мирзаһитовтың "Әсәләр көтәләр улдарын" (2016), Хакимйән Зариповтың "Их, кәләше лә кәләше!" (2020) спектаклдәре менән Гран-Приға лайыҡ була.

Ә шулай ҙа Зөбәржәт Фәррәх ҡыҙының иң ҙур уңышы - ауыл клубының сәхнәһен ысын мәғәнәһендәге мәҙәниәт усағына, фекерҙәштәренең йыйылыу майҙаны кимәленә күтәрә алыуылар, моғайын. Халыҡ театры - күптән инде ауыл халҡының яратҡан артистарына әйләнеп бөткән коллективтың икенсе өйө, тиһәң дә хата булмаҫ. "Әллә ниндәй тартыу, ылыҡтырыу, ышандырыу көсө бар унда", - тиҙәр ошо театрҙы үҙ итеүселәр. "Ҡыҙ урлау" спектаклендә сәхнәлә бер юлы 22 артист уйнаны, тематик кисәләргә йә концерттарға 100 кеше йыйған саҡтар ҙа булды, - ти Зөбәржәт Фәррәх ҡыҙы үҙенең тынғыһыҙ эшенең тағы ла бер уңышы менән бүлешеп. - Ауыл тормошоноң мең мәшәҡәтен ҡалдырып сәхнәгә менеү - батырлыҡ ул. Үҙҙәре аяҡ баҫырға ҡыймағандарҙы өгөтләргә лә тура килде, үҙем күндерә алмағанда, өйҙәренә барып саҡырырға тура килгәндә, тормош иптәшем дә ихлас ҡушылды. Кәрәк икән, ул водитель йә ҡораусы ла булды". Шулайҙыр. Хәләлең эшендең нескәлектәрен аңлап, ярҙам итеп тормаһа, ауыл ерендә мәҙәниәттең аҫыл ташына әйләнеп булмайҙыр.

Уйҙарымды Зөбәржәт Фәррәх ҡыҙын ҡотлау өсөн сәхнәгә күтәрелгән береһенән-береһе һөйкөмлө-һөйкөмлө балалары ла ҡеүәтләне. "Әсәйем ифрат егәрле кеше, уның тик ултырғанын күргәнем юҡ, һәр саҡ йүгереп йөрөп нимәлер эшләй, әммә юҡҡа юҡҡа билен йә тубыҡтарын һыйпаштырып ала, ә сәхнәлә бөтә ауыртыныуҙарын онота. Әсәйемдең дауаһы - сәхнә һәм ул уйнаған ролдәр", - тип кәлдәрҙә улдарының береһе. Улдары - юристар, ҡыҙҙары Стәрлетамаҡ сәнғәт колледжының театр бүлеген тамамлаған. Мин уларҙың матур итеп саф башҡортса һөйләшеүҙәренә иғтибар иттем. Йөҙҙәрендәге нур ҙа, телмәрҙәренең бөтөн, асыҡ, анығ булыуы ла - сәхнә тәрбиәһелер, улар ҙа алған әсәләренән сәхнә тәрбиәһен.

"Зөбәржәт" халыҡ театрында ҡанат нығытып, сәнғәт юлынан китеүселәр байтаҡ икән. Ишембай районы мәҙәниәт бүлеге етәксеһе Әлфиә Ринат ҡыҙы Тимербулатова ла сәхнәгә тап ошо коллективта аяҡ баҫа. Талантлы режиссерҙың иң һуңғы ижад емеше - бөгөн Өфө сәнғәт институтының театр бүлегендә уҡып йөрөүсе Мортаза Ханнанов. Остазының бенефисын да тап ул алып барҙы. Ошо сара барышында ла килен булып төшкән Кинйәбулат ауылы ерендә аҫылташ булып балҡыған икәнен тағы бер тапҡыр раҫланы Зөбәржәт Фәррәх ҡыҙы.

**Ғәлиә КӘЛИМУЛЛИНА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡикәтҡә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҠОРАЛ КЕМДЕКЕ...

## заман шуныҡы

Юрға менгән юлдашынан айырылыр, күп йәшәгән ҡорҙашынан айырылыр, күп һөйләгән дуҫынан айырылыр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Ҡулына балта йә көснә тотҡан кешене төҙөүсе йә музыкант тип әйтеп буламы? Шуның кеүек, аҡыллы һүҙ һөйләгән кешене лә аҡыллы тип атарға ашыҡма.

**(Эпиктет).**

Кеше фәрештә лә, хайуан да түгел, һәм уның бәхетһеҙлеге шунда: ул ни тиклем фәрештә булырға ынтыла, шул тиклем хайуанға әйләнә бара.

**(Б. Паскаль).**

Дуҫ табыуҙың берҙән-бер юлы - үҙеңә дуҫ булыу

**(Ральф Уолдо Эмерсон).**

Героизмға ышаныу беҙҙе герой итә.

**(Бенджамин Дизраэли).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Дуҫымдың ҡатыны вафат булды. Мин ҡайғы уртаҡлашырға килгәндә, дуҫым мәйетте һуңғы юлға оҙатыу мәшәҡәттәре менән була ине. Бына ул ҡатынының әйберҙәре һаҡланған комод йәшниген асты ла, унан бер төргәк килтереп сығарҙы. Төргәк эсендәге иҫ киткес матур селтәрле эске кейемдә ҡулына алды. "Мин был бүләкте 8-9 йыл элек сит илгә командировкаға барғанда алып ҡайтып, ҡатыныма бүләк иткәйнем, - тип һөйләп китте дуҫым. - Ҡатыным уны кеймәне, "Айырым бер осраҡта кейермен", тип, ҡәҙерләп һаҡланы. Бына шундай "айырым осраҡ" килде инде бына..."**

**Шулай тине лә дуҫым, матур эске кейемде вафат булған ҡатынына кейҙерәсәк башҡа әйберҙәр янына һалды. Шунан миңә табан боролоп:**

**"Бер ваҡытта ла "айырым осраҡ өсөн" тип, бер нәмә лә һаҡлама. Беҙ йәшәгән һәр көн - айырым осраҡ ул..." - тине.**

**Мин һаман дуҫымдың ошо һүҙҙәре тураһында уйлайым. Ул һүҙҙәр минең тормошомдо үҙгәртте шикелле. Бөгөн мин күберәк уҡыйым. Йортом алдындағы эскәмйәгә ултырып алам да, тирә-яҡҡа һоҡланам, әммә баҡсамдағы сүп-сарға, әйләнә-тирәмдәге ваҡ-төйәккә әллә ни иғтибар итмәйем. Мин ғаиләм, дуҫтарым менән - күберәк, эштә аҙыраҡ ваҡыт үткәрергә тырышам. Мин шуны аңланым: тормош - ул тәжрибә туплау, һәм уны баһаларға кәрәк...**

**Һәм тағы. Бер нимәне лә "айырым осраҡ" өсөн һаҡламайым. Шкафымда торған бар һауыт-һаба менән ҡулланам. Кәрәк икән, ҡала буйлап йөрөргә сыҡҡанда ла өр-яңы костюмымды кейеп алам... Йәшәйешкә шатлыҡ һәм йылмайыу килтерә торған бер нәмәне лә һаҡламайым һәм иртәгәгә ҡалдырмайым. Һәр көн, һәм минут - ул айырым осраҡ, тим үҙ-үҙемә..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 23042

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән ВӘЛИЕВА,
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
БР «Республика Башкортостан» нәшриәт йорто ДУП филиалы - «Башҡортостан» республика нәшриәтендә баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |
| **Матбуғат таратыу** | **252-39-99** |

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
27 октябрь 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы — **ПР905**

Тиражы - 3177
Заказ - 1479